ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Кискe Өфө

22-28 октябрь (ҡарасай) 2016

№43 (721)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Һөйләгән һүҙебеҙ...**

рухландырырлыҡ булһын



3

**Эсмәйем, тигәнде лә...**

эсергеләре килә шул



6

**Тыныс тормошта - бөрйән, юрматы, түңгәүер...**

ә яуға сапҡанда - башҡорт



8-9

**Уңышлы кеше -**

мәғлүмәтле кеше инде ул



11

**ТВ-программа** 14

***ИҒТИБАР! 13 октябрҙән 23 октябргә тиклем арзан хаҡҡа 2017 йылдың тәүге яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылыу ун көнлөгө иғлан ителә. Ошо арауыҡта ВО665 индекслы гәзитебеҙгә - 450 һум 06 тингә, ВО673 индекслыһына (предприятиелар һәм ойошмалар өсөн) - 478 һум 56 тингә, Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары һәм инвалидтары 410 һум 22 тингә яҙыла ала (мәғлүмәттең дауамы 2-се биттә).***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Беҙҙә күп эштәр, саралар, хеҙмәтсәндәр һорауы буйынса, тип ойошторола, тик бына халыҡ һүҙенә ҡолаҡ һалыусы бармы икән?

***Сәғит СӘЙФУЛЛИН, пенсионер:***

Былдай "эш итеү алымы" айырыуса совет заманында "уңышлы" ҡулланыла ине. "Хеҙмәтсәндәр һорауы буйынса" тигән һүҙбәйләнештәр заманында партия һәм хөкүмәт ҡарарҙарында ла киң урын алды. Шәхес культы йылдарында тап ошо билдәләмә аҫтында власҡа ярамаған бик күп кешеләр, кулаклыҡта ғәйепләнеп, "Халыҡ дошманы" сүрәтендә Себергә һөрөлдө, бер ниндәй дәлилдәрһеҙ атыуға хөкөм ителде... Аҙағыраҡ инде ошо уңайлы сәбәп менән хөкүмәттең популяр булмаған сәйәсәте бойомға ашырыла килде: мәҫәлән, спиртлы эсемлектәргә хаҡ арттырыу булһынмы, айнытҡыстар асыу йә уларҙы ябыу тиһеңме...

"Хеҙмәтсәндәр һорауы" бөгөнгө көндә лә үҙ йөҙө, үҙ асылына хеҙмәт итә алмай, ул һаман да кемдәр өсөндөр уңайлы битлек булып ҡала һәм сит мәнфәғәттәрҙә файҙаланыла. Ә ысынлап та хеҙмәтсән халыҡ мәнфәғәтендә булған бәләкәй ауылдар проблемалары, юлдар һалыу, мәктәптәрҙе, медпункттарҙы яптырмай алып ҡалыуҙы юллаған халыҡ һорауҙары һәм хаттары, һарғайышып, чиновниктар кабинетында туҙанға күмелеп ята бирә. Мәҫәлән, беҙ Өфөнөң Сипайлово бисәтәһендә йәшәүсе бер төркөм баҡсасылар, шул йүнәлештәге башҡа пассажирҙар менән һөйләшеп-килешеп, ДОК-тан аэропортҡа тиклем йөрөүсе 110с маршрутын яйға һалыуҙы һорап, "Башавтотранс" предприятиеһына хат яҙып та, телефон аша ла бер нисә тапҡыр мөрәжәғәт иттек, сөнки был маршрут автобустары онотҡанда бер йөрөй башланы. Дөрөҫөн әйткәндә, был автобустар аэропортҡа етәрәк "Ҡасаба" туҡталышындағы юлда көнө буйы теҙелешеп, ял итеп ултыралар. Был рейста иһә шәхси микроавтобус-такси хужалары хакимлыҡ итә, ә улар беҙҙе ташламалы махсус карталар буйынса хеҙмәтләндермәй, уларға аҡса кәрәк. Йөҙгә яҡын ҡултамғалы халыҡ һорауына, шулай итеп, иғтибар итеүсе лә, яуап биреүсе лә булманы.

Һуңғы ваҡытта был уңайлы һүҙбәйләнеш ҡайһы бер намыҫһыҙ әҙәмдәр өсөн дә мутлыҡҡа юл асып ҡуя. Ундай хәлдәр һайлауҙар ваҡытында йыш күҙәтелә. "Халыҡ һорауы буйынса" тип, урамда йәки фатирҙар буйлап ҡултамға йә булмаһа ул-был саралар өсөн аҡса йыйып йөрөүселәрҙә осрай. Был йәһәттән полиция граждандарҙы, айырыуса өлкән йәштәгеләрҙе иғтибарлы һәм һаҡ булырға саҡырып тора тороуға. Ләкин кешеләр төп башына ултырыуын дауам итә. Алданырға ярата шул беҙҙең халыҡ...

**(Дауамы 2-се биттә).**

АФАРИН!

# ӨФӨБӨҘҘӨ БИҘӘЙ...

## Зәйнәб апайыбыҙ һәйкәле




**Өфөлә Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Зәйнәб Биишеваға тантаналы рәүештә һәйкәл асылды. Октябрь проспектындағы аллеяла яҙыусының хеҙмәттәштәре, туғандары һәм яҡындары, студенттар һәм уҡыусылар йыйылды. Тантанаға Күгәрсен районынан яҙыусының яҡташтары ла килгәйне.**

Сара яҙыусының үҙе уҡыуында "Хәйерле көн!" шиғырының яҙмаһы һәм ҡала округы хакимиәте башлығы вазифаһын башҡарыусы Ирек Ялаловтың сығышы менән башланды. Һәйкәлде асыу хоҡуғы шағирә, Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе урынбаҫары Йомабикә Ильясоваға һәм яҙыусының Мәскәүҙән килгән улы Тельман Әминевҡа бирелде.

- Был - ҙур байрам, тормошомдағы иң бәхетле көн, - тине Тельман Әминев. - Әсәйемдең яҡты донъянан китеүенә 20 йыл үтте. Мин һәр саҡ уның хәтерен мәңгеләштереү тураһында уйландым. Һәйкәл бик матур, сквер менән бергә ул архитектура комплексын барлыҡҡа килтерә һәм Өфөнөң биҙәге булып тора...

Тантана З.Биишева исемендәге 140-сы башҡорт гимназияһы уҡыусылары башҡарыуында Зәйнәб Биишеваның шиғырҙарын уҡыу һәм сәскә һалыу менән тамамланды.

Бейеклеге өс метрға яҡын бронза һындың скульпторы - Владимир Дворник. Һәйкәл яҙыусының исемен йөрөткән "Китап" нәшриәте һәм Өфө һөнәрҙәр һәм сервис колледжы эргәһендә урынлашҡан. Һәйкәл янындағы биләмә төҙөкләндерелгән. Ошо урында Зәйнәб Биишева исемендәге сквер булдырылған.

Зәйнәб Абдулла ҡыҙы Биишева - Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты. Үҙенең шиғри йыйынтығын сығарған тәүге башҡорт ҡатын-ҡыҙы. Замандаштары уны әүҙем тормош позицияһы булған кеше, ысын илһөйәр, дөрөҫлөк һәм ғәҙеллек өсөн көрәшсе итеп хәтерендә ҡалдырған.

**Ләйлә АРАЛБАЕВА.**

12+

**✓ Ҡайһы бер етәкселәр үҙҙәренә кәрәк саҡта, "халыҡтың күп һанлы һорауҙары буйынса" тип, берәй эш атҡарып ҡуя ул, хатта күрмәй ҙә ҡалаһың. Бындай инициатива айырыуса һайлау кампаниялары алдынан әүҙемләшә.**



ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәпләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ЯУЛАНҒАНДЫ...

## һаҡлай беләйек!

***Фәнил ЯНЫШЕВ, шағир:*** Егерме алты йыл элек Башҡортостандың дәүләт суверенитеты идеяһын халыҡ дәррәү күтәреп алды, был үҙгәрештәрҙең бөтәһенең дә йәшәйешен үҙгәртә алырына ышанды. Республиканың мөктәсиллек яулауы яңы эштәргә, ҡаҙаныштарға дәртләндерҙе. Бер-нисә йыл эсендә республика юлдар һалыу буйынса Рәсәйҙә алдынғы урынға сыҡты, мәктәптәр, мәҙәниәт йорттары төҙөү йылдам үҫеш алды, яңы гәзит-журналдар асылды, радио һәм телевидениела башҡортса тапшырыуҙар күбәйҙе. Бөгөн беҙ ошо үҙгәрештәрҙең ыңғай һөҙөмтәһе шауҡымында йәшәйбеҙ. Йылдар үтә тора, тормошобоҙ, идеяларыбыҙ үҙгәрештәр кисерә тора. Ләкин ер мәсьәләһе генә һәр ваҡыттағыса актуаль булып ҡала: ул республика үҙаллылыҡ яулаған саҡта ла киҫкен торҙо, бөгөн дә тулыһынса хәл ителеп бөтмәгән.

Бөтә илдә колхоз, совхоздар тарҡала башлағанда беҙҙең республикала уларҙы һаҡлап ҡалыу буйынса ҙур тырышлыҡ һалынды. Тик шул саҡта ошо күмәк хужалыҡтарҙың үҫешенә яңы этәргес көс бирә торған закон ҡабул итә алманыҡ. Шуға күрә лә бөгөн ауырлыҡтар кисерәбеҙ. Ерҙе һатырға, ҡуртымға бирергә, кооперативтар, крәҫтиән һәм фермер хужалыҡтары төҙөргә рөхсәт биргән ҡарарҙар бар, ә уларҙы тормошҡа ашырыу механизмы эшләнеп бөтмәгән. Фермер булып ер алған кеше тракторын, орлоғон, ашламаһын ҡайҙан ала? Әлбиттә, үҙ инициативаһы менән генә эшләп, уңышҡа өлгәшеүсе кешеләр тураһында ла ишеткән бар. Ләкин уларҙың ҡайһы берәүһененең эш һөҙөмтәләре менән танышып, тәжрибә уртаҡлашып йөрөй башлаһаң, коммунистарҙың иҫкәртеүе иҫкә килеп төшә: эшсәндәрҙе ҡаты эксплуатациялау, эш хаҡын аҙ итеп түләү, алдаҡҡа ҡоролған эшмәкәрлек. Ауыл хужалығы өлкәһендәге һорауҙар кешелеклеле юл менән хәл ителергә һәм мотлаҡ урындағы халыҡ файҙаһын ҡайғыртырға тейеш. Юғиһә, ситтән килгән байыраҡ кешеләр ерҙе ҡуртымға алып, үҙ предприятиеларын төҙөп, хужалыҡтар ойоштороп, беҙҙең кешеләр батрак хәлендә ҡаласаҡ.

Ғөмүмән, милләттәштәр бөгөнгө көн менән генә йәшәмәһен, аныҡ маҡсаттар билдәләп тормош көтһөн һәм ер ҡәҙерен белһен ине. Үҙебеҙҙең тыуған республикабыҙҙа йәшәйбеҙ, аҫаба халыҡбыҙ. Ошо хужа булыу тойғоһон йөрәгебеҙҙә йөрөтөп, белмәгәндәрҙең иҫенә төшөрөп, еребеҙ, республикабыҙ өсөн башҡаларға ҡарағанда ла олораҡ яуаплылыҡ тойоп, яуланған хоҡуҡтарыбыҙ менән дөрөҫ файҙаланып, рухи ҡиммәттәребеҙҙе һаҡлап йәшәйек, тимәксемен.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

ӘЙТ, ТИҢӘГЕҘ...

# Беҙҙә күп эштәр, саралар, хеҙмәтсәндәр һорауы буйынса, тип ойошторола, тик бына халыҡ һүҙенә ҡолаҡ һалыусы бармы икән?

**(Башы 1-се биттә).**

***Сәүиә ХӘСӘНОВА, шәфҡәт туташы, Стәрлетамаҡ ҡалаһы:*** "Халыҡ һорауы буйынса" тигән һүҙҙәр менең өсөн хәҙер, киреһенсә, кешегә ҡаршы ойошторолоусы ниндәйҙер бер хаслыҡ уҡ булмаһа ла, тоҙаҡ һымағыраҡ ҡабул ителә башланы, сөнки ана шул магик һүҙҙәр тәьҫирендә бер нисә тапҡыр унайһыҙ хәлгә ҡалғыланым. Быйыл йәй Өфөгә билдәле психотерапевт Анатолий Кашпировский килә тигән хәбәрҙе ишетеп, яҡын ғына әхирәтемдең баштан сыҙай алмаған сирле ҡыҙын алып барырға булып киттем. Әсәһе имсәк бала менән декретта ултыра, барыбер йөрөтә алмаҫ ине. Медик булараҡ, минән бик үтенеп һораған, ризалашырға тура килде. Башҡа төрлө йомош менән былай ҙа баш ҡалабыҙға йыйынғанымды белә ине ул - баш тарта алманым. "Халыҡ һорауы буйынса Кашпировский сеанстарын тағы ла оҙайтты," тигән иғланды ишеткәс, Йәштәр һарайына аяҡ баҫыр урын да юҡтыр инде, тип ҡурҡып ҡына килгәйнек, гәжәпкә ҡаршы, халыҡ бик аҙ булып сыҡты. Беҙ өс көн рәттән килдек сеанстарға, сөнки улар түләүһеҙ алып барылды, ләкин өс көндә лә зал яртылаш буш булды. Киске сеанстар түләүле, тинеләр, бәлки, халыҡ шунда йөрөгәндер? Мин аптырабыраҡ ҡалдым: нисек инде, халыҡ һораһын да - зал буш торһон, имеш... "Халыҡ һорауы" тигәндәре реклама ғына булып сыҡты, ахыры. Өҫтәүенә, ауырыу ҡыҙға (уға 19 йәш) бындай дауаланыу килешеп тә бөтмәне: юлда ҡайтып барғанда уҡ өйәнәге ҡуҙғыны.

"Халыҡ һорауы буйынса" эшләнгән тағы бер мәсьәлә яныраҡ беҙ торған йортта йәшәүселәр араһында ҙур ғына ыҙғыш килеп тыуыуға сәбәпсе булды. "Халыҡ" тигәндәре кем икән һуң? Беҙ үҙебеҙ булабыҙ ҙа! Тик әлеге ҡарар хаҡында ғына бер ни ҙә белмәйбеҙ. Беҙҙең йорт яңы майҙансыҡ иркен генә. Ошо биләмәлә туптулы машина, кистәрен йәш балалы әсәләргә коляска менән түгел, хатта ябай йәйәүлегә лә подъезд тупһаһына тиклем юл табыуы ауыр, сөнки күрше йорттарҙа йәшәүселәр ҙә килтереп ҡуя бында машинаһын. Шуға күрә кемдер берәүҙең башына, йорт яны туҡталҡаһын түләүле итергә кәрәк, тигән уй тыуа. Ул кеше ана шул әлеге "халыҡ һорауы" битлеген файҙалана ла инде. Беҙҙән, ошо йортта йәшәүселәрҙән, бер кем дә һорап та торманы. Һораған хәлдә лә беҙ бындай эшкә ризалыҡ бирмәҫ инек. Бына шулай халыҡ "үҙ һорауына" үҙе ҡаршы булып килде лә сыҡты, үәт, әкәмәт!

***Илдус ҠОТДОСОВ, хеҙмәт ветераны, Өфө ҡалаһы Затон биҫтәһе:*** Ҡайһы бер етәкселәр үҙҙәренә кәрәк саҡта, "халыҡтың күп һанлы һорауҙары буйынса" тип, берәй эш атҡарып ҡуя ул, хатта күрмәй ҙә ҡалаһың. Бындай инициатива айырыуса һайлау кампаниялары алдынан әүҙемләшә. Юл һалһындармы, балалар майҙансыҡтары төҙөһөндәрме, йә ниндәйҙер башҡа берәй бина, объект төҙөп ҡуйһындармы. Был эштәрҙе үҙҙәренә унайлы ваҡытта, үҙ мәнфәғәттәрен алға ҡуйып башҡарһалар ҙа, бындай осраҡтарҙа, әлбиттә, халыҡтың теләге, һорауын юғарыла ишеткәндәр, тип ҡабул итәбеҙ инде ул. Тик халыҡ һорауын гел генә ишетеп бармауҙары ғына эсте бошора...

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Белеүегеҙсә, гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакциябыҙға ебәргән уҡыусыларыбыҙ даими рәүештә беҙҙең бүләктәргә лайыҡ була килә.**

Октябрҙә 2017 йылдың тәүге яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәрҙән бер кеше **"Антология поэзии Башкортостана"**, 2 кеше **Рәшит Назаровтың "Ер һәм Йыһан йыры"**, 1 кеше **Ноғман Мусиндың "Алдар батыр"**, 1 кеше **"Башкирские исторические предания и легенды"**, 1 кеше **"Әхмәтзәки Вәлиди"**, 10 кеше 2017 йылға **"Башҡортса дини календарь"** китаптарына лайыҡ буласаҡ.

**Почтальондар иғтибарына!** Гәзит-журналдарҙың таралыуы һеҙҙең егәрлелек, ныҡышмалыҡ, һеҙҙең йүгереп йөрөүҙәр аша атҡарылғанын беләбеҙ һәм баһалайбыҙ. Хеҙмәтегеҙҙе һүҙ менән генә түгел, бүләктәребеҙ менән дә билдәләмәксебеҙ. Иң күп "Киске Өфө"гә яҙҙырыусы почта хеҙмәткәрҙәрен бүләктәр көтә.

**Энтузиастар иғтибарына!** Туғандарығыҙҙы, таныштарығыҙҙы, хеҙмәттәштәрегеҙҙе һәм ауылдаштарығыҙҙы "Киске Өфө"гә яҙҙырып, редакцияға 10 квитанция күсермәһе ебәргән дуҫтарыбыҙҙы ла матур бүләктәр менән шатландырмаҡсыбыҙ.

**Әйҙәгеҙ, кем алыҡ!**




## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Өфөлә Рәсәй энергетика форумы һәм халыҡ-ара күргәҙмәләр асылды. Сараның төп темаһы - инновациялы энергетика. Ойоштороусылар фекеренсә, тап ул тармаҡта кәрәкле үҙгәрештәрҙең асылын сағылдыра. Рәсәй энергетика форумы барышында Өфөлә Рәсәй Энергетика министрлығы, Башҡортостан Хөкүмәте һәм ил төбәктәрененң профилле министрлыҡтары вәкилдәре ҡатнашлығында 25-тән ашыу сара үткәрелде. Дөйөм алғанда, форум эшендә 160 спикер һәм модератор ҡатнашты.

✓Милли йәштәр театры республиканың халыҡ шағиры, прозаик һәм драматург Мостай Кәримдең тыуған көнөн билдәләргә әҙерләнә. Театрҙың матбуғат хеҙмәтендә хәбәр итеүҙәренсә, ошо ваҡиға унайынан 18-20 октябрҙә Ҙур залда Мостафа Сафа улының әҫәрҙәре буйынса спектаклдәр күрһәтелә. Мостай Кәримдең тыуған көнөндә көндеҙге сәғәт 12-лә Йәштәр театры хеҙмәткәрҙәре Ленин районы хакимиәте менән бергә халыҡ шағирының һәйкәленә сәскә һаласаҡ, артистар уның шиғырҙарын уҡып иштергәсәк.

✓Мәскәүҙең "Выставочная" метро станцияһында "Мосметрострой" компанияһының юбилейына арналған "85 йыл уникаль тәжрибә" тип аталған экспозиция асылды. Башҡортостан экспозицияһынан мәскәүҙәр метрополитендың тәүге сиратын төҙөү өсөн республиканың тәүҙә Ҡалтасы, хәҙер иһә Краснокама районы үҙеге Николо-Берёзовка ауылынан биш меңгә яҡын кешенең килеүе хаҡында белде. Мәскәүҙәге күргәҙмә 14 ноябргә тиклем эшләй.

✓1 ноябрҙә республикала киҙеүгә ҡаршы вакцинация тамамлана. Башҡортостан буйынса Роспотребнадзор идаралығы етәксеһе урынбаҫары Александр Жеребцов әйтеүенсә, әлеге ваҡытта республикала яҡынса 1 миллион 100 мең кешегә, шул иҫәптән 116 меңдән ашыу балаға прививка яһалған. План буйынса ноябргә 300 мең балаға киҙеүгә ҡаршы бушлай прививка эшләнергә тейеш.Бөтә донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы фаҙаллауынса, быйылғы миҙгелдә вирустың яңы штаммы көтөлә. Шуға бәйле эпидемия миҙгеле башланғанға тиклем вакцинация үтеү мөһим.

✓Башҡортостандың халыҡ шағиры, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, билдәле йәмәғәт эшмәкәре Ҡәҙим Аралбай ижад кисәһе уҙғарҙы. Сара яҙыусының 75 йәшлек юбилейына бағышланды. Кисәлә шағир үҙенең яңы лирик-фәлсәфәүи шиғырҙарын һәм робағиҙарын уҡыны.

✓ *Яңы миҙгелдә Башҡортостан юлдаш телеканалында "Башҡортостан геройҙары" тип аталған проект старт ала. Телеканал һайлап алынған тарихи шәхестәрҙең тормошо һәм эшмәкәрлеге хаҡында 100 телефильм әҙерләй.*



*ТУРАҺЫН ӘЙТКӘНДӘ...*

# ҺӨЙЛӘГӘН ҺҮҘЕБЕҘ...

## рухландырырлыҡ булһын



**Рәсәй - ҙур майҙанлы ил. Айырым кеше өсөн уңайлы яҡтары ла бихисап. Мәҫәлән, хәҙерге эшһеҙлек заманында һәр кем Рәсәйҙең теләһә ҡайһы төбәгенә барып, ғаиләһен кешесә йәшәтер өсөн аҡса һуғып ҡайта ала. Унар мең километр алыҫлыҡтағы эш урынына барып тир түккәндә лә һәр кемебеҙ үҙ иленә - Рәсәйгә хеҙмәт итә.**

Ә был тойғо нисек барлыҡҡа килә? Әлбиттә, рус телендә һәйбәт аралаша алыуҙан хасил була. Рус телен "һыу шикелле эсеү" - халҡыбыҙға Рәсәйҙең теләһә ҡайһы мөйөшөнә барып эш табып, йәшәп китергә мөмкинлек биргән иң төп шарттарҙың береһе ул. Шуға ла 91 процент халыҡтың рус телен камил белеүе ғәжәп түгел.

Әммә Рәсәй - федератив дәүләт. Унда республикалар, субъекттар бар, тимәк, хөкүмәт тә уларҙың йәшәүен бер тиң күреп хәстәрләргә, тәьмин итергә бурыслы. Республикаға исем биргән халыҡтың мәнфәғәте өҫтөнлөклө хоҡуҡҡа эйә булырға тейешлеге лә күҙ уңынан ысҡындырылмаҫҡа тейеш, тип уйлайым. Башҡортостанда ла башҡорт теле республика теле, йәғни дәүләт теле итеп Конституция буйынса ла, хоҡуҡ нормалары буйынса ҡабул ителгән икән, был тел, тимәк, айырым уңайлы шарттарҙа өйрәнелергә, ҡулланыу даирәһе киңәйергә, һәр башҡортостанлының аңында ошо ҡараш тәрбиәләнергә тейеш. Бының өсөн һәр республика етәкселәренең аҡыллы, намыҫлы, республика мәнфәғәтен ҡайғыртыусы, үҙ төбәге халҡының берҙәмлеген тәьмин итеүсе сәйәсәте генә кәрәк.

Был йәһәттән Башҡортостанда хәл-торош нисек һуң? Насар түгел. Беҙҙәге халыҡтар дуҫлығын һәр ваҡыт башҡаларға өлгө итеү ҡуйыуҙары ла урынлы. Әммә мине борсоған бер нәмә тураһында әйтеп үтәйем әле. Иғтибар иткәнегеҙ барҙыр: "республикабыҙҙың күп милләтле халҡы" тигән ҡалыплашҡан һүҙбәйләнеш көн эсендә генә лә иң кәмендә 100 тапҡыр яңғырай радио-телевидениела. Ошо һүҙбәйләнеш ниндәйҙер тарҡатыу көсөнә эйә тип иҫәпләмәйһегеҙме? Дөйөм Рәсәй өсөн "Россия - многонациональная страна" тигән һүҙбәйләнештең емергес көсө юҡ. Сөнки рус теленең дәүләт теле булыуы, уның юғары баҫҡыста тороуы һәр рәсәйленең төпкө аңына һалынған. Был - бәхәсһеҙ. Ә Башҡортостанда был һүҙҙең кәрәге бармы? Был урынһыҙ ғорурлыҡ түгелме? Йәнәһе, бер Башҡортостан ғына күп милләтле. Күрше республикаларҙа бер генә милләтме ни? Киреһенсә, уларҙа күберәк тә әле. Тик улар бер ҙә күкрәк һуҡмай. "Күп милләтлебеҙ" тип туҡтауһыҙ ҡабатлап, халыҡты бер-беренә ҡаршы ҡуймай. "Беҙ - бер республика халҡы. Республикабыҙ тыныс булһын, бай булһын! Уны төрлө яҡҡа тартҡыламайыҡ! Шуға барыбыҙ ҙа рус телен, ил теле - дәүләт теле булараҡ, башҡорт телен - республикабыҙ теле булараҡ өйрәнергә тейешбеҙ", тигән мөхит кенә берҙәмлеккә килтерәсәк. Татарстанда ана шундай сәйәсәт алып барыла. Улар республика Конституцияһын һанға һуға, республика законын боҙоуға юл ҡуймай. Ундағы миллионлап башҡорт һис зарланмай ғына үҙ республикаһы законлар һанлап йәшәй: татар телендә уҡый, аралаша. Сөнки унда татар телен рус теленән дә юғарыраҡ баҫҡысҡа ҡуйыу хәстәрлегә күрелә.

Тағы ла бер кәлимә. "Киске Өфө"лә (быйылғы 12-се һанда) "Халыҡ фекере" рубрикаһында өфөләрҙән һорау алыу мәғлүмәттәре баҫылғайны. Шуны уҡығандан һуң бер танышым: "Өфөлә башҡорттар ҙа, татарҙар ҙа үҙ телен ятратмай ҙа, белмәй ҙә икән. Ул телдәрҙең бер кәрәге лә юҡтыр, күрәһең. Ана бит, гәзиттә яҙылған: "100 кешенең 20-һе генә башҡорт, татар телен белә", - тиеп. Минеңсә, ул 20 проценты ла оло кешеләрҙер йәки белемһеҙерәк йәштәрҙер инде", - тигән һығымтаға килгән.

Бындай ҡараш тәрбиәләрлек мәғлүмәттең дә кәрәге юҡ. Сөнки ундай мәғлүмәт халыҡтың, бигерәк тә башҡорттарҙың аңын ағыулай: беренсенән, өмөтһөҙлөк, сараһыҙлыҡ тойғоһо уята. Икенсенән, "башҡорт теленең киләсәге юҡ", тип уйларға мәжбүр итә. Шулай булғас, халыҡҡа бирелгән һорау дөрөҫ ҡуйылырға тейеш. **"Был минең Тыуған илем...", "Ошо минең тыуған ерем...", "Башҡортостан барыбыҙға ла берҙәй үк ҡәҙерле", "Ата-олатайҙарымдың эҙе ҡалған, балаларым, ейән-ейәнсәрҙәрем ошонда йәшәйәсәк! Башҡортостаным имен, тыныс, бай ил булып йәшәһен генә инде..."** тигән яуаптар алырлыҡ һорауҙар ҡуйылһа, рух уяныр ине. Берҙәмлек тойғоһо тәрбиәләнер ине. Шуның өсөн, һүҙебеҙҙе мөнәсәбәттәрҙе боҙмаҫлыҡ, тормошобоҙға хилаф килмәҫлек итеп уйлап һөйләйек.

**Рәүеф БИКТАШЕВ.**
**Сибай ҡалаһы.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# БАШ-БАШТАҠЛЫҠМЫ, ӘЛЛӘ?..



Республика көнө алдынан күҙгә салынған ҡайһы бер күңелһеҙ күренештәр хаҡында өндәшмәй ҡала алмайым - ятып ҡалғансы, атып ҡал, тиҙәр бит. Баш ҡаланың "Ихлас" мәсете ихатаһында урынлашҡан балалар тауы ҡыйығын Башҡортостан флагы менән ябыу кемдең башына килде икән? Йәнде көйҙөргәне шул: тишелеп бөткән был "ҡыйыҡ-флаг"ты кисекмәҫтән алып ташлау тураһында үтенес менән мөрәжәғәт итеүселәр байтаҡ булған. Миңә лә был хаҡта итәғәтле рәүештә генә иҫкәртеү яһап сығырға тура килде. Шөкөр, дин әһелдәре байрам алдынан ғына "күҙ көйөгө"н алып ташлап, беҙҙе һөйөндөрҙө. Моғайын, улар бынан ары дәүләт символдарын мыҫҡыл итеүгә юл ҡуймаҫ.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ошо уҡ мәсет алдында күрше республиканың дәүләт телендә олоғара хәрефтәр менән яҙылған нәсихәт һаман тора. Был мәсьәлә тураһында ла иман йорто хеҙмәткәрҙәренә бер нисә тапҡыр әйтелде, әммә үҙгәреш юҡ. Баш-баштаҡлыҡмы был, әллә мыҫҡыл итеүме? Шул уҡ ваҡытта мәсет янындағы магазинға "Утыҙ ҡош кибете" тип башҡортса яҙа алғандар бит.

Мәсет - ул шәхси өй түгел, ә рәсми рухи-мәҙәни, дини-мәғрифәт учреждениеһы. Тимәк, уның алдында Башҡортостандың дәүләт телдәрендә яҙылған лозунг-плакаттар ғына эленеп торорға тейеш.

**Н. ХӘМЗИН.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Яңы миҙгелдә Башҡортостан юлдаш телеканалында "Башҡортостан геройҙары" тип аталған күләмле проект старт ала. Тапшырыу республиканың 100 йыллығына арнала. Проектты бер нисә этапта тормошҡа ашырыу күҙаллана. Тәүҙә танылған эшмәкәрҙәрҙең исемлеге билдәләнә. Уны онлайн тауыш биреү юлы менән тамашасылар үҙҙәре тәҡдим итә һәм һайлап ала. Һуңынан Башҡортостан юлдаш телеканалы һайлап алынған тарихи шәхестәрҙең тормошо һәм эшмәкәрлеге хаҡында 100 телефильм әҙерләй, ошо шәхестәрҙең төбәк яҙмышындағы ролен тикшереү өсөн теледебаттар ойоштора.

✓Силәбе өлкәһенең төп телеканалында тәүге тапҡыр урындағы башҡорттар тураһында программа эфирға сыҡты. Көньяҡ Урал башҡорттары тормошонан һуңғы яңылыҡтар, әһәмиәтле ваҡиғалар һәм факттар - быларҙың барыһы ла урындағы тапшырыуҙа яҡтыртыла. Башҡорт халҡының тарихы, мәҙәниәте тураһында "Уралым" программаһын аҙна һайын ҡарарға мөмкин.

✓Башҡортостанда Федераль юл агентлығы юлдарҙа хәүефле хәлдәр тураһында иҫкәртә. Күҙаллауҙар буйынса, был аҙнала - республикала, киләһендә Ырымбур өлкәһендә һауа температураһы түбәнәйә, ҡар ҡатыш ямғыр яуа. Юлдарҙа боҙлауыҡ булыуы ихтимал. "Автомобиль хужаларына шиналарҙы алмаштырырға кәрәк. Участкаларҙа эшләгән юл техникаһы менән һаҡ булыу зарур. Диспетчер хеҙмәтенең телефоны: (347) 228-12-18", - тип мөрәжәғәт иттеләр водителдәргә Башҡортостан буйынса Федераль юл хеҙмәтендә.

✓Башҡортостандан дүрт табип "Йылдың иң яҡшы табибы" XVI Бөтә Рәсәй һөнәри оҫталыҡ конкурсы лауреаттары булды. Улар - Башҡортостан Һаулыҡ һаҡлау министрлығының 1-се республика клиник психиатрия дауаханаһы табибы Наталья Тулбаева, Башҡорт дәүләт медицина университеты клиникаһының 2-се терапия бүлеге мөдире Виктор Лузин, Өфөләге 13-сө ҡала клиник дауаханаһы табибы Аэлита Губаева, Республика балалар клиник дауаханаһының яңаҡбит хирургияһы бүлеге мөдире Наил Дәүләтшин .

✓Башҡортостандың халыҡ уйын ҡоралдары милли оркестры музыка ҡоралдары һәм Мәскәү, Рәсәй ҡалалары буйлап гастролдәргә сығыу өсөн өҫтәмә аҡса аласаҡ. Яңыраҡ коллективтың художество етәксеһе һәм баш дирижеры алмашынды. Хәҙер уның художество етәксеһе - халыҡ-ара һәм бөтә Рәсәй конкурстары лауреаты Линар Дәүләтбаев.

ҠЫҪҠАСА

# ЛЕНИН МАЙҘАНЫНДА - фонтан

✔ Ҡышҡыһын ҡала территорияһын ҡарҙан таҙартыу бер аҙ үҙгәрештәр кисерәсәк. Уҙған ике йылда бер нисә тиҫтә урамдағы ҡар территориянан сығарылһа, быйыл ундай урамдар әҙерәк буласаҡ һәм ҡар өйөмдәренә баҫым яһаласаҡ. Сөнки ҡарҙы ситкә ташыу иҡтисади ҡатмарлы шарттарҙа үҙен аҡламай, икенсенән, грейдерҙар файҙаланыу юл ҡатламын боҙа. Урам буйҙарында ҡар өйөү тәжрибәһенә кире ҡайтылһа ла, төп магистралдәрҙән ҡар ҡаланан ситкә сығарыласаҡ.

✔ Өфөлә рөхсәтһеҙ ҡуйылған гараждарҙы алыу буйынса программа тормошҡа ашырыла. Быйыл майҙан алып барлығы 2480 гараж, шул иҫәптән 800-ө - мәктәптәр эргәһенән, 1000-дән ашыуы торлаҡ йорттар ихаталарынан алынған. Улар урынына балалар майҙансыҡтары эшләнә, парковкалар булдырыла. Территорияның төҙөкләндерелеүе ҡаланың эстетик йөҙөн генә матурлап ҡалмай, йәшәү өсөн уңайлыҡтар ҙа тыуҙыра. Буш майҙанды ниндәй маҡсатта файҙаланыуҙы яҡын-тирә йорттарҙа йәшәүселәр хәл итә.

✔ Муниципалитет тәүге ҡырауҙарҙың әҙемтәләрен бөтөрөү һәм юлдарҙа боҙлауыҡ булыуын иҫкәртеү өсөн хәстәрлек күрә - боҙлауыҡ булыуы ихтимал урындарҙа ҡом һибеүсе махсус техника дежурҙа тора. Шулай уҡ тиҙлек режимын оптималләштереү, хәрәкәт хәүефһеҙлеген күтәреү, юл-транспорт ваҡиғалары һанын кәметеү маҡсатында ҡаланың ҡайһы бер участкаларында тиҙлекте сикләү индерелеүе мөмкин. Әммә юлдарҙағы хәүефһеҙлек күпселек осраҡта водителдәрҙең әҙерлек кимәленә һәм уларҙың юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен үтәүенә бәйле икәнен дә оноторға ярамай.

✔ Баш ҡаланың Ленин майҙанында, бер ни тиклем тәнәфестән һуң, гидродинамик фонтан төҙөү эштәре дауам итә. Ул түңәрәк һауыт формаһында буласаҡ, цифрҙар махсус тумбаларға урынлаштырыласаҡ. Фонтандан атылған һыу йүнәлеше бейеклеге менән айырылып торасаҡ, ә инде уның иң бейеге ағымдағы аныҡ ваҡытты күрһәтәсәк. Киске яҡҡа фонтанды махсус төҫлө яҡтылыҡ сығанағы яҡтыртып торасаҡ. Объектты килһе йылда Ҡала көнөнә тамамларға ниәтләйҙәр.

✔ Мәжит Ғафури исемендәге паркта төҙөкләндереү эштәре бара. Унда яңы юлдар һалынған, ер эштәре башҡарылған, яҡтыртыу сығанаҡтары урынлаштырыла. Шахмат һөйөүселәр өсөн ҙур веранда төҙөлгән. Тиҙҙән балалар майҙансығы ҡуйыласаҡ. Ремонт эштәре тулыһынса ноябрҙә тамамланыр тип көтөлә.

✔ Өфөлә инвалид бала тәрбиәләүсе ата-әсәләргә ҡайтанан һөнәри әҙерлек үтеү мөмкинлеге биргән проект ахырына етте. "Социаль өлкәлә реабилитация эше буйынса белгес" дипломын 23 кеше алды. Проекттың төп маҡсаты - инвалид баланы тәрлө йәш этабында комплекслы тәрбиәләй алырлыҡ белгес - ата-әсә әҙерләү.

**Өфө ҡала хакимиәтенең матбуғат хеҙмәте.**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ЙӨҘЙӘШӘРҘӘР КҮБӘЙӘ...



**Өфө ҡала округы хакимиәтенең социаль-гуманитар идаралыҡ начальнигы Светлана ҒӘЛИЕВА журналистар менән матбуғат конференцияһы үткәрҙе. Үҙ тармағындағы эштәрҙе барлауҙан тыш, хәбәрселәрҙең һорауҙарына яуап бирҙе. Осрашыуҙа яңғыраған ҡайһы бер фекерҙәрҙе гәзит уҡыусы иғтибарына тәҡдим итмәксебеҙ.**

## Ғүмер оҙайлығын хәстәрләп...

Бынан алдағы йылдарҙа беҙ башлыса оло йәштәгеләрҙе социаль яҡлау мәсьәләләре тураһында һүҙ алып барған булһаҡ, бөгөн ул хаҡта һүҙ алып барыуҙың әллә ни кәрәге лә юҡ. Бөгөн һүҙ оло йәштәгеләрҙең социаль әүҙемлеге тураһында буласаҡ. Әлбиттә, хәҙер оло йәштәге кешеләр нисбәте арта бара. Өфөлә 1 млн 121 мең кеше йәшәй, уларҙың 295,6 меңе (26, 4 процент) - өлкән йәштәге граждандар. Һәр 4-се Өфө кешеһе - пенсионер. Был күренеш ҡаланың иҡтисади, рухи йәшәйешенә туранан-тура йоғонто яһай, әлбиттә. Ҡала - барлыҡ йәштәгеләр өсөн уңайлы булырға тейеш, тигән принциптан сығып эш итәбеҙ. Әле беҙ йәше тулыу сәбәпле пенсияға киткән граждандар (55 йәштән үткән ҡатын-ҡыҙҙар һәм 60 йәште аша атлаған ир-аттар) тураһында һүҙ алып барабыҙ. Әүҙем оҙон ғүмерлелек төшөнсәһе бар. Шуға булышлыҡ итеүсе 4 йүнәлеште билдәләй алабыҙ. Тәү сиратта, әлеге категория граждандары йәмғиәт тормошонда әүҙем ҡатнашырға тейеш. Икенсенән, теләге һәм һаулығы булғандарҙы эшһеҙ ҡалдырып ҡуйырға ярамай. Өсөнсөнән, оло йәштәге әүҙем кешеләр үҙҙәренең белемен камиллаштырыу мөмкинлегенә лә эйә булырға тейеш. Беҙҙең оло йәштәге кешеләр араһында ла белемен камиллаштырырға, үҙе белгәнде кемгәлер өйрәтергә, кемгәлер ярҙам итеү өсөн үҙ тәжрибәһен файҙаланырға теләүселәр һаны артҡандан-арта бара. Һәм, ниһайәт, дүртенсеһе - һәр өлкән йәштәге граждандың үҙ һаулығын нығытыу өсөн спорт менән шөғөлләнеү мөмкинлегенә эйә булыуы.

## Ярҙам итеүсе саралар

2011 йылдан бирле беҙҙең Өфө ҡалаһы "Был ҡалала ҡартлыҡ та - шатлыҡ" исемле программала ҡатнаша. Был программа бихисап сараларҙы үҙ эсенә алған. Мәҫәлән, велосипедта йөрөүселәр марафонын ғына алайыҡ. Яңыраҡ Өфөлә үткән велоспорт буйынса 2-се халыҡ-ара марафонда 75 йәшлек ағай 25 километр араны "ыһ" та итмәй үтте. Ә унан бер аҙға ғына өлкәнерәк яҡташыбыҙ, 80 йәшлек олатай, беҙ ойошторған күнекмәләр секцияһында "йүгереү һуҡмағы" ҡорамалына баҫып, иҫ киткес сыҙамлыҡ, физик әүҙемлек өлгөһө күрһәтте.

Өфөлә ҡыҙыҡһыныуҙар буйынса ойошҡан 100-ҙән ашыу клуб эшләп килә. Уларҙа ниндәй генә һөнәр алмай пенсия йәшендәгеләр: сит телдәрҙе, компьютер технологияларын өйрәнә, тегеү-сигеү, бәйләү, аш-һыу әҙерләү буйынса оҫталыҡтарын камиллаштыра. Һуңғыһы буйынса йәштәрҙән бер ҙә ҡалышмаған апайҙарҙы беләбеҙ. Күптән түгел ниндәйҙер бер һүҙҙең дөрөҫ баҫым менән уҡылышына шик тыуғайны, беҙҙең оло йәштәге бер апайыбыҙ, әлеге программалар буйынса шөғөлләнеүсебеҙ, "компьютер белә ул", тип, эҙләү системаһынан ҡарап, әлеге һүҙҙең орфоэпияһына ҡағылышлы мәғлүмәттәрҙе шартлатып әйтте лә бирҙе. Һоҡланырлыҡ бит!

## Ололар сер бирмәй

Ғилемдәрен арттырыу юлында ололар. "Өсөнсө йәштәгеләр", йәғ-

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# БАШҠОРТ БАЛЫ ТАҒЫ ЕҢЕҮСЕ




**Башҡортостан умартасылыҡ һәм апитерапия буйынса ғилми-тикшеренеү үҙәге Мәскәүҙә "Алтын көҙ" Рәсәй агросәнәғәт күргәҙмәһендә 45 алтын миҙал яулаңы.**

"Ауыл хужалығына инновацияларҙы уңышлы индергән өсөн" конкурсында Үҙәк бер нисә эш өсөн 20 алтын миҙалға лайыҡ булды. Улар араһында бал ҡорттары ярҙамында ауыл хужалығы культураларын һерккәләндереү, умартасылыҡ продукцияһын парфюмерия-косметика сәнәғәте етештереүендә һөҙөмтәле файҙаланыу, юғары сифатлы умартасылыҡ продукцияһын эшләп сығарыу өсөн республиканың экологик хәлен тикшереү һәм башҡалар бар.

Юғары пробалы миҙалдар араһында - "Умартасылыҡ тураһында" республика законын, бер нисә маҡсатлы программа, 2020 йылға тиклем төбәктә Умартасылыҡты үҫтереү концепцияһын әҙерләгән, шулай уҡ Башҡортостан Хөкүмәте ҡарамағында Умартасылыҡ буйынса координация советын ойошторған, умартасылыҡ һәм апитерапия буйынса китаптар, белешмәләр һәм видеофильмдар әҙерләгән өсөн "Агросәнәғәт комплексын мәғлүмәти йәһәттән тәьмин итеү" конкурсында еңеү. Ошо конкурста Башҡортостан умартасылыҡ һәм апитерапия буйынса ғилми-тикшеренеү үҙәге 25 алтын миҙалға лайыҡ булды, тип хәбәр иттеләр республика Ауыл хужалығы министрлығының матбуғат хеҙмәтенән.

# Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✔ Башҡортостан Хөкүмәте Рәсәй автостраховкалаусылар союзына республиканы ОСАГО полистарын һатыу буйынса "берҙәм агент" системаһына индереүҙе һорап мөрәжәғәт иткәйне. Рәсәй автостраховкалаусылар союзы президиумы тейешле ҡарар ҡабул итте һәм 30 августан төбәктә "берҙәм агент" системаһы эшләй башланы. Башҡортостан Хөкүмәтендә "берҙәм агент" системаһының эшенә йомғаҡ яһалды. Унда билдәләүҙәренсә, халыҡ был системаға аңлау менән ҡарай. Сентябрҙә Башҡортостандың Милли банкына килгән ялыуҙар һаны август айындағы ошондай уҡ күрһәткестәрҙән ике тапҡырға кәмерәк булған.

✔ "Мисс Башкортостан" агентлығы моделе Галина Лукина Көньяҡ Кореяла барған "Miss Global Beauty Queen 2016" халыҡ-ара конкурсында "Донъя илсеһе" титулын яуланы. Быйыл Сеул төрлө илдәрҙән 50 ҡатнашыусыны ҡабул итә. Республика һылыуҡайҙарының береһе Галина Лукина өсөн абруйлы матурлыҡ конкурсында тәүге тапҡыр Башҡортостан исеменән сығыш яһай. Башҡортостан ҡыҙы дефиле конкурсында башҡорт дизайнеры Альбина Жерлицына теккән милли кейемде күрһәтте. "Донъя илсеһе" титулынан тыш, Галина "Мисс Талант" исемләгенә инде. Бәйгегә 26 октябрҙә йомғаҡ яһала.

✔ Күмертау ҡалаһынан 21 йәшлек Борис Шешера Беренсе каналдағы "Тауыш" проектында Э.Ч. Уильямстың "Why" ("Почему") джаз композицияһын башҡарҙы. Уның сығышын дүрт жюри ағзаһының өсәүһе: Дима Билан, Леонид Агутин, Григорий Лепс бик окшатты. Бынан тыш, улар Бористы аяғүрә баҫып алҡышланы, тамашасылар ҙа ихлас ҡабул итте. Борис Шешера артабан Леонид Агутин командаһында көс һынашасаҡ.

✔ Өфө менән Ҡаҙан араһында ҡаршы килгән поездар хәрәкәтен ойоштороу күҙаллана. Был хаҡта "Рәсәй тимер юлдары Тур" компанияһы хәбәр итә. Әлеге ваҡытта фирма Башҡортостандың һәм Татарстандың Туризм буйынса дәүләт комитеттары менән бәйләнештәр булдыра. 2017 йылдың ғинуар айында ихтыяжды билдәләү өсөн ике төбәктең туристик компаниялары һәм киң мәғлүмәт саралары өсөн мәғлүмәт турҙары уҙғарыла. Уларҙың һөҙөмтәләре буйынса ҡаршы килгән поездар хәрәкәтен йәки тағылмалы вагондар тәркөмөн ойоштороу тураһында ҡарар ҡабул ителә.

✓ *Өфө ҡалаһы һуңғы йылдарҙа өлкән йәштәгеләр ҡалаһына әйләнә бара. Мәҫәлән, 5 йыл элек 100 йәште үткән граждандарҙың һаны 30-лап ине, бөгөн 60 "йөҙйәшәр"ебеҙ бар.*



ни, өлкәндәр өсөн бер нисә йыл рәттән уңышлы эшләп килгән "Халыҡ университеттары" тураһында ла әйтеп китеү яҙыҡ булмаҫ. Уларҙа тәүҙәрәк шул уҡ оло белгестәр белем бирһә, тәжрибә уртаҡлашһа, хәҙер иһә, үҙ эшенең асылына яҡшы төшөнгән оҫталар ҙа уҡыта ололарҙы. Шул уҡ ваҡытта алтын ҡуллы апай-ағайҙарыбыҙ ҙа тәжрибә уртаҡлашыуҙан, оҫталыҡ дәрестәренән ситләшмәй.

Беҙҙең идара тарафынан "Бер сәғәтлек өләсәй" тип исемләнгән программа ла эшләнә башланы. Беҙҙең күҙаллауҙар буйынса, был программа халыҡта яҡлау, аҡлау һәм терәк табыр, тип ышанабыҙ. Ул нимәнән ғибәрәт? Маҡсаты тормошсан һәм ябай: кемдәр өләсәй хәстәренән мәхрүм, кемдәрҙең өләсәйҙәре юҡ, шулар ғаиләләренә беҙҙең "өләсәй"ҙәрҙе саҡыра ала. Улар, үҙ сиратында, бала ҡараша, башҡа ярҙам күрһәтә ала.

Ололарҙың иҡтисади, юридик белемен камиллаштырыу эшенә лә яуаплы ҡарайбыҙ, был тәңгәлдә яуланған уңыштарыбыҙ ҙа бар. Әйтәйек, беҙҙең курстарҙа шөғөлләнеүсе оло йәштәге ағай-апайҙар йыш ҡына юридик яҡтан белемдәре, тәжрибәләре булмаған ҡорҙаштарын, таныштарын, күршеләрен судтарҙа яҡлашып йөрөй. Был белемде пенсия йәшендәге граждандар һәр кесаҙна һайын үткәрелгән "Ҡулланыусылар клубы" ултырыштарында үҙләштерә. Бынан тыш, беҙҙең идаралыҡ ҡатнашлығы менән йыл һайын таланттар конкурстары уҙғарыла. Социаль туризмды киң йәйелдереү буйынса ла тотороҡло, эҙмә-эҙлекле эш алып барыла. Беҙҙең пенсионерҙар төрлө ял йорттарында, шифаханаларҙа ял итә, теплоходта йөҙә, Өфөләге театр-музейҙарҙаға бушлай барып ҡайта.

### Зарураттан…

Алкоголле шыйыҡсалар эсеп, иҫереп, урамда ҡалған граждандарҙы һыуыҡ алдырыуҙан, аяҡ-ҡулдарын туңдырыуҙан аралау маҡсатында махсус үҙәктәр төҙөлдө. Улар йылына 17 мең кешегә ярҙам итә. Үҙәктәрҙе тотоу өсөн 11 миллион һум аҡса һалына. Был сумманың яртыһын Өфө ҡала округы ҡаплаһа, яртыһын ҡала Советы депутаттары, башҡа меценаттар ҡаплаша. Әлбиттә, был эш ҡала хакимиәтенең дә, депутаттарҙың да бурысы түгел - зарураттан, башҡа сара ҡалмағанлыҡтан алып барылған эш. Медицина айнытҡыстары бөтөрөлгәс, был категория менән шөғөлләнеүҙе Һаулыҡ һаҡлау министрлығы ла, бүтәндәр ҙә үҙ ҡанаты аҫтына алмағанлыҡтан, Өфө ҡала округы хакимиәте был тәүәккәл аҙымға барырға булды. Әлбиттә, үҙәк хеҙмәткәрҙәре, төрлө ойошма-предприятеларға барып, хеҙмәткәрҙәргә спиртлы шыйыҡсаларҙы ҡулланыуҙың кеше һаулығына ни тиклем зыянлы булыуы тураһында лекциялар ҙа һөйләй. Был эш тә үҙ һөҙөмтәләрен бирмәй ҡалмайҙыр, тип ышанырға ҡала. Беҙҙең ошо үҙәктәрҙең өлгөһөн Рәсәйҙең башҡа ҡалалары ла үҙләштерә башланы.

Өфө ҡалаһы һуңғы йылдарҙа өлкән йәштәгеләр ҡалаһына әйләнә бара. Мәҫәлән, 5 йыл элек 100 йәште үткән граждандарҙың һаны 30-лап ине, бөгөн 60 "йөҙйәшәр"ебеҙ бар. Был нимә тураһында һөйләй? Тәү сиратта социаль-иҡтисади тотороҡлоҡ тураһында. Йәшәү шарттарының уңайлылығы хаҡында. Бөтә донъя Оло йәштәгеләр көнөндә ошо категория граждандарға РФ Президентының, Өфө ҡала округы хакимиәте башлығының ҡотлау хаттарын үҙебеҙ алып барабыҙ. Йөҙйәшәр олатай-өләсәйҙәрҙең ниндәй шарттарҙа йәшәүе менән ҡыҙыҡһынабыҙ. Уларҙың барыһы ла шундай бөхтә итеп йыйыштырылған, тәрбиәле шарттарҙа йәшәй. Барыһы ла шат йылмайып тора, йәшәүҙең мәғәнәһен әүҙемлектә һәм киләсәккә өмөт менән ҡарауҙа күреүҙәрен әйтә. Күңел көрлөгө, хәрәкәттә - бәрәкәт төшөнсәһенең ғәмәлдә ҡулланылыуы, йәшәү шарттарының әҙәмсә булыуы ололарыбыҙҙың да ғүмерен оҙайта икәнлеге тураһында һығымта яһарға булалыр...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Интернетта Пушкиндың: "В комнату вошел старик лет 30", - тигән һүҙҙәренә һылтанмаларҙы йыш осратырға була. Эйе, ул ваҡытта ғүмер оҙайлығы шулай ғына булғандыр. Йәшәү рәүеше сифатлыраҡ була барған һайын, кешенең ғүмер оҙайлығы ла сикһеҙлектең "+" билдәһе яғына ауыша бара бит. Ҡала округы хакимиәтендә Өфөлә йөҙйәшәрҙәр артыуы бары тик яҡшы уйланған һәм тормошҡа ашырылған социаль сәйәсәт һөҙөмтәһе булыуын белдерәләр икән, уларҙың һүҙенә ҡолаҡ һалып, ҡыуана ғына алабыҙ. Хәйер, ул ғына ла түгел, үҙебеҙҙең һәм яҡындарыбыҙҙың һаулығын, күңел торошон ҡайғыртып, көләс, теремек йөҙйәшәрҙәр һанының тағы ла артыуына булышлыҡ итә алабыҙ. Имен-аман булһын ҡарттарыбыҙ!**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ.**

## ҺОРАУ-ЯУАП



## ФАТИРҘАҒЫ ӨЛӨШ

**Ирем менән айырылыштыҡ. Ипотекаға алынған фатир икебеҙҙең (1/2 өлөштә) уртаҡ милкебеҙ иҫәпләнә. Фатирҙа беҙҙән тыш улыбыҙ теркәлгән. Айырылышҡанға тиклем ипотеканы мин түләнем (3 йыл), ә хәҙер банкка ла, фатир өсөн башҡа түләүҙәрҙе лә элекке ирем атҡара, сөнки квитанциялар уның исеменә килә. Беҙ бала менән хәҙер әсәйемдәрҙә йәшәйбеҙ, ләкин унда теркәлмәгәнбеҙ. Әлеге фатирҙағы өлөш минең берҙән-бер торлағым. Мине һәм улымды элекке ирем теркәүҙән төшөрә аламы? Урамда торлаҡһыҙ тороп ҡалмаҫ өсөн нимә эшләргә?**

- Фатирҙан һеҙҙе бер кем дә сығара ла, теркәүҙән төшөрә лә алмай. Бындай эш тик суд ҡарарына ярашлы ғына башҡарыла, ләкин фатирҙың бер өлөшө һеҙҙең милектә булғас, суд бындай ҡарар сығармаясаҡ. Шулай уҡ судтың балиғ булмаған баланы теркәүҙән төшөрөү тураһында ҡарар ҡабул итеүе лә шикле. Тик ипотека түләүен әлеге ваҡытта элекке ирегеҙҙең түләп барыуы һеҙҙең хәлде ҡатмарлаштырырға мөмкин. Әгәр ҙә суд аша милекте бүлеү процесы булмаһа һәм ҡалған ипотеканы ирегеҙҙең түләйәсәге тураһында килешеү төҙөмәһәгеҙ, кредит аҡсаһын индергән һайын элекке ирегеҙҙең фатирҙағы өлөшө арта барыуы ихтимал. Ул ошондай ҡарар сығарыуҙы һорап, судҡа мөрәжәғәт итергә мөмкин һәм әгәр ҙә суд ыңғай ҡарар ҡабул итһә, һеҙҙең фатирҙағы өлөш кәмейәсәк. Шуға күрә, тиҙ арала милекте бүлергә һәм икегеҙгә лә яйлы булған ҡарарға килергә кәрәк.

## ПОДВАЛ ҠУРТЫМДА БУЛҒАНДА…

**Беҙҙең күп фатирлы йорттоң подвалын ҡуртымға бирәләр, ләкин унан килгән аҡса йортта йәшәүселәр файҙаһына тотонолмай, ә ҡала ҡаҙнаһына китә. Был дөрөҫмө, сөнки ундағы тауыштан фатир хужалары зыян күрә бит?**

- Һорауҙа һүҙ барған биналар подвал түгел, ә йәшәү өсөн тәғәйенләнмәгән бүлмәләрҙер, моғайын (нежилое помещение), сөнки подвалда, ғәҙәттә, һыу, газ торбалары һәм башҡа төрлө ҡоролмалар урынлашҡан була. Әгәр ҙә шулай икән, ул бүлмәләрҙең мотлаҡ хужаһы бар (шул иҫәптән улар ҡала хакимиәте милкендә лә булырға мөмкин). Милек хужаһы күсемһеҙ милкен үҙ теләгенән сығып тотонорға хоҡуҡлы, шул иҫәптән кемгәлер ҡуртымға биреп килем алырға ла. Һеҙ был аҡсаларға дәғүә итә алмайһығыҙ (РФ Граждандар кодексының 209-сы статьяһы).

## ҺЫНАУ СРОГЫ ТҮЛӘҮҺЕҘМЕ?

**Бер фирмаға эшкә төшөп, 3 аҙна эшләгәндән һуң, һынау срогын үтмәне, тигән сәбәп менән эштән бушаттылар. Ошо ваҡыт өсөн эш биреүсе миңә эш хаҡы түләмәне. Баҡтиһәң, эшкә урынлашҡанда төҙөлгән килешеүҙә "һынау срогы өсөн эш хаҡы түләнмәй", тигән пункт булған икән. Был законға ярашлымы?**

- Килешеүҙәге бындай пункт законға ярашһыҙ. Фирма һеҙгә эшләгән ваҡытығыҙ өсөн эш хаҡы түләргә бурыслы. РФ Хеҙмәт кодексының 70-се статьяһына ярашлы, хеҙмәт ҡануниәтендә билдәләнгән барлыҡ ҡағиҙәләр һынау осоро үтеүсе хеҙмәткәргә лә ҡағыла. Һеҙгә фирма етәксеһенә эш хаҡығыҙҙы түләү тураһындағы талап менән яҙма рәүештә мөрәжәғәт итергә кәрәк. Әгәр ҙә ул талапты үтәмәһә, прокуратураға һәм хеҙмәт инспекцияһына яҙығыҙ.

**Гөлназ САФУАНОВА әҙерләне.**

## АБҘАҠТА ЯЛ ИТЕГЕҘ!



**Абҙаҡ тау саңғыһы курорты илдең Яңы йылда ял итеү өсөн иң популяр ун курорты иҫәбенә инде.**

Исемлекте 2016 йылдың 30 декабренә - 2017 йылдың 8 ғинуарына отелдәр һәм апартаменттар эҙләү мәғлүмәттәрен тикшереү нигеҙендә RoomGuru.ru отелдәре интернет-сервисы эксперттары төҙөгән. "РБК-Өфө" хәбәр итеүенсә, был рейтингта беренсе урынды Сочиҙағы Красная Поляна биләй. Унда иң популяр урын - "Роза Хутор". Тәүге өсәү иҫәбенә Кемеров өлкәһендәге Шерегеш һәм Ҡарасай-Черкесиялағы Домбай инә.

Башҡортостандағы Абҙаҡ курорты етенсе урында килә. Исемлектә Силәбе өлкәһе (Завьялиха, алтынсы урын), Ҡабарҙа-Балҡар, Алтай һәм Красноярск крайҙары, Мурманск һәм Иркутск өлкәләренең тау саңғыһы курорттары бар. Ялдың арзанлығы буйынса Сочиҙағы Красная Поляна исемлектә аҙаҡҡы урында тора. Хаҡты иҫәпләп сығарыу өсөн эскперттар бер тәүлек йәшәү, кафела төшкө аш һәм ски-пасс хаҡтарын ҡушҡан. Красная Поляна өсөн был күрһәткес - 4900, Алтай крайындағы Белокуриха өсөн 3100 һум тәшкил иткән. Абҙаҡ был рейтингта өсөнсө урын биләй - 3400 һум.

## Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Бил ауыртҡанда

❖ Бил ауыртҡанда уколдар ҡаҙатыу хәлде бер аҙға ғына яҡшырта. Был ауыртыуҙан ҡотолоу өсөн ҡара торма менән балдан әҙерләнгән шифа ярҙам итер. 1 өлөш араҡы, 2 өлөш бал, 3 өлөш торма һутын болғатып, йоҡлар алдынан билде ыуырға. Төнәтмәне быяла һауытҡа һалып, һыуытҡыста һаҡларға. Бер нисә көндә һыҙланыу онотолор.

### Цистит

❖ 2 балғалаҡ ваҡланған ҡыяр орлоғона 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 15 минут талғын утта тоторға, 20 минут төнәтергә, һөҙөргә һәм көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 30 минут алда 1/3 стакан эсергә. Дауаланыу курсы - 45 көн.

### Тын юлы сирҙәре

❖ Ангина, фарингит һәм башҡа тын юлы сирҙәре менән яфаланһағыҙ, 1 балғалаҡ ала миләүшә сәскәләренә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, һыуынғансы төнәтергә, һөҙөргә һәм 2 ҡалаҡ төнәтмәне көнөнә 4-5 тапҡыр эсергә. Һауыҡҡансы дауаланырға. Бынан тыш, 100 мл медицина спиртына 1 ҡалаҡ ала миләүшә сәскәһе һалып, 7-10 көн төнәтеп, 1 өлөш төнәтмәгә 3 өлөш һыу өҫтәп, көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан алда 1-әр ҡалаҡ эсергә. Тамаҡты сайҡатыу өсөн 10 мл төнәтмәне 1 стакан йылы һыуға болғаталар. Тамаҡты көнөнә 3-4 тапҡыр сайҡайҙар.

### Лямблиоз

❖ 300 грамм ҡабығынан әрселгән ҡабаҡ орлоғон иҙергә, 50 мл һыу, 50 грамм бал ҡушып болғатырға һәм 1 сәғәт дауамында яйлап ашарға. Был процедураны ашағандан һуң 3 сәғәт үткәс башҡаралар.

### Артроз

❖ Һалҡындар төшөү менән хроник артроз үҙен һиҙҙерә башлай. Ярты литрлыҡ банкаға әстерхан сәтләүегә ҡабығын тултырырға, 300 мл араҡы ҡойорға, 10 көн бүлмә температураһында төнәтергә, һөҙөргә һәм көн һайын ас ҡарынға 1 ҡалаҡ төнәтмәне 50 мл ҡайнаған һыуға болғап эсергә. Бынан тыш, йоҡлар алдынан быуындарҙы йылытырға һәм сусҡаның иретелгән эс майын һөртөргә.

**Айбикә ЯҠУПОВА әҙерләне.**

ЙОЛАЛАРЫБЫҘ

# ХАЛЫҠ МЕДИЦИНАҺЫ

Ҡурҡыу сәбәпле һаулыҡтың ҡаҡшауы ғәҙәттә "ҡот ҡойоу" магияһы менән дауаланған. Ҡот ҡойоусы ауырыу кешенең баш осонда һыулы сүмес тотоп, сүмескә иретелгән балауыҙ йәки ҡара ҡурғаш ҡойған. Барлыҡҡа килгән фигураға ҡарап, сирлене ҡурҡытҡан нәмә билдәләнгән. Ҡот ҡойоуҙан барлыҡҡа килгән тылсымлы һынды ҡурҡыуҙан ауырыуға һабышҡан кеше түшенә тағып йөрөргә тейеш булған. Магияның башҡа төрҙәре һымаҡ, ҡот ҡойоу ҙа үҙе генә түгел, ә ырымлау менән бергә башҡарылған.

Башҡорт халҡында "мейе төшөү"тигән төшөнсә билдәле. Баш ауыртыу, әйләнеүҙе йыш ҡына мейе төшөү менән аңлатҡандар. Ә мейе төшөү башты һуғыу-бәреүҙән тыш, уны киҫкен бороуҙан, ятҡанда ҡапыл тороуҙан да булыуы мөмкин, тип иҫәпләгәндәр. Дауалаусы ауырыған кешенең маңлай уртаһынан алып соңҡаға тиклем араны (уң һәм һул яҡтан) еп ярҙамында үлсәгән. Еп ҡолаҡ өҫтөнән үткән. Мейе төшкән яҡта еп бер аҙ оҙонораҡ булып сыға. Шунан сығып, "мейе төшөү" тигән дмагноз иҫбат ителә. Мейе төшөрөү шунан ғибәрәт. Ауырыу кеше салҡан ятҡырыла, башына яулыҡ бәйләнә. Унан һуң яулыҡ остары дауалаусы тарафынан өс тапҡыр киҫкен рәүештә тартыла.

Был дауалауҙың башҡа төрө лә билдәле. Дауаланыусы кеше бер сәғәт самаһы тыптын ятырға тейеш булған. Бындай юл менән дауаланған кешеләр һөйләүенсә, "мейе төшөүҙән" һуң баш ауыртыуы һәм уның әйләнеүе кәмегән һәм башҡаса борсомаған. Быының асылы нимәлә һуң? Күрәһең, шифаның нигеҙе шулай уҡ инандырыуға ҡайтып ҡалалыр, хәлде психик йоғонто яҡшырталыр.

Башҡорт халыҡ медицинаһында ҡатмарлы операциялар яһалмаһа ла, ҡулланылған дауалау алымдары байтаҡ булған. Яра-йәрәхәтте дауалау өсөн күп кенә яңы өҙөлгән шифалы үлән-япраҡтар (йод үләне, үгәй инә үләне япрағы, муллаян үләне, дегәнәк япрағы һ.б.); киптереп онталған имән ҡайыры, ҡайын бәшмәге, мәтрүшкә, меңъяпраҡ, кейәү үләне, ағас көлө һәм күмере, сөрөк, дегет; ҡорот, ҡорот өҫтө үңәҙе, бал, айыу майы, әсеүташ, аш тоҙо, онталған сталактит-сталагмиттар, ара ташы кеүек минералдар ҡулланылған. Уларҙы йәрәхәткә япҡандар, һөрткәндәр йәки һипкәндәр.

Яра-йәрәхәттән килгән ҡанды туҡтатыу өсөн уны өтөлгән йөн йәки ҡоро мүк менән ҡаплағандар йәки онталған яра ташы һипкәндәр. Борон-борон заманда ҡан ағыуҙы туҡтатыу маҡсатында ирәүәндән файҙаланғандар. Тән бешкәндә аш тоҙо онтағы, сәй содаһы, киптерелгән былсыҡ һибелгән һәм унан һуң йомортҡа һарыһы, ҡаҙ йәки йылҡы майы, һары май һөртөлгән. Яраны ҡатыҡ йәки йәш ҡорот менән эшкәртеү билдәле. Еңелсә бешеүҙе дауалау һалҡын һыу менән сылатыуҙан һәм һуңынан һабынлы һыу менән еүешләүҙән торған. Туңған ерҙе башта йомшаҡ ҡар йәки таҙа ҡул менән еңелсә - йылынғансы ыуғандар, ҡаҙ майы һөрткәндәр. Ҡаҙ майы урынына балауыҙ һәм күбек май ҡатнашмаһы ла ҡулланылған.

Йылан саҡҡанда ярҙам күрһәткәндә йылан ағыуы ҡыҫып сығарылған. Аҙаҡтан йылан саҡҡан ерҙе йәш ҡорот менән ыуғандар. Йәшен һуҡҡанда зарарланған кешене тупраҡ менән күмгәндәр.

**Варис ҒҮМӘРОВ.**
**"Башҡорт халыҡ медицинаһы".**
**(Дауамы бар).**

АЙЫҒАЙЫҠ, ЙӘМҒӘТ!

**Халҡыбыҙҙың мәшһүр улы, мәғрифәтсе Ризаитдин Фәхретдинов үткән быуатта уҡ эскелектең кешелекте афәткә алып киләсәге тураһында әсенеп яҙа. Бөгөнгө табип-наркологтар һымаҡ уҡ, ул да эскелекте өс дәрәжәгә бүлә: "Беренсеһе - ғәҙәтләнеү һәм өйрәнеү. Был дәрәжәлә булған кешеләр үҙҙәренең бөгөнгә ҡәҙәр дауам итеп килгән хәлдәренә үә ғәҙәттәренә хилаф бер эш булды ниһә, эсәләр. Берәүгә асыуҙары килһә лә эсәләр үә күп ваҡытта ҡыҙмаса йөрөйҙәр. Ҡыйын булһа ла эсәләр, шатлыҡ булһа ла эсәләр, туй мәжлесен хөрмәтләп тә, дуҫ хаҡын һаҡлап та эсәләр. Ошо эсеүҙәре сәбәбенән быларҙың нервылары көндән-көн зәғифләнә. Сабыр итеү үә түҙеү, ғөмүмән, гүзәл холоҡтар былар ҡулынан ысҡына. Шуға күрә, кес кенә эштәр өсөн дә сиктән сығып борсолалар, асыуҙары килә. Үҙҙәренең яҡындарын үә тирә-яғындағыларҙы яфалайҙар.Икенсе дәрәжә. Быныһы ҡомһоҙланып эсеү. Был дәрәжәлә булғандар байтаҡ ваҡыт эсмәй йөрөйҙәр ҙә бер ваҡытта бер сәбәп менән эсәләр үә шунда уҡ ҡомһоҙланып китәләр. Был хәлдәре хатта бәғзе ваҡыттарҙа берәр айға һуҙыла. Үҙҙәрендә ихтыяр ҡалмай. Оят үә намыҫтары юғала. Бөтә аҡсаларын, малдарын бөтөрәләр, хатта өҫтәрендәге кейемдәрен һатып эсәләр. Шулай булһа ла, был ике дәрәжә булғандарҙа дауалау үә сәләмәтләндереү мөмкин. Әммә мәшһүр табиптарға тапшырырға кәрәк… Өсөнсө дәрәжә. Былар - эсеүҙәре сәбәбенән аҡылдан яҙыусылар. Уларҙы йүләрҙәр йортона оҙатыуҙан башҡа сара юҡ. Беренсе дәрәжәләге "ғәҙәтләнеү" тигәнде халыҡтарҙың сәй эсеүҙәренә оҡшатыу ярамай. Үҙ ғүмерендә өс тапҡыр эсеү инде ул ғәҙәтләнеү була үә беренсе дәрәжәгә инә".**

# ЭСМӘЙЕМ, ТИГӘНДЕ ЛӘ...

## эсергеләре килә шул



Бөгөн беҙҙәге халыҡтың яртыһынан күберәге ошо "ғәҙәтләнеү" кимәлендәге эскеселәрҙер, моғайын, тиһәк тә арттырыу булмаҫ. Рәсәйҙә эскелеккә ҡаршы көрәшкән дәрәжәлә башҡа бер нәмәгә лә ҡаршы көрәшмәйҙәр, әммә әлегә тиклем уны  еңә алғандары юҡ. Шундай парадокс бына. Ә еңә алмауҙың сәбәбе - үҙебеҙҙең үк шул "дошманды"  үҫтереү ул. "Юҡ итергә, тамырынан ҡоророрға кәрәк!" тип ҡул болғап ҡысҡырабыҙ ҙа, икенсе ҡул менән һыу һибеп торабыҙ. Хатта беҙҙең закондарыбыҙ ҙа шулай. Бер закон алкоголле эсемлектәр әйләнешен ҡыҫа ла, икенсеһе икенсе уңайлыҡтарын булдыра. Бер урында тыялар ҙа, икенсе урындарҙа шул тауарҙы һатыусы сауҙа нөктәләрен асып ебәрәләр. Бөгөн уларҙың ниндәй генәләре юҡ, хатта ил буйынса махсус булдырылған эре селтәрҙәр бар.

Рәсәйҙә эскелеккә ҡаршы, эскелекте сикләгән, медицина лозунгыларынан тыш, бер генә закон да, административ яза ла юҡ (рулгә ултырыуҙан тыш). Хатта эскән килеш эш урынында булыу ҙа эштән ҡыуа торған сәбәп түгел икән. Статистика буйынса, төрмәләрҙә 80 процент кеше хәмер арҡаһында ултыра. Балалар йорттарында йәшәгәндәрҙең 95 процентының ата-әсәһе тере, ләкин эсәләр. 70 процент енәйәтселек, насар күренештәр ҙә хәмер арҡаһында килеп сыға.

Уйлап ҡараһаң, илдә эскелектең ныҡлап ерегеүе лә артыҡ тарихлы түгел. 1950 йылда ил башлыҡтары спиртлы эсемлектәр һатыу иҫәбенә дәүләт ҡаҙнаһын тулыландырыу тураһында ҡарар ҡабул итә. СССР-ҙа бик күп һыра, шарап, араҡы етештереү заводтары төҙөлә, продукцияны һатыуға план билдәләнә. Һөҙөмтәлә 1965 йылда йән башына - 5, ә 1980 йылда 11 литр спирт тура килә (бөгөн балаларҙы ла ҡушып иҫәпләгәндә, һәр йән башына 18 литр!) Ил ҡаҙнаһы тулылана, демография хәле киҫкенләшә. Ә хәмер ҡолдары армияһы йылдан-йыл арта. Тимәк, Рәсәйҙә эскелектең тамыр йәйеүенә мең йыл да, бер быуат та түгел, ә ни бары 50-55 йыл (бында айырым милләттәр ҡаралмай). Йәғни, эскелек Рәсәй кешеләренең характер үҙенсәлеге түгел, тигән һығымта яһарға кәрәк.

"Рәсәй" тип һөйләйбеҙ, сөнки шулай әйтһәң, һүҙ тап беҙҙең хаҡта түгел, ә дөйөм ил хаҡында бара һымаҡ. Тик юҡҡа алданмайыҡ, Башҡортостан шул афәттең тап уртаһында ул. Үрҙә әйтелгән миҫалда беҙҙең дә "өлгө" бар. Ҡасан ғына әле республика буйынса "Айыҡ ауыл"  бәйгеһе алып барыла ине. Һәм уның ысынлап ыңғай күрһәткестәре лә бар ине. Тик уны туҡтатып ҡуйҙылар, сөнки был сара "халыҡ араһында ризаһыҙлыҡ уята", имеш. Ысынында,  бындай конкурстар урындарҙа алкоголле эсемлектәрҙең әйләнешен кәметә. Шул ғына. Быларҙан сығып, ошондай фекер тыуа: илебеҙгә айыҡ халыҡ кәрәкмәй. Айыҡ кеше бит фекерләй башлай, унан фекерләй-фекерләй әллә ниндәй юғары уйҙарға килергә мөмкин!

Быға тағы ла бер миҫал. Белеүебеҙсә, Ялсы ауыл биләмәһендә, ғөмүмән Күгәрсен районында, эскелеккә ҡаршы көрәш бик ҡәтғи алып барыла. "Балыҡ башынан..." тигән әйтемде ыңғай юҫыҡта ҡулланғанда, етәкселәр өлгө күрһәтә бында. Ялсы ауылы биләмәһе башлығы Ирек Юдаев был хаҡта шулай тип һөйләне:

- Биләмәбеҙҙә алкоголле эсемлек һатыуҙы закон нигеҙендә тыйырға ниәтләгәйнек. Бындай башланғысты урындағы халыҡ үҙе күтәреп сыҡты. Әгәр ҙә уларҙы республика парламенты депутаттары хупләһа - был илдә айырым ауылдарҙың алкоголле эсемлек һатыуҙы тыйыу хоҡуғын ғәмәлдә ҡулланыуҙың тәүге миҫалы буласаҡ ине. Урындағы магазин кәштәләрендә хәҙер иҫерткес эсемлектәр урынына кефир һәм төрлө һуттар ғына ултыра. Урындағы эшҡыуарҙар ҙа алкоголле продукция һатыуҙан баш тартты. Сөнки эскән кеше менән артыҡ байып та булмай, эште лә яйға һалыуы еңел түгел. Ялсы ауыл биләмәһенә ҡараған башҡа 5 ауыл магазиндарында ла ошондай уҡ хәл, араҡы, һыра, коктейль юҡ. Халыҡ айыҡ тормошто үҙе һайланы. 80 проценты алкоголле эсемлектәр һатыуҙы тулыһынса тыйыу өсөн тауыш бирҙе. Район башлығы Фәрит Мусин - эскелеккә ҡаршы иң әүҙем көрәшселәрҙең береһе. Ул заманында райондаштарын автобусҡа тейәп, эскенән арындырыусы имселәргә лә йөрөттө. Әммә хәмерҙе тыйып ҡына кешене айнытып булмай, ти ул. Халыҡты мәҙәни, спорт саралары ярҙамында яңылыш юлдан арындырырға кәрәк. Ауылдарҙа төрлө быуын вәкилдәре өсөн түңәрәктәр ойоштороло. Ололар бәйләм бәйләргә йыйылһа, йәштәр күберәк спорт менән мауыға. Һәр мәҙәниәт йортондағы алтаҡтала эскелеккә ҡаршы материалдар осратырға мөмкин. Хатта үткән быуаттан китап кәштәләрендә саңға батып ятҡан эскелеккә ҡаршы әҙәбиәтте лә теләп уҡыйҙар. Айырым биләмәләрҙә алкоголле эсемлек һатыуҙы тыйыу тураһындағы законды Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары Башҡортостанда ла ҡулланыуҙы яҡлап сыҡҡайны. Ялсы хакимиәте ауылдары был мөмкинлек менән файҙаланырға тәүгеләрҙән булып йөрьәт итте. Урындағы халыҡ был башланғысты төбәк парламенты ла хупларына ышана ине. Тик әлегә беҙҙең инициативаны хуплаусы юҡ. Тик беҙ был сикләүгә генә ҡарап, ҡул ҡаушырырға йыйынмайбыҙ, көрәшәсәкбеҙ әле..."

Бына бит, берәүҙәр эсмәҫкә тырыша, ә уларға "рөхсәт итмәйҙәр". Балаларына араҡы шешәләрен күрһәтмәй үҫтерергә тырыша, йәштәрҙе был сиргә дусар итмәҫкә тырыша - кире ҡағалар...

Ошо урында, бәлки, урынһыҙ ҙа һымаҡ булыр, әммә рух тигән төшөнсәне иҫкә төшөргө килә. Беҙгә иң башта рухты һауыҡтырырға, уны бар бәләләргә ҡаршы тора алырлыҡ көслө итеп сыныҡтырырға кәрәк. Ултырһын ул шешә ялтырап, һин уға ҡарама, алма, эсмә! Уның харам икәнен аңына һеңдер һәм башҡаларҙы ла тый, өгөтлә, оялт. Беҙ был афәткә ҡаршы шулай итеп кенә көрәшә алабыҙ. Мәҫәлән, минең ошонан башҡа сарам юҡ. Ә ул сара һәр беребеҙҙә бар һәм һәр беребеҙ шул сараны ҡулланһа, беҙ - көс. Әйҙәгеҙ, шул көс менән Күгәрсен зыялылары кеүектәрҙе күтәрәйек, изге ниәттәрен яҡлайыҡ.

**Миләүшә ХӘБИЛОВА.**

✓ *Сәйәси комиссар булараҡ, Х. Әмировҡа ярайһы уҡ ауыр мәсьәлә йөкмәтелә: милли ғәскәрҙәрҙең яңы шарттарҙа рух ныҡлығын тәьмин итеү, башҡорт һалдаттарына автономия өсөн көрәштең ҡатмарлы юлдарын төшөндөрөү.*



*УЛАР АВТОНОМИЯ ЯУЛАНЫ*

# ХӘЛИМ ӘМИРОВ

**Үткән быуат башындағы автономия өсөн көрәш тарихының өйрәнелмәгән биттәре күп. Үкенескә ҡаршы, ошо эштең башында торған эшмәкәрҙәрҙең күбеһен әле белеп бөтөрмәйбеҙ. Улар башҡорт милли хәрәкәте етәксеһе Әхмәтзәки Вәлиди менән иңгә-иң терәшеп, Башҡортостан мөхтәриәтен булдырыуҙа фиҙакәр хеҙмәт күрһәткән шәхестәр. Автономия өсөн көрәшкән ир-уҙамандарҙың күбеһе 30-сы йылдарҙа Сталин репрессияһы ҡорбаны булып, нисәмә тиҫтә йылдарға исемдәре онотолоуға дусар ителә.**



Ошондай шәхестәрҙең береһе - Хәлим Насретдин улы Әмиров. Уның исеме архив документтарында йыш осрай. Бигерәк тә ул 1919-1920 йылдарҙа башҡорт ғәскәрҙәренең сәйәси етәкселәренең береһе булараҡ танылыу ала. Әйткәндәй, Хәлим Әмиров төньяҡ-көнбайыш башҡорттарынан сыҡҡан милли хәрәкәт эшмәкәрҙәренең береһе. Ул 1894 йылда Өфө губернаһы Бөрө өйәҙенең Уран ырыуы башҡорттарына ҡараған Яңы Уртауыл ауылында (бөгөнгө Башҡортостан Республикаһының Янауыл районы) тыуған. Архив документтарынан күренеүенсә, Хәлим Әмиров Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенә 1918 йылда ҡушылған. Әммә 1917 йылда Башҡорт ҡоролтайҙарында Бөрө өйәҙе башҡорттарынан делегат булараҡ ҡатнашыуы ихтимал. Билдәле булыуынса, 1918 йылдың июнендә Силәбе ҡалаһында Башҡорт хөкүмәте үҙенең эшен яңынан башлай. Август башында Ырымбурға ҡайтып, Каруанһарай бинаһында урынлаша. Ырымбурға ҡайтыу менән Башҡорт хөкүмәте автономияның урындағы идара органдары эшен йәнләндереү менән шөғөлләнә башлай. "Ырымбурға килеп етер-етмәҫтән дәүләт ҡоролошо эштәре менән мәшғүл булдыҡ. Бының менән хөкүмәт рәйесе Юныс Бикбов һәм профессор Ҡулаев шөғөлләнде", - тип яҙа Әхмәтзәки Вәлиди. Ошо осорҙа Хәлим Әмиров Башҡорт хөкүмәтендә Мәғариф бүлеге мөдире урынбаҫары булып эш башлай. Ул Башҡортостан автономияһының урындағы власть органдары яныдағы мәғариф бүлектәрен ойоштороу, мәғариф эшен яйға һалыу менән шөғөлләнә.

Әммә Чехословак корпусы күтәрелешенән һуң килгән хөрриәт заман 1918 йылдың көҙөнә әкренләп юҡҡа сыға башлай. Демократик ҡараштағы булған һәм Башҡортостан автономияһына ыңғай ҡараған Һамар хөкүмәте ҡыҙылдар ҡысымына сыҙай алмай, Өфөгә сигенә. 1918 йылдың сентябрь аҙағына Өфөлә ойошторолған Ваҡытлы Бөтә Рәсәй хөкүмәте тиҙҙән Омскиға күсә. Бында ул монархист ҡарашлы генералдар йоғонтоһона эләгә һәм улар ҡушыуы буйынса өлкә һәм милли хөкүмәт ғәскәрҙәрен бөтөрөү яғын ҡайыра башлай. Башҡорт хөкүмәте ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә барлыҡҡа килгән форсат менән файҙаланып өлгөрә. Алты полктан торған Башҡорт ғәскәрен ойоштора һәм урындағы автономия органдарын ныҡыта. 1918 йылдың ноябрендә Омскиҙа адмирал Колчак власты үҙ ҡулына ала. Ул тәү сиратта Башҡорт хөкүмәтен һәм ғәскәрҙәрен юҡ итергә ниәтләй. Әммә ярайһы уҡ көс туплап алған Башҡортостан автономияһы диктатор Колчактың бойороҡтарына буйһонмай. Киреһенсә, 1918 йылдың аҙағында бар фронтҡа таралған полктарын бер йоҙроҡҡа туплауға өлгәшә.

Аҡтар яғында автономияға өмөтөн өҙгән башҡорттар Советтар менән бәйләнешкә инеп, килешеү төҙөргә ниәтләй. 1919 йылдың февралендә Башҡорт хөкүмәте Советтар яғына сығырға тигән ҡарар ҡабул итә. Тап ошо башҡорт халҡының яҙмышы, Башҡортостан дәүләтселеге өсөн һиңылыш осоронда Хәлим Әмиров үҙен ялҡынлы оратор һәм абруйлы эшмәкәр итеп күрһәтә. 1919 йылдың 16 февралендә ул Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәренең Совет власы яғына сығыу тураһында фарманын иғлан итеү өсөн Башҡорт корпусы штабынан махсус вәкәләтле сифатында Таналыҡ-Баймаҡ заводына (хәҙерге Баймаҡ ҡалаһы) ебәрелә. Х. Әмиров үҙенә йөкмәтелгән бурысты уңышлы атҡарып сыға. Халыҡ большевиктар менән ярашыуҙы хуплай.

Ҡыҙылдар яғына сыҡҡандан һуң бер нисә көн үткәс, 21 февраль көнө Темәс ауылында 1-се Башҡорт хәрби ҡоролтайы үтә. Х. Әмиров ҡоролтайҙа әүҙем ҡатнаша, йыйылған һалдаттар - съезд делегаттары алдында сығыш яһай, Советтар менән килешеү Башҡортостан автономияһы өсөн ҙур әһәмиәткә булыуын аңлата. Съезда Башҡортостандың ваҡытлы революцион хөкүмәте (Башревком) ойоштоҙола. Хәлим Әмиров тәжрибәле мәғариф эшмәкәре булараҡ, Башревкомдың Халыҡ мәғарифы комиссариаты коллегияһы ағзаһы итеп һайлана. Әммә Башҡортостан территорияһында һуғыш барған осорҙа милли мәғариф мәсьәләләре генә түгел, автономия идараһын ойоштороу ҙа ҙур ҡыйынлыҡтарға осрай. 1919 йылдың мартында ҡыҙылдарҙы аҡтар ҡыҫа башлағас, Башревком Темәс ауылынан Мораҡҡа күсергә мәжбүр була, артабан Иманғол ауылына (хәҙерге Ырымбур өлкәһендә), һуңынан Тоцкий ҡасабаһына барып урынлаша.

Троцкий бойороғо буйынса Башревком май аҙағында Саранск ҡалаһына барып төпләнә. Бында Башҡорт хөкүмәте, тәү сиратта, ҡыҙылдарға сыҡҡандан һуң таркатылған ғәскәрҙе тәртипкә килтереү эшенә тотона. Тиҙ арала ғәскәрҙәрҙе туплап, Башҡортостанға ҡайтыу, дошман ҡулында ҡалған йөмһүриәтте азат итеү көнүҙәк маҡсат була. Хәрби комиссар Әхмәтзәки Вәлиди элекке башҡорт ғәскәрҙәренән ике кавалерия һәм ике уҡсы полк ойоштора. Полктар Айырым Башҡорт бригадаһына берләштерелә. Яңы башҡорт ғәскәренә сәйәси комиссар итеп Вәлиди ышаныслы көрәштәштәренең береһе булған, һалдаттар араһында абруй ҡаҙанып өлгөргән эшмәкәр Хәлим Әмировты тәғәйенләй. Сәйәси комиссар булараҡ, Х. Әмировҡа ярайһы уҡ ауыр мәсьәлә йөкмәтелә: милли ғәскәрҙәрҙең яңы шарттарҙа рух ныҡлығын тәьмин итеү, башҡорт һалдаттарына автономия өсөн көрәштең ҡатмарлы юлдарын төшөндөрөү. Башҡорт ғәскәрҙәре Көнсығыш фронтҡа барып, йәғни Башҡортостанға ҡайтып, Колчак армияһына ҡаршы һуғышырға ашҡынып тора. Ләкин 1919 йылдың июнендә башҡорт полктарын Украинаға ебәреү тураһындағы Троцкийҙың фарманы башҡорттар өсөн аяҙ көндә күк күкрәгәндәй була. Украинала Ҡыҙыл Армияның хәле мөшкөлләнеү сәбәпле, Троцкий Саранскиҙағы башҡорт полктарын Көньяҡ фронтҡа, Деникин армияһына ҡаршы ебәрергә теләй. Башҡорт вәкилдәре был мәсьәлә буйынса Лениндың үҙенә үк инеп һөйләшеп, аңлатып сыға. *"У меня были представители башкир; просят назначать их войска на восток, а не на юг. На востоке в своем крае они могут, дескать, помочь быстро взять Челябинск, ибо и киргизы пойдут с ними; на юге же они бессильны и боятся, что ничего не поделают. Очень прошу взвесить эти доводы, по-моему, серьезные"*, - тип яҙа Ленин Троцкийға. Әммә Реввоенсовет рәйесе үҙ уйынан кире ҡайтмай.

Әле аҙағынаса ойошторолоп бөтмәгән, хәрби кәрәк-ярақтар менән тейешенсә тәьмин ителмәгән килеш башҡорт полктары Харьков ҡалаһына юллана. Килеп тыуған ҡатмарлы хәлдә иҫәпкә алып, хөкүмәт сәйәси комиссар Хәлим Әмировҡа Башревкомдың махсус вәкәләтле вәкиле хоҡуҡтарын бирә, йәғни Украинаға киткән ғәскәрҙәр менән идара итеү бурысы йөкмәтелә. Сөнки башҡорт полктарының берҙәм командалығы булмай, Троцкий Вәлидиҙе, улар Харьков ҡалаһында гарнизон хеҙмәте генә үтәрҙәр, тип ышандыра.

**Азат ЯРМУЛЛИН, тарихсы.**
**(Дауамы бар).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Йәдкәр БӘШИРОВ*

# БӨЙӨК БАШҠОРТ ИЛЕ

Хәҙерге ваҡытта Көньяҡ Урал территорияһы савромат мәҙәниәте таралған ареалға инмәй һәм "савромат" этнонимы Көньяҡ Уралда йәшәүсе боронғо ҡәбиләләрҙе аңлатҡанда ҡулланылмай (209, 90-сы бит).

Башҡорт ғалимдарының Көньяҡ Урал территорияһында үткәргән археологик ҡаҙылмалары һөҙөмтәләре быны иҫбатлай. Филиппов кургандары уларҙың береһе һанала. Курган Ырымбур ҡалаһының көнбайышында, ҡаланан 100 саҡрым алыҫлыҡта урынлашҡан. 1986-1990 йылдарҙа А.Х. Пшеничнюк етәкселегендәге РФА экспедицияһы 17 курганды тикшерә. Р. Вахитов экспедиция етәксеһе А. Пшеничнюк менән осрашып һөйләшә. Башҡорт ғалимы унан кургандарҙы ҡаҙғанда, бигерәк тә б.э.т. IV быуатҡа ҡарағандарынан табылған хазиналарҙы иртә сарматтарҙыҡы тип атауҙары хаҡында һорай. Вахитовтың дәғүәһе шуға бәйле: "Башҡортостан" энциклопедияһында сарматтар бүлегендә был ҡәбилә халҡының ҡалалары булмауы, балсыҡтан эшләнгән һауыт-һаба ҡулланыуы хаҡында хәбәр ителә. Тимәк, сарматтарҙың ҡәберлектәрендә табылған ҡомартҡыларҙың алтындан, көмөштән булыуы хаҡында һүҙ алып барырға ла мөмкин түгел. Сарматтар тимер эшкәртмәгән, уларҙың тимер иретеү мейестәре булмаған, ҡәберлектә табылған уникаль ҡомартҡылар уларҙыҡы түгел. А. Пшеничнюк 2006 йылда Филиппов кургандарында табылған хазиналарға һәм уларҙың авторҙарына бәйле фекерҙәрен бер аҙ үҙгәртте. Ул үҙенең мәҡәләһендә Филиппов кургандарын "Көньяҡ Уралдың һәм Аҫҡы Волга буйының иң бай күсмә халыҡтарыныҡы" йәғни б.э.т. V быуатта Урал алдында, Урта һәм Көньяҡ Уралда, уға сиктәш далала көн күреүсе уғыр-башҡорттарыныҡы тип атай. Бының менән ул сарматтарҙың Уралда йәшәмәүен дә дәлилләй.

Башҡорттарҙың иң боронғо халыҡтарҙың береһе тип һанаусы тарихи мәғлүмәттәр араһында (IX быуаттан башлап ) урта быуаттың көнсығыш авторҙарыныҡы ла бар. Авторҙар араһында Сәлләм ат-Тарджумаи (IX быуат), Ибн Руста (X быуат), әл-Балхи (X быуат) һәм башҡалар. Шул уҡ ваҡытта был авторҙар башҡорт халҡын барлыҡҡа килтергән боронғо ырыуҙарҙың тарихын урап үтергә тырыша. Үкенескә күрә, ҡайһы бер хәҙерге заман ғалимдары башҡорт халҡының тарихын башҡа халыҡтар менән бәйләй: венгрҙар менән (Р. Вахитов, 2009), иран-парфяндар менән (М. Зәкиев), этмәһә, курдтар менән (С. Ғәлләмов). Талантлы башҡорт ғалимы С. Ғәлләмов үҙенең хеҙмәттәрендә "башкурд" һәм "курд" төшөнсәләрен йәнәш ҡуйып, башҡорттарҙы курдтарға бәйләргә тырыша. Автор башҡорттарҙың боронғо бөрйән ырыуын Борзен Михрбандан алынған тип, башҡорттарҙы иран сығышлы тип иҫәпләй (IV т. 297-300-се биттәр). Уныңса, башҡорттар беҙҙең эраның 1-се меңйыллығында формалашҡан, ә "Тарихи Башҡортостан" территорияһында башҡорттарҙың боронғо ата-бабалары түгел, башҡа халыҡтар йәшәгән булып сыға (93, 7-се бит).

**(Дауамы бар).**

✓ *Хеҙмәтем бөрйәндәр хаҡында тик яңы мәғлүмәттәрҙән генә тора. Бөрйәндәр тураһындағы бығаса булған ғилми концепция үҙе үк үҙгәреш кисерҙе: бөрйәндәр төрки тамырлы түгел, ә иран, скиф-сармат сығышлы ҡәбилә.*



**Быйылғы йәйҙә Санкт-Петербург антропология һәм этнография музейының этнология советындағы "Кунсткамера" кабинетында (һирәк осрай торған тарихи ҡомартҡылар кабинеты) танылған тележурналист һәм тарихсы Салауат Хәмиҙуллин кандидатлыҡ диссертацияһы яҡланы. Салауаттың рәсми оппоненты, тарих фәндәре докторы, М.В. Ломоносов исемендәге Мәскәү дәүләт университеты доценты Илья Владимирович Зайцевтың диссертация эшенә биргән баһаламаһында шундай юлдар бар: "Диссертация эшенең төп һөҙөмтәһе булып бөрйән ырыуының иран сығышлы икәнен иҫбатлау тора. Был хеҙмәт башҡорт халҡының килеп сығышын өйрәнеүҙәге яңы һүҙ булып яңғырай. Рәсәй һәм сит ил тарих фәнендә бөрйәндәр тарихы һәм уларҙың башҡорт милләтен формалаштырыуҙағы әһәмиәте хаҡында махсус хеҙмәт булмауы С.И. Хәмиҙуллиндың был ғилми эшен айырыуса актуаль итә..." Салауат ХӘМИҘУЛЛИН менән әңгәмәбеҙ тап шул этнология советы ултырышы хаҡында һөйләшеүҙән башланды.**

# ТЫҢЫС ТОРМОШТА - ә яуға сапҡанда -

**▸ Салауат, беҙ, мөхәрририәттә ғәзит уҡыусылар, һинең кандидатлыҡ диссертацияһы яҡлауыңды милләтебеҙҙең ҙур еңеүе итеп ҡабул итәбеҙ. Артабан да һиңә фән докторы булырға, республикабыҙға һәм милләтебеҙгә ғилми дәрәжәләреңә таянып хеҙмәт итергә яҙһын. Шулай ҙа был ғилми дәрәжәгә өлгәшеүең хаҡында үҙең ентекләп һөйләп үтһәң,яҡшыраҡ булыр ине: кем ғилми етәксең булды, диссертацияңдың темаһы нисек атала?**

- Диссертациямдың темаһы "Бөрйәндәр: сығанаҡтар, өйрәнеү тарихы, гипотезалар" тип аталды. Ғилми хеҙмәтемдә мин ғәрәп һәм фарсы сығанаҡтарына таянып яҙҙым. Минең был темам буйынса этнология советы Рәсәйҙә күп түгел. Иң тәүҙә Ижевскиҙағы этнология советына мөрәжәғәт иткәйнем, әммә унда ғәрәп һәм фарсы сығанаҡтары буйынса белгестәр булмаған, Санкт-Петербург антропология һәм этнография музейының этнология советына мөрәжәғәт иттем. Ундағы белгестәр хеҙмәтемә юғары баһа бирҙе. Совет ағзаларының барыһы ла диссертациямды ыңғай баһаланы. География фәндәре докторы Айбулат Псәнчин ғилми етәксем булып сығыш яһаны.

**▸ Авторефератың элек донъя күргән бөрйәндәр хаҡындағы китабың нигеҙендә яҙылдымы?**

- Киреһенсә, ул китабым авторефератҡа таянып яҙылғайны. Диссертациям 2011-2012 йылдарҙа уҡ әҙер ине, тик яҡлар урын эҙләп йөрөп, 5 йыл ғүмер үтеп тә китте.

**▸ Быға тиклем бөрйәндәрҙе өйрәнгән башҡа ғалимдарҙан айырмалы рәүештә, был хеҙмәтең менән ниндәй яңы һүҙ әйтә алдың?**

- Мин бөрйәндәр хаҡында башҡа ғалимдар яҙғандың нәҡ киреһен иҫбат итә алдым кеүек. Мәҫәлән, Р. Кузеев бөрйәндәрҙе төрки ҡәбилә тип иҫәпләгән. Мин уның дәлилен кире ҡағып ҡына ҡалмайым, бөрйәндәр хаҡында тулы мәғлүмәт килтерәм. Был ҡәбилә тураһында ғәрәп ғалимдары бик күп яҙып ҡалдырған, шулай уҡ фарсы ғалимдарының да улар хаҡында яҙыуҙары бар. Бында, бәлки, һорауҙы "Ниндәй яңы һүҙ әйтелде?" тип ҡуйыу ҙа дөрөҫерәк тап килеп етмәйҙер. Сөнки хеҙмәтем бөрйәндәр хаҡында тик яңы мәғлүмәттәрҙән генә тора. Улай ғына ла түгел, бөрйәндәр тураһындағы бығаса булған ғилми концепция үҙе үк үҙгәреш кисерҙе: бөрйәндәр төрки тамырлы түгел, ә иран, скиф-сармат сығышлы ҡәбилә.

**▸ Философия фәндәре кандидаты Закирйән Әминев үҙенең "Урал батыр" эпосы һәм башҡорттарҙың мифологияһы", "Боронғо башҡорттарҙың космогоник ҡараштары" тигән хеҙмәттәрендә халҡыбыҙҙың мәшһүр ҡомартҡыһы "Урал батыр" эпосының иран мифологияһы менән уртаҡлыҡтарын табып, ҙур асыш яһай. Былдай уртаҡлыҡ осраҡлы түгел, йәғни ирандар менән башҡорттарҙың уртаҡ тарихы барлығы хаҡында һүҙ алып барырға мөмкин был осраҡта. Икенсенән, һинең ғилми хеҙмәтеңдә лә бөрйәндәрҙең иран сығышлы булыуы документаль нигеҙҙә иҫбат ителә икән, ошо ике факт "Урал батыр" эпосы авторлығын да бөрйәндәргә бәйләргә нигеҙ була аламы?**

- Беҙ Закирйән ағай Әминев менән икебеҙ ике йүнәлештә, алдан һөйләшеп килешмәйенсә, бер үк тарихи тамырға барып сыҡҡанбыҙ, бер үк төрлө һығымтаға килгәнбеҙ икән, был һис кенә лә осраҡлы күренеш түгел. Мин былдай һығымтаға яҙма сығанаҡтарға таянып килһәм, Закирйән ағай мифологияны анализлап, шул уҡ фекерҙе әйтә. Ғилми хеҙмәт яҙғанда беҙ бер тапҡыр ҙа осрашманыҡ һәм алдан һәғән һығымталарыбыҙҙы сағыштырманыҡ. Ҡыҫҡаһы, икебеҙ ҙә ике юлдан Иранға барып сыҡтыҡ. Мин дә үҙ хеҙмәтемдә "Урал батыр" эпосының бөрйәндәр ҡомартҡыһы булыуы хаҡында һаҡ ҡына итеп әйткәйнем. "Урал батыр" эпосында төрки тамырҙарының осмото ла юҡ. Эпос сюжеты буйынса ла, персонаждары буйынса ла Иранға барып тоташа. Закирйән ағай мифологияны тәрән аңлай, шуға күрә ул образдарҙың семантикаһын ғәжәйеп рәүештә асыуға өлгәшә. Ә мин иһә образдарҙың этимология мәсьәләһен тикшерҙем. Бер мәсьәлә шик тыуҙырмай: эпостың сюжет линияһын Ирандан Уралға бөрйәндәр алып килгән. Бөрйәндәр кеүек үк ҡаңлылар ҙа Иран сығышлы, улар ҙа эпостың ниндәйҙер сюжет линияһын алып килеүе ихтимал. Киләсәктә беҙгә был мәсьәләләрҙе ентекле тикшереп, асыҡларға кәрәк.

Закирйән ағай менән бер фекерҙә килешәм: "Урал батыр" эпосы башҡорттарҙың иран телле ҡәбиләләренең ижад емеше, уларҙың иң сағыу вәкилдәре - бөрйәндәр. Ҡаңлылар ҙа иран сығышлы, әммә улар һуңынан ҡыпсаҡлашыуға ныҡ бирелә. Үҫәргәндәрҙең тарихын да ныҡлы өйрәнеү талап ителә, уларҙың да тамыры төрки түгеллеге хаҡында дәлилдәр бар. Был иң беренсе нәүбәттә Мөйтән бейгә бәйле. Беҙгә "Мөйтән" менән "Үҫәргән" дең бер үк атама икәнен иҫбат итергә кәрәк. Минең фекеремсә, табындар ҙа иран сығышлы булырға тейеш. Улар башҡорт халҡы составына тулыһынса төркиләшеп ҡушыла. Ә бөрйәндәргә килгәндә, улар табындарҙан айырмалы рәүештә, көньяҡ Уралда иран телле булып формалаша. Был уларҙың матди ҡомартҡыларында сағылыш таба.

**▸ Р. Кузеевтан һәм башҡаларҙан башлап Уралтауға башҡорт ырыуҙарының ҡайҙандыр "килеүе" йә "күсеүе" хаҡында һүҙ алып барыла. Ә ниңә башҡорттар Уралтауға ҡайҙандыр килергә тейеш һуң?**

- Этногенез ябай ғына процесс булмаған. Башҡорт халҡының төрлө ырыу-ҡәбилә ҡатламдары, ырыу-ара буленештәре булған. Мәҫәлән, иран сығышлы ҡатлам Уралтауҙан бер ҡайҙа ла китмәгән һәм бер ҡайҙан да килмәгән. Улар, миҙгелгә ҡарап, ҙур майҙанда күсенеп йөрөгән. Мәҫәлән, нуғайҙар йәйҙе Башҡорт илендә үткәрһә, ҡышты Кубанда, Арал диңгеҙе буйында үткәргән. Бөрйәндәрҙең боронғо ата-бабалары һаналған скиф-сарматтар ҙа шундай йәшәү рәүеше алып барған. Улар шундай өсмөйөш буйлап йөрөгән: көньяҡ Урал - Арал буйы - төньяҡ Кавказ. Уларҙың ошо өсмөйөш буйлап йөрөүен хужалыҡ циклы итеп тә атарға була, йәғни ошо өс урын да бер территорияны тәшкил иткән. Улар бер ҡайҙа ла китмәгән, бер ҡайҙан да килмәгән, ошо рәүешле көн иткән.

"Килеү"мәсьәләһенә туҡталғанда, төрки ҡәбиләләренең Уралға килеүе бер кемдә лә шик тыуҙырмай. Шул уҡ ваҡытта "Башҡорт" этнонимы ла улар менән бергә килгән. Улар Уралға килгән дә, бындағы иран телле башҡа ырыу-ҡәбиләләр менән берләшеп, башҡорт халҡын барлыҡҡа килтергән.

**▸ Йәдкәр Бәширов үҙенең "Бөйөк Башҡорт иле"тигән хеҙмәтендә башҡорт ырыуҙары араһында боронғо ата-бабалары уғырҙар булғандары ла бар тип раҫлай. Был фекергә ҡарашың нисек?**

- Тарихи яҡтан ныҡлы тикшереү үткәрмәйенсә яһалған һығымта, дөрөҫ булған осраҡта ла, фараз булып ҡала. Ниндәйҙер фараздар килтерергә була, әммә һәр бер дәлил тарихи яҡтан ныҡлы өйрәнелеп яһалырға тейешле. Мин Йәдкәр Бәшировтың был фекерен инҡар итмәйем, әммә уның тағы ла тәрәнерәк итеп өйрәнеүен теләйем. Мәҫәлән, ул юрматыларҙы уғыр сығышлы тип атай. Бәлки, улар уғыр сығышлы ла түгелдер. Сөнки венгр тарихсылары үҙҙәре үк юрматыларҙың Венгр урҙаһына инеүе, әммә төрки тамырлы икәнен яҙа. Шул уҡ ваҡытта "юрматы" этнонимының "сармат" менән оҡшаш булыуын да иҫтән сығарырға ярамай. Беҙ генә "сармат" тип әйтәбеҙ, ә грек сығанаҡтарында "сюрмат" сарматты аңлата. Сюрмат менән юрматы бик яҡын. Ошонан сығып, юрматыларҙы төрки тамырлы тип атап буламы? Кем белә, бәлки улар сарматтарҙыр? Венгр теләндә лә иран йоғонтоһо көслә һиҙелә, унда иран һүҙҙәре бик күп.

**▸ Бөрйән ырыуы күпләп йәшәгән хәҙерге Баймаҡ районында "Упа" тигән урын бар. Ҡайһы бер ғалимдар, шул иҫәптән Флорид Сөнәғәтов, ошонан сығып, бөрйәндәрҙең Өфө ҡалаһын төҙөүҙә ҡатнашҡанлығы хаҡында яҙа. Бында ниндәйҙер тарихи факт хаҡында һүҙ алып барырға мөмкинме?**

- Был хаҡта мин үҙемдең китабымда ла яҙам. Ни өсөн тигәндә, Өфө урынында барлыҡҡа килгән Турбаслы мәҙәниәтен Кавказдан килгән бөрйәндәр нигеҙләгән. Быны аңлай алмаған археологтар "Уфа какая-то Хазарская заимка" тип яҙып сыҡты. Сөнки улар яҙма сығанаҡтар менән таныш булмағанға күрә, был ҡомартҡыларҙың сығанағын аңлай алмаған. Документтар буйынса, хазарҙар йәшәгән ерҙән Өфө тирәһенә бөрйәндәр күсенеп йөрөгән. Өфөлә йәшәүсе Антонов фамилиялы ғалим үҙенең һуңғы хеҙмәтендә миңә һылтанып, бөрйәндәрҙең бында килеүе, аҙаҡтан уғырҙарҙың уларҙы ҡыҫырыҡлап сығарыуы хаҡында яҙа. Хәҙерге Бөрйән, Баймаҡ райондары территорияһында табылған керамиканың нисек унда барып сыҡҡанын археологтар шулай уҡ аңлата алманы. Ундай керамика тик Турбаслы мәҙәниәтенә хас.

**▸ Салауат, элегерәк тарихи темаға әңгәмә ҡорғанда, тик хәрби халыҡтың ғына тарихы бар, тигән фекер әйткәйнең. Һаман да шул фекереңдә ҡалдыңмы?**

- Был фекерҙе мин генә әйтмәнем. Булат Аҙнабаевтан да ишеткәнем бар уны. Героик эпосты тик хәрби халыҡ ҡына яҙа алған кеүек, хәрби булмаған халыҡ менән дә шул уҡ хәл. Элек ҡайҙалыр табан хәрәкәт итеү, ерҙәр яулау тик һуғыш менән оҙатылып барған. Тик сәйәси субъект, сәйәси берәмек һаналған халыҡтар ғына һуғышҡан, ҡайҙалыр барған. Ә сәйәси субъект булмаған халыҡ бер ҡайҙа ла хәрәкәт итә алмаған. Улар бары тик этнос булараҡ ҡына йәшәгән.

**▸ Уларҙың дәүләтселеге лә булмағанмы?**

- Бәлки, дәүләтселек тә түгелдер. Мәҫәлән, гректарҙың беҙ аңлаған кимәлдәге дәүләтселеге бөтөнләй булмаған. Уларҙың ҡала полистары ғына торған, бар мәсьәләне халыҡ тауыш биреп хәл иткән һәм үҙҙәренә хас дәүләтселеге сәйәси субъект иҫәпләнгән, тимәк, уларҙы тарихтың субъекты тип танырға кәрәк. Шулай булмаһа, грек полистары ҡеүәтле фарсы державаһына ҡаршы тора алмаҫ ине.

Башҡорттарҙа ла иң тәүҙә власть вертикале һаҡланып килгән. Башҡорттарҙың батшаһы хаҡында Масуди яҙып ҡалдырған. XIII быуат венгр ғалимдары "Баскардия батшаһы" ("государь всей Баскардии") тураһында яҙа. Артабан батша власының вертикале юҡҡа сыға һәм башҡорт ырыуҙарының үҙидаралығына ҡоролған "горизонталь полития" килеп сыға. Улар гректарҙың "ҡала полистары" менән оҡшаш. Тап ошо горизонталь дәүләтселек һаҡланғанға күрә лә башҡорттар ике быуат буйына ихтилалға күтәрелә алған. Һәр ырыу, ҡәбилә горизонталь йышлыҡта ҡарағанда үҙаллы һымаҡ та һаналған, шул уҡ ваҡытта хәрби ситуация тыуғанда был кинлек ҡаҡшамаҫ көскә әүерелә алған. Ҡаҙан ханлығында, мәҫәлән, элитаны ҡырып һалырға йә һатып алырға мөмкин булған.

**▸ "Горизонталь полития"ны дәүләтселектең демократик формаһы тип атарға буламы?**

- Шуға яҡын. Ситтәр башҡорттарҙың ерҙәрен баҫып ала алмаған. Сөнки улар ниндәйҙер кланға ҡараған аҡһөйәктәрҙең түгел, ә үҙенең тыуған ерен яҡлап һуғышҡан. Һәр ырыу үҙ ере өсөн, ә барлыҡ ырыу-ҡәбиләләр бергә дөйөм халыҡ мәнфәғәте өсөн көрәшкән. Боронғо яҙмаларҙа "Беҙ - башҡорт ырыуҙары (иләүҙәре)" тигән юлдар һаҡланыуы тап шул хаҡта һөйләй.

*✓ Фәҡәт башҡорт ихтилалдары һөҙөмтәһендә Рәсәйҙә Ислам дине һаҡланып ҡалған. Сөнки XVII быуатҡа Волга буйындағы 400 мең мосолмандың яртыһы суҡындырыла. Башҡорттар үҙҙәренең хоҡуҡтарын һаҡлап ҡала.*



# БӨРЙӘН, ЮРМАТЫ, ТҮҢГӘҮЕР… башҡорт

## САЛАУАТ ХӘМИҘУЛЛИН:

*Әле "Урта быуат сығанаҡтарында башҡорттар һәм Башҡорт иле" тигән китап әҙерләйем. Китапта ғәрәп һәм фарсы сығанаҡтарында башҡорттар һәм Башҡорт иле хаҡындағы барлыҡ мәғлүмәттәр һәм уларға комментарийҙар урын аласаҡ.*

**Тимәк, улар тыныс тормошта үҙҙәрен бөрйән, юрматы, түңгәүер, үҫәргән һ.б. тип таныған, ә инде бергәләп яуға сапҡанда башҡортҡа әүерелгән. Шулай тип әйтеп буламы?**

- Эйе, була. Был хәл бер үк ваҡытта башҡорттарҙың тарихи субъект ролен үтәүен дә аңлата. Башҡорттар борон-борондан Евразия киңлегендә йәшәгән империяларҙың автономиялы субъекты булып йәшәгән. Был империялар барыһы ла юҡҡа сыҡҡан, ә башҡорттар һаҡланып ҡалған.

**Халыҡтың үҙ ғәскәрен төҙөү һәләтенә эйә булыуы уның дәүләтселек тәжрибәһе хаҡында ла һөйләй бит. Сөнки ғәскәрҙе төҙөү һәм уны халыҡ иҫәбенә тәьмин итеү тик дәүләтселек механизмы ярҙамында ғына башҡарыла ала. Шулай түгелме?**

- Шулай. Ғәскәр дәүләтһеҙ төҙөлмәй, ә дәүләт булһын өсөн хан мотлаҡ түгел. Политияла дөйөм мәсьәләләрҙе хан түгел, халыҡ йыйыны, ҡоролтай хәл иткән. Беҙ дәүләтте иң юғары ҡиммәт тип иҫәпләп яңылышабыҙ. Алдынғы ҡарашлы булыуҙың да билдәһе дәүләтселек түгел. Кешелек йәшәйешенең вертикалға ҡоролмаған башҡа формалары ла булған.



**Урыҫ реформаторы Петр Столыпин "Милли үҙаңы булмаған халыҡ башҡа халыҡтар үҫеп сығыр өсөн тиреҫ кенә" тигән. Был фекергә ҡарашың нисек?**

- Йөҙ проценты менән килешәм. Ҡытай милләтселеге атаһы Сунь Ят Сен: "Барлыҡ халыҡтарҙа милләтселек бар, беҙҙә генә ул юҡ", - тип ҡытайҙарҙа милләтселек юҡ тигәнде иҫбатларға тырышҡан. Ысынлап та, ҡытайҙарҙа милләтселек булмаған, шуға күрә улар яһалма рәүештә уны булдырырға ынтылған. Ни өсөн? Сөнки ҡытай тигән милләттең үҙе лә юҡ. Унда бер-береһенең телен бөтөнләй аңламаған бихисап халыҡтар йәшәй. Ҡытай телевидениеһы аша барған тапшырыуҙарҙы дәүләттең 70 процент халҡы бөтөнләй аңламай. Ҡытай тигән халыҡ юҡ, ул хәҙерге ваҡытта формалашыу осоро кисерә. Уларҙа ҡытай гражданлыҡ милләте бар, этник милләт юҡ.

**Курдтарҙың ҡасан да булһа үҙ дәүләтен төҙөргә мөмкинлеге булыр тип уйлайһыңмы?**

- Курдтар ер йөҙөндә барлығы 30 миллион тирәһе. Төркиәлә - 13-18, Иракта - 6,5, Иранда - 3,35-8, Сирияла - 1,7-2,2 миллион, Германияла - 800, Афғанстанда - 74, Рәсәйҙә 63,8 мең курд йәшәй. Беҙ уларҙы курдтар тип атаһаҡ та, был этноним аҫтында күп һанлы халыҡтар йәшәй. Шуныһы билдәле: Төркиәлә йәшәүсе курдтар үҙҙәренең шундай ҡеүәтле дәүләт эсендә йәшәүе менән риза. Әгәр ҙә башҡа дәүләттәрҙә йәшәүсе курдтар ғына айырым дәүләт төҙөү теләген белдереп, уларҙы барлыҡ курдтар күтәреп сыҡһа, ысынлап та, донъяның сәйәси картаһында яңы дәүләт барлыҡҡа килеүе лә ихтимал.

**Игорь Кучумовтың "Урал батыр" эпосын Мөхәмәтша Буранғолов үҙе яҙған тигән фекеренә ҡарата нимә әйтерһең?**

- Беҙҙә башҡорттар хаҡында ниндәйҙер ыңғай хәбәр ишетелһә, быны үҙҙәрен мәсхәрәләү һымаҡ ҡабул иткән кешеләр бар. Уларса, башҡорттар хаҡында яҡшы нәмә бөтөнләй булырға тейеш түгел, башҡорт тарихында ла яҡшы ваҡиғалар юҡ тигән ҡараштағы. Мин уларҙы "башкирофобия менән шөғөлләнеүсе банда" тип атар инем. Уларға башҡа төрлө атама биреп булмай. Кучумовтың "Урал батыр" эпосы хаҡындағы фекеренең бер ниндәй ғилми һәм тарихи нигеҙе юҡ. Мин эпостың Мөхәмәтша Буранғоловтан алдараҡ яҙып алынмауына ғына үкенес белдерәм. Ни өсөн тигәндә, Ғәбит, Хәмит сәсәндәрҙән алдағы сәсәндәр эпосты, бәлки, башҡасараҡ башҡарғандыр. Бер үк көләмәсте төрлө кеше төрлөсә һөйләһә лә, уның йөкмәткеһе һәм мәғәнәһе үҙгәрешһеҙ ҡала. Әгәр ҙә уның мәғәнәһе үҙгәрһә, көләмәс көлкөлө булыуҙан туҡтаясаҡ.

**Салауат, башҡорт тарихына ҡарата төрлө концепциялар бар. Р. Кузеевтың концепцияһында башҡорттарҙың Алтайҙан килеүе хаҡында әйтелә. Н. Мәжитов меңәрләгән археологик ҡомартҡыларға таянып, башҡорттарҙың боронғо ата-бабалары беҙҙең эраға тиклем үк Уралда йәшәүе хаҡында белдерҙе. Ә инде гаплатөркөмдәрҙе өйрәнеүсе ғалимдар хәҡикәт Нияз Мәжитов яғында булыуын иҫбат итте. Ә бына Салауат Хәмиҙуллиндың концепцияһы нисек яңғырай?**

- Башҡорттарҙың боронғо ата-бабалары әле "башҡорт" тигән атама булмаған саҡта, беҙҙең эраға тиклем дә, унан һуң да Уралда йәшәгән. Әммә улар башҡорт атамаһы менән йөрөтөлмәһә лә, беҙҙең атай-олатайҙар булыуҙан туҡтамаған бит. Эйе, "башҡорт" этнонимын Алтай төрөктәре алып килгән, шунан һуң ғына этнос берҙәм исем аҫтында формалаша башлаған. Башҡорттар борон-борондан Уралда ғына йәшәмәгән. Улар Урал менән Арал араһығын биләгән. Ҡытай сығанаҡтарының 643 йылдағы йылъяҙмаһында "башукули" ("башҡорт") халҡы телгә алына. Әммә телгә алыныуы ғына был этнонимдың тап шул быуатта барлыҡҡа килеүен аңлатмай.

**Бөрйәндәр, тағы ла төрлө ырыуҙарҙың тарихына бәйле сығарған китаптарыңдан тыш, тағы ла ниндәй темалар өҫтөндә эшләйһең? Ниндәй яңы табыштарың бар?**

- Әле "Урта быуат сығанаҡтарында башҡорттар һәм Башҡорт иле" тигән китап әҙерләйем. Китапта ғәрәп һәм фарсы сығанаҡтарында башҡорттар һәм Башҡорт иле хаҡындағы барлыҡ мәғлүмәттәр һәм уларға комментарийҙар урын аласаҡ. Күптәр, мәҫәлән, Иҙрисиның башҡорттар хаҡында әйткән фекерҙәренә таяна, әммә үҙҙәре Иҙрисиның китаптарын ҡулына ла алып ҡарамай. Уларҙың яҙғандарын төп сығанаҡтағы менән сағыштырһаң, мәғлүмәттәр бөтөнләй тура килмәй. Шуға күрә, тарихсылар ул сығанаҡтарҙы үҙ күҙҙәре менән уҡыһын өсөн уларҙы баҫтырып сығарырға кәрәк, тип иҫәпләйем.

**Бөрйәндәр хаҡында мәғлүмәтле кеше булараҡ, һинә шундай һорау: бөрйәндәрҙең башҡа башҡорт ырыу-ҡәбиләләре араһында тотҡан урыны нимәгә ҡайтып ҡала?**

- Мин бында тик бөрйәндәр хаҡында ғына әйтергә теләмәҫ инем. Сөнки һәр бер ырыу үҙенсә ҡыҙыҡлы. Табындар, мәҫәлән, Сыңғыҙхан традицияларын үҙендә һаҡлаусылар, төньяҡ-көнбайыш башҡорттары тарихы ла бик ҡыҙыҡлы. Ҡыҫҡаһы, һәр башҡорт ырыуының халыҡ тарихында үҙенең урыны һәм йөҙө бар. Башҡорт йәмғиәтендә тиҫтәләгән мең кешене тәшкил итеүсе ырыу менән 500 кешенән торған ырыуҙың бер үк кимәлдәге статусы булған. Себер ханлығының төп көсөн башҡорт ырыуҙары тәшкил итһә лә, Силәбе яғының ғалимдары уларҙы "төрки телле ырыуҙар" тип кенә атау яғында.

**Төркиләшкәнгә тиклем бөрйәндәр ниндәй телдә һөйләште икән? Ул телде хәҙер киренән тергеҙеү мөмкинме?**

- Ул иран, алан теленә яҡын тел булған һәм уны киренән тергеҙеү мөмкин түгелдер тип иҫәпләйем. Мин үҙемдең китабымда хазарҙарҙың иран телле булыуы хаҡында яҙғайным. Хәҙер килеп, көтмәгәндә минең фекерем раҫланды. Рәсәй телсеһе Мудрат хазар руналарын уҡыуҙа ҡатнашып, бөрйәндәр менән хазарҙарҙың бер тамырҙан булыуын иҫбат итте.

**Һинең Салауат Юлаев хаҡындағы телефильмыңды ҡарағас, шундай һорау биргем килде: совет осоро идеологтары синфи көрәштә ҡатнашыусы милли батырҙы күтәреү ихтыяжы килеп тыуғас, ни өсөн фәҡәт Салауат Юлаевты һайланы икән? Салауат шәхесенең әһәмиәтен һис тә кәметмәйенсә, ошо уҡ урынға, әйтәйек, Алдар батырҙы ла ҡуйырға мөмкин бит…**

- Мамин Сибиряк яҙмаларында башҡорттарҙың революцияға тиклем үк Алдар батырҙы ла, Салауат батырҙы ла, Ҡараһаҡалды ла, Сәйет батырҙы ла маҡтап дан йырлауҙары хаҡында әйтелә. Шуға күрә мин, Салауатты совет дәүере идеологтары һайлап алған, тигән фекер менән килешмәҫ инем. Минеңсә, йәрәбәнең Салауат өлөшөнә тура килеүендә Пушкин ҙур роль уйнағандыр. Шағир "Пугачев тарихы"ның алтынсы бүлегендә Салауатты "свирепый Салават" тип атай бит.

**Башҡорт ихтилалдарына ҡарата төрлө ҡараштар әйтелә. Хатта "Ниңә кәрәк булған беҙҙең атай-олатайҙарға шул тиклем ҡан ҡойорға? Ана, батшалыҡҡа ҡаршы сыҡмаған халыҡтар һаҡланып ҡалған бит", тип белдереүселәр ҙә бар…**

- Әгәр ҙә башҡорттар ике быуат буйына империяға ҡаршы һуғышмаһа, батшалыҡҡа ҡаршы сыҡмаған халыҡтар хәҙерге ваҡытта һаҡланып ҡалыр инеме икән? Минең тәрән инаныуым буйынса фәҡәт башҡорт ихтилалдары һөҙөмтәһендә Рәсәйҙә Ислам дине һаҡланып ҡалған. Сөнки XVII быуатҡа Волга буйындағы 400 мең мосолмандың яртыһы суҡындырыла. Башҡорттар 1917 йылға тиклем үҙҙәренең дә һәм башҡаларҙың да хоҡуҡтарын һаҡлап ҡала. Фәҡәт башҡорттарҙың батшалыҡҡа ҡаршы аяуһыҙ һуғышыуы арҡаһында Волга-Урал буйына крепостной право килеп етә алмай.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**әңгәмә ҡорҙо.**




Әйнаға килгәндә уны академияла ситтән тороп уҡығанда тап иттем. Таганрогтағы фатирыма отпускыға ҡайтҡанымда бер төркөм дуҫтарым менән тәбиғәткә ял итергә сыҡтыҡ. Шунда мольбертын бейек ергә урынлаштырып, ҡулына палитра тотоп һүрәт төшөргән йәш кенә ҡыҙҙы осраттым. Тәү ҡарашҡа ҡырағай кейектәй күренде: әйләнә -тирәһендәгеләргә иғтибар ҙа итмәй, янына уҡ килеп баҫҡан мине бар тип тә белмәй, онотолоп китеп эшләй. Ҡыҙға беренсе һирпелеүҙә үк йөнем тертләп китте: "Ул! Эҙләгәнемде-көткәнемде таптым!" Минән күпкә кесе икәнлеген белһәм дә Яна менән осрашыу эҙләй башланым. Ул каникулға дуҫ ҡыҙына ялға килгән икән, кеслөшеп, ныҡышып, тегеләрҙең фатирынан сыҡмайым. Төҫкә сибәр әхирәте минә, өлкән лейтенантҡа һылашырға әҙер, ә мин Янанан башҡаны күрмәйем, күрергә лә теләмәйем. Тураһын әйтергә кәрәк, Яна мине ир һәм хәрби кеше булараҡ ҡабул итһә лә, эске яҡынлыҡ йәһәтенән ихласлыҡ күрһәтмәне, күңелемдәген асып һалыуҙы ла һалҡын ҡабул итеп, күҙҙәремә тура ҡараны һәм: "Павел Сергеевич, һәйбәт, аҡыллы кеше икәнегеҙҙе лә беләм, әммә мин бит һеҙҙе яратмайым һәм ярата алмаясаҡмын да. Берүк дөрөҫ аңлағыҙ, рәнйемәгеҙ, уйымдағын әйттем",- тине. "Мөхәббәтем ҙур һәм ихлас, икебеҙгә лә етерлек, артып та ҡалыр әле", - тип яуап бирҙем. Шунан бергә йәшәй башланыҡ. Һуңғараҡ, бер-беребеҙгә күнегә төшкәс, ике яҡтан да дуҫ-иштәрҙе йыйып, ресторанда туй һымаҡ мәжлес тә үткәрҙек, ЗАГС-ҡа яҙылдыҡ. Һәйбәт ҡатын ул, егәрле, тоғро, тәрбиәле. Тик ғаилә ҡороу өсөн уныһы ғына етмәй икән дә баһа. Ул бер ваҡытта ла күҙҙәрен осҡонландырып, яратып миңә төбәлгәне булманы. Тик һуңғы осорҙа ҡарашында шул йылы сатҡыларҙың тоҡаныуын шәйләнем. Сәбәбен генә аңлай алмай инем. Хәйер, ул хәҙер мөһим дә түгел инде... Яналы Израилгә дауаланырға ебәрергә һөйләшеп, килешеп бөткәйнем. Күптәр хупламаны. Сит илгә саҡырыу - үҙенә күрә төшөмлө бизнес, ауырыуҙы һауыҡтырыу түгел, аҡтыҡ аҡсаһын һыҡып алыу сараһы икәнлекте аңлатылар. Миңә бер ни ҙә йәл түгел, тик унда барырға Яна үҙе ҡаршы, йонсотма, ыҙалтма, күңелем тартмай, ти. Бына шулай йәшәп ятабыҙ әлегә...

Бер килке һүҙһеҙ ҡалдыҡ, ары нимә хаҡында һөйләшәһең инде. Көтмәгәндә телефон шылтыраны.

- Тыңлайым, иптәш полковник?

- Эйе, хәҙер Иван Гаврилович... - Слуквин миңә һирпелде. - Жирнов саҡырта. Старшина, бөгөнгө һөйләшеүҙең ошонда ҡалыуына ышанам. Шәхси ҡайғым кемгә кәрәк? Әйткәндәй, кисә подъезда торғанда беҙгә инһәгеҙсе...

Тороп баҫтым:

- Уйламағанда шулай килеп сыҡты, иптәш подполковник! Бары Яна Григорьевнаның сәләмәтлеген генә белешкем килгәйне.

- Баш китерлек аҙым яһарға ынтылыу үҙе үк ҡыйыулыҡ. Ысынын әйткәндә, мин быны эшләй алмаҫ инем. Уставҡа түгел, яҙылмаған закондарға буйһоноп йәшәүселәр айырым ихтирамға лайыҡ.

Ишек төбөнә килдем:

- Сығырға рөхсәт итегеҙ, иптәш подполковник!

- Бар. Хуш. Тағы, политуҡыуға йөрө, киләһе аҙнала шәхси рәүештә тикшерәсәкмен. Һине бит бында ошо сәбәп менән саҡырттым.

- Төшөндөм, барырмын. Бөтәһен дә яҡшыға юрайыҡ, Павел Сергеевич.

- Ҡаянан осоп, әле ергә зыңҡығансы бәрелмәгән бисара имен ҡалырына өмөт итә аламы?..

Тағы ла ике ай самаһы ваҡыт үтте. Замполит менән булған һөйләшеүҙән аҙаҡ үҙемә урын таба алмай үрһәләнгәйнем, ваҡыт үтеү менән көйәләнеүем онотолмаһа ла, ҡайһылыр кимәлдә һүрелә, баҫыла төштө. Ысынлап та, әҙәм балаһы һәммәһенә күнә икән ул. Минең өсөн Яна кем ине һуң әле? Алыҫта, күренер-күренмәҫ янған, үрелеп тә буй етмәҫ йондоҙ. Унан ҡояшта булған наҙлы йылылыҡты, айҙа тулҡынған көмөш яҡтылыҡты ала алмайым, сағыуыраҡ яндырырға, йәниһә һүндерергә лә ҡулымдан килмәй. Бары күҙләп һоҡлана ғына алам. Ул ситтән ҡарап яратылыр өсөн яралған зат. Шунан да артығына өмөт итә алмайым. Барыбер тормошомдоң бер сите кителде, көнитмешем төҫһөҙләнде, йәшәүемдә йөрәкте елкендерер илаһи мөғжизә кәмене. Бәлки, Янаға ҡуйылған диагноз раҫланмай ул сәләмәтләнгәндер ҙә әле, кем белә. Табиптар ҙа хаталана ҡайһы саҡ, сирле файҙаһына хаталана. Шулай ғына була күрһен инде.

Слуквинды бер нисә тапҡыр часть территорияһында тап иттем. Ул мине күрмәгәндәй, шәйләмәгәндәй, честь биреүемә иғтибар ҙа итмәй, яуап та бирмәй, башын баҫып үтә лә китә. Туҡтар ҙа, йылмайып ебәреп, старшина Баймөхәмәтов, теге саҡта Янаға төптө хата диагноз ҡуйғандар, беҙҙең бөтә-һе лә һәйбәт, тип әйтер төҫлө. Юҡ, ауыҙына һыу уртлағандай өндәшмәй. Башкөллә эшкә сумдым. Былай еңелерәк, шөғөлөң менән булышып онотолаһың, ауыр уйҙар йәнде таламай. Анна Максимовна әсәйем һымаҡ инде, эш барышында йомош табып, эргәмдә урала, кәйефемде күтәрергә теләптер, берәй ҡыҙыҡ хәлде һөйләп алған була, яйы сыҡҡан һайын өй ризығы менән һыйлай. Ни генә тиһәң дә, изге күңелле кешенең янында йөрөп ятыуы күңелгә еңеллек бирә икән. Хәҙер ҡараңғы иртә төшә. Оҙая барған кистәрҙе китап уҡып үткәрәм, минең өсөн хәрби талаптар үтә лә шартлы инде ул, "подъем", "отбой", тип башты ҡатырыусы, һәр аҙымымды контроллаусе юҡ.

Һауа торошо әкренләп яйға һалынды, йонсоу осор үтте һымаҡ. Курсанттар ҙа килгән ыңғайы кисергән ауырлыҡтарҙы еңеп, һин дә мин хеҙмәт итә башланылар. Һәр хәлдә, тәүге осорҙағы һымаҡ эркелешеп, санчасть юлын тапамайҙар. Уларһыҙ эшем дә күпкә еңеләште.

Иртән тороуға ер өҫтөн, ҡыйыҡтарҙы, урамда ҡалған машиналарҙың башын мамыҡтай ҡар ҡаплағайны. Һауа бер аҙ асыла төшкән, күктә йөҙгән өҙөк-йыртыҡ болоттар араһынан унда-бында зәңгәр асыҡлыҡ күренгеләп ҡала. Ботаҡтарына һырыған еүеш ҡарҙан ағастар баштарын эйгән. Беҙҙең частән ситтә, тимер рәшәткәле кәртә, оло юл аша күренгән күп ҡатлы йорттан санаһын һөйрәп килеп сыҡҡан 7-8 йәштәр тирәһендәге малай күргәненән оло кинәнес кисереп, шарҡылдап көлөп, ҡул-аяҡтарын ян-яҡҡа ташлап, ҡарҙа аунарға тотондо. Бына кемгә рәхәт, бына кем хәсрәтһеҙ, бына кемдең бер ҡатлы керһеҙ күңеле көн матурлығына ҡыуана. Тротуарҙан йүгерә-атлай китеп барған йәш ҡатындың өҫтөндә йоҡа плащ, үҙе яланбаш, ғәҙәте буйынсалыр, ҡулсатыр тотоп алған. Ана ул плащының яғаһын торғоҙоп, буш ҡулы менән иҙеүен бөрҙө. Өшөйҙәр. Торлағынан сығыр алдынан тышҡа күҙ һалһа ни булған, тәбиғәткә ҡыш килгәнлеген күрер ине. Ҡарабаш турғайҙар тубы менән осоп, бер юғарыға сойорғоп, бер түбәнгә атлығып ҡуныр ер таба алмай ыҙалана. Бында ла ниһайәт миҙгелгә тап килгән көндәр килде, тик оҙаҡҡамы?..

- Ниндәй уйҙарға баттың, Азамат?

Күҙәтеүемдән арынып, артыма боролғайным, кабинетка өлкән лейтенант Лыков ингәнен күрҙем.

- Ысын ҡыш килде, иптәш өлкән лейтенант. Ҡарҙы әйтәм, оҙаҡ ятырмы икән?

- Күргәнебеҙгә аҙна самаһы ҡыуанһаҡ, шул еткән, артығына өмөт самалы. - Тәбәнәк буйлы Лыков кабинет буйлап йөрөп алды ла аҡ халат төймәләрен ысҡындырып ебәреп, иркенләп кушеткаға йәйелде.

- Бынан, өҫтәл артынан рәхим итегеҙ, Иван Иванович. - Тороп урынымды тәҡдим иттем.

- Шулай итмәй ҙә, юҡ инде, унда ултырһаң, эшләргә кәрәк. - Лыков, оторһоң мине, отмай ҙа, тигән һымаҡ, хәйләкәр күҙ ҡыҫты ла тирә-яғына ҡараш ташланы. - Ништәп бөгөн бер кем дә күренмәй? Юғиһә, теге саҡ коридорҙа баҫып торор урын булмай ине лә баһа.

- Урындағы һауа шарттарына өйрәнделәр, был яғына бирешмәҫтәр, моғайын.

- Айыу балаһын да бейергә өйрәтәләр. Әйткәндәй, кисәге обходтан һуң санчастә дауаланып сыҡҡан курсанттарҙың карталарын миңә индерерһең, эпикриз тултырырмын. Тағы, ҡала больницаһында киҫкен респиратор инфекция менән сирләүселәр һаны арткан, тип хәбәр иттеләр. Беҙгә лә бында санэпидемиологик сараларҙы көсәйтергә кәрәк.

- Аңлашылды.

- Мин дә бында килгәс хәрби хеҙмәт ҡамытын ятһырап йонсоном.

- Лыков башта өҙөлөп ҡалған хәбәрҙе яңыртты. - Ә хәҙер тамаҡ төбө менән күрһәтмәләр бирә, хатта екерә, бойора алам.

- Был һеҙҙең өсөн уныш, иптәш өлкән лейтенант, ә мин юлбаҫар Диденкоға баш була алмайым.

- Дә-ә-ә, Андрей менән уртаҡ тел табыуы еңелдән түгел инде ул. Татыулаштығыҙмы һуң?

- Ҡосаҡлашып, араға ел үткәрмәҫ хәлдә түгелбеҙ, шулай ҙа йәшәргә, эшләргә мөмкин. Ҡул бирешеп яраштыҡ. Унда ла ғәйеп бар, миндә лә.

- Теге саҡ нилектән сәкәләшеп киттегеҙ әле? Ништәптер, сәбәбен әйтеп еткермәнең. Юҡҡа ғына әҙәмдең муйынына йәбешмәйҙәр, бигерәк тә һинең ише тыныс холоҡлолар.

- Әллә күпме ваҡыт үтте бит инде, Иван Иванович, онотолдо.

- Шулай ҙа?

- Ул Яна Слуквинаны, бисә, тип атаны.

- Бына һиңә, әбекәйем, Юрьев көнө, Слуквина кем һуң ул саҡта?

- Барыбер ҡатын-ҡыҙҙы бисә тип атау уны түбәнһетеү, миңенсә. Бисә килешһеҙ итеп кейенеп йөрөй, көнбағыш сиртә, һағыҙ сәйнәй, ғәйбәт һөйләй, әрпеш... Ә Яна Слуквина...

- Күрәм, ҡатын-ҡыҙға ҡуйған талаптарың саманан ашҡан! Һинең һымаҡтар бына ошолай һайланып йөрөп, яңғыҙ ҡалалар, ғәҙәттә. "Ҡатын-ҡыҙҙар ҡайҙа ла бер - ҡалала ла, ауылда ла", тигән Салтыков-Щедрин. Етте, был темаға һөйләшеүҙе ошо ерҙә туҡтатайыҡ, йә минең муйынға килеп йәбешерһең. Әйткәндәй, өйҙән хат яҙаларлармы?

- Яҙалар.

- Һиңә хеҙмәт итергә күп ҡалманы. Бер ҡыйыҡ аҫтында өйрәнгәйнек бит инде, бер-беребеҙҙе ярты һүҙҙән аңлай инек. Әллә, тим, бында ҡалаһыңмы? Шунда уҡ прапощик званиеһын алырһың, шунан хәрби медицина академияһына йүнәлтмә бирербеҙ. Был минең генә тәҡдим түгел, часть командиры ошо хаҡта еткерергә ҡушты.

- Мотлаҡ ҡайтам, Иван Иванович, ауылда яңғыҙ әсәйем көтә. Өҫ йыл училищела уҡыным, хәҙер килеп йыл ярымдан ашыу Армияла. Уға ла көн итеүе еңел түгел.

- Ә һин уны бында күсереп ал!

- Ғүмер буйы йәшәгән еренән айырһам, ул һағыныуынан һарғайып үләсәк.

- Минең дә ошондайыраҡ проблема. Ҡарттарым Ырымбур өлкәһендә йәшәйҙәр, Мәскәүгә килергә ҡырҡа ҡаршылар. Ә беҙ, балалар, нисек кенә булһа ла атай-әсәй алдындағы изге бурысты үтәргә тейешбеҙ. Шуға күрә, үҙең ҡара, артабанғы яҙмышыңды үҙең хәл ит, тик бер генә кәңәш - ары ла медицина йүнәлешенән кит, һинән шәп терапевт йә хирург сығасаҡ. - Лыков халат төймәләрен яңынан ҡаптырҙы, башындағы ҡалпағын төҙәтеп кейҙе, тик урынынан ҡуҙғалырға ашыҡманы.

- Һеҙ миңә ниҙер әйтергә йыйынаһығыҙ шикелле, иптәш өлкән лейтенант, яныма хәл белергә генә инмәгәнһегеҙҙер бит?

- Ниңә, хәл белергә, беҙ бит коллегалар! - Көр тауышланып лауылдап ла тауышын баҫып өҫтәне. - Дөрөҫ һиҙемләнең, һөйләшеп алырға ине.

- Иғтибар менән тыңлайым.

- Тыңлайым, тиһең дә бит... Был һинең эш кабинетың, теләһә ниндәй мәлдә килеп инеп ҡамасаулауҙары бар. Миндә аулағыраҡ.

- Әйҙәгеҙ һуң. - Шундуҡ аяғөҫтә баҫтым.

- Етеҙ ҡуҙғалыуың оҡшай, Азамат. Ығыш түгелһең. - Һис ҡасан ҡабалана белмәгән Лыков рыя ҡыймылдап, артымдан эйәрҙе.

(Дауамы бар).

ЙӘШЛЕК ЙӘШНӘҮҘӘРЕ

# УҢЫШЛЫ КЕШЕ -

## мәғлүмәтле кеше инде ул



**Ауыл йәштәренең тормошон йәнләндереп ебәреү, уларҙың шәхесен үҫтереү, ял ваҡыттарын файҙалы итеү өсөн ойошторолған сараларға беҙҙең йәштәр көндән-көн ылыға бара. Был турала "Ростов - 2016" йәштәр мәғариф форумының "Йәш аграрийҙар" сменаһында ҡатнашып, еңеү яулап ҡайтыусы Баймаҡ егете Байрас АЗАМАТОВ һөйләй.**

**➔ Йәмәғәт эштәренә һәм мәғариф форумдарына нисек ылығып киттең?**

- Өфөгә М. Аҡмулла исемендәге БДПУ-ға уҡырға килгәс, Баймаҡ районы йәштәре берлеге эшендә ҡатнашып киттем һәм әлеге көндә ойошма етәксеһенең урынбаҫары булып торам. Былтыр Баймаҡ районында үткәрелгән "Урал мираҫы" беренсе башҡорт этно-форумында ҡатнаштым һәм шунан һуң йәштәр өсөн үткәрелгән башҡа төрлө мәғариф саралары менән дә ҡыҙыҡһына башланым. Иң тәүҙә "Территория смыслов на Клязьме" йәштәр мәғариф форумына барыу бәхете тейҙе. Был форум йәштәргә файҙалы танышлыҡтар булдырырға, бер-береһе менән аралашып, дуҫлашып китергә мөмкинлек бирҙе. Үҙем әле лә шунда танышҡан иптәштәрем менән тығыҙ бәйләнеш тотам, яңы фекерҙәр, идеялар, файҙалы материалдар, яңылыҡтар менән алышып торабыҙ. Бынан тыш, мәғариф форумдарына ябай ғына белгестәр түгел, ә донъя кимәлендәге билдәле шәхестәр килә. Мәҫәлән, "Территория смыслов"та беҙ РФ сит ил эштәре министры Сергей Лавров менән осраштыҡ, унан Башҡортостан тураһындағы фекерҙәрен һораныҡ. Бик рухланып ҡайттым да, ауыл йәштәре өсөн дә берәй мәғариф сараһы үткәреп ҡарарға кәрәк, тип хәл иттем. Сөнки ауыл йәштәрен һабантуйҙар ялҡытҡан, улар белемгә, яңылыҡҡа һыуһаған.

**➔ Ни өсөн һеҙ ойошторған сара "Ҡымыҙ-брейк" тип аталды?**

- "Кофе-брейк" тигән төшөнсә бар, унда төрлө чиновниктар, етди кешеләр бергә йыйылып, ҡәһүә эскән арала етди мәсьәләләрҙе хәл итә, борсоған һорауҙарына асыҡлыҡ индерә, кәңәшләшә. Беҙ үткәргән "Ҡымыҙ-брейк" ауыл йәштәре менән ауыл проблемалары буйынса эшлекле кәңәш ҡороуға арналды. Тәүге тапҡыр сараны Баймаҡ районы Беренсе Эткол ауылында уҙғарҙыҡ, беҙҙең эшкә ауыл биләмәһе башлығы һәм мәктәп етәкселеге лә ихлас ярҙам күрһәтте. Ауыл йәштәре йыйылып, ситтән килгән белгестәр менән осрашты, уҙҙәрен борсоған мәсьәләләрҙе күтәрҙе, кәңәшләште. Бер ауыл кимәлендә генә үткәрергә ниәтләнгән сараға Сибай, Баймаҡ ҡалаларынан, күрше ауылдарҙан йәштәр йыйылды.

**➔ Ауыл йәштәре ниндәй уй-фекерҙәр менән йәшәй, "Ҡымыҙ-брейк"та ниндәй фекерҙәр яңғыраны?**

- Ауылда йәшәгән йәштәрҙең уй-фекерҙәре, донъяға ҡараштары ла икенсе төрлө. Әммә улар ҙа билдәле эксперттар менән осрашырға, белем даирәһен киңәйтергә, шәхесен үҫтерергә бик теләй. Шуға, уларға тәү сиратта мөмкинлектәр тураһында һөйләнек, уҙаллы белем алыу, эшҡыуарлыҡ мәсьәләләрен дә күтәрҙек. Иң ҡыҙығы шунда: йәштәр үҙҙәре үк ауыл - перспективалар территорияһы, тигән фекер әйтте. Унда ысынлап та әле үҙләштерелмәгән төрлө тармаҡтар бик күп. Йәштәр юл инфраструктураһы, айыҡ тормош алып барыу, шәхси эшҡыуарлыҡҡа ҡағылған мәсьәләләрҙең хәл ителешен теләй. Әйткәндәй, "Ҡымыҙ-брейк"тан һуң Беренсе Эткол ауылы йәштәре дәртләнеп китте, йыйылып, экологик өмәләргә сыҡты, ялдарын файҙалы үткәреү ниәтендә "Башҡорт киноһы төнө" ойошторҙо. Башланғыс булғас, артабан эш үҙенән-үҙе яйға һалынып китте лә барҙы.

**➔ Ростовтағы Донда үткән "Ростов-2016" йәштәр мәғариф форумында "Ҡымыҙ-брейк" проекты өсөн сертификат яулағанһың икән, тәьҫораттар ниндәй?**

- Мин баш ҡалала үткән #Ufa-forum йәштәр мәғариф форумын ойоштороуҙа ҡатнашҡас, "Ростов - 2016" форумына бармаҫҡа тейеш инем. Әммә БР Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министрлығы башҡа кандидаттар таба алмау сәбәпле, "Ҡымыҙ-брейк" проекты менән шул сараға барырға тура килде. Проектымды еренә еткереп эшләп бөтһәм дә, был форумда уны тейешле баһалауҙарына шикләнә инем, сөнки 1000 ҡатнашыусы, йөҙләгән проект тәҡдим ителде. Шуға, еңеүсе 52 проект араһында тәүгеләрҙән булып минең исемде әйткәйнәләр, аптырап киттем. "Ҡымыҙ-брейк" проектын тормошҡа ашырыу өсөн 100 мең һумлыҡ сертификат бүләк иттеләр. Был беҙҙең өсөн бик ҙур ярҙам булды, шуға ла киләһе йылға пландар бик елле. Әйткәндәй, "Ростов - 2016" форумының мин ҡатнашҡан "Йәш аграрийҙар" сменаһында Бөтә Рәсәйҙән бизнес-идеялар, социаль проекттар, эшҡыуарлыҡ менән бәйле проекттар, ауыл хужалығы өлкәһендә яңы технологиялар уйлап тапҡан кешеләр килгәйне. Кемдәрҙер ипотерапия - ат ярҙамында дауаланыу, ауыл ерендә акциялар һәм квестар үткәреү тураһында һөйләне, берәү шәкәр сегәлдөрөн сәсеү буйынса агрегат уйлап тапҡан, күп проекттар селекция өлкәһе буйынса ине. Форум сиктәрендә төрлө ҡыҙыҡлы осрашыуҙар үтте. Бигерәк тә күркә үрсетеү буйынса Рәсәйҙә беренселекте алған "Евродон" предприятиеһы вәкилдәре менән әңгәмә бик ҡыҙыҡ булды, улар Башҡортостанда ла үҙ филиалдарын асырға теләүен белдерҙе. Әйтергә кәрәк, был ҙур предприятиеның етәкселәре башта кооператив булып ойошоп ҡына эш башлаған, яйлап күтәрелгәндәр. Ғөмүмән, Ростов өлкәһендә бер нисә кеше берләшеп эшләүсе кооперативтар бик күп.

**➔ Йәштәр ауылда ҡалырға атлығып тормай бит әле...**

- Эйе, йыш ҡына йәштәр ауыл ерендә йәшәргә теләмәй, еңел эш эҙләй, ауыл хужалығы менән ҡыҙыҡһынмай, тип әйткәндәрен ишеткәнем бар. Бының менән һис тә килешә алмайым, йәштәр ауылға ҡайтырға ынтыла ул. Ләкин күбеһе ундағы мөмкинлектәрҙе дөрөҫ баһалап еткермәй. Ауылда йәшәп, нисек аҡса эшләргә, ҡайһы өлкәлә эш асырға, тәүге аҙымды нисек яһарға, башланғыс капиталың булмаһа, ниндәй саралар күрергә - быны ошо һорауҙарға яуап табырға ярҙам итергә кәрәк беҙгә. "Ҡымыҙ-брейк" сараһының киләсәктә төп бурысы шул буласаҡ. Тырыш һәм маҡсатлы кеше ауыл өйөндә лә ҡала фатирындағы кеүек бөтә уңайлыҡтар тыуҙыра ала. Мәҫәлән, Беренсе Эткол йәр өйгә газ үткән, ут бар, мунсаһы кәртәһендә, ҡайһы берәүҙәр һыуыҡ һәм эҫе һыуҙы өйөнә үткәргән, туалетыңды ла йылытырға була. Өлгө алырлыҡ кешеләр бар, һәр кемебеҙгә тырышлыҡ һәм беҙҙең ергә ситтән берәү килеп эшләгәнсе, үҙебеҙ ошо мөмкинлектәрҙе файҙаланып ҡалырға кәрәк, тигән ҡараш етмәй. Умартасылыҡ, йылҡысылыҡ, туризм, этник комплекс, этник фестиваль, экстремаль туризм, ҡара һағыҙ етештереү, урман эше, иген культуралары үҫтереү, мал үрсетеү, балыҡ үрсетеп туристарҙы йәлеп итеү һәм башҡа тармаҡтар буйынса креатив проекттар эшләргә, форумдарҙа яҡларға һәм ярҙам, фекерҙәштәр табырға була.

**➔ Башҡорттарҙың эшҡыуарлыҡҡа барымы юҡ, тиҙәр бит...**

- Был беҙ үҙебеҙ тыуҙырған стереотип. Һеҙ башҡорт кешеһе һатыулашҡанын күргәнегеҙ бармы? Ул йәһүдтән дә, татарҙан да, ғүмер буйы һатыулашып өйрәнгән әрмәндән дә уҙҙырып ебәрә. Һәр кешенең үҙенән тора, берәүҙең был эшкә барымы була, икенсеһе башҡа өлкәне яҡшыраҡ белә. Теләһәк, беҙ ҙә һәр өлкәлә уңышҡа өлгәшә алабыҙ. Быны һуңғы арала башҡорт йәштәренең үҙәмлеген күреп әйтәм. Ауыл йәштәренә бигерәк тә шундай стереотиптарҙан арынырға кәрәк, мөмкинлектәр барыһына ла бер кимәлдә бирелгән һәм барыһы ла үҙеңдән тора. Республика властары менән килешеп эшләргә, уртаҡ маҡсаттарҙы тормошҡа ашырырға өйрәнеп китеүебеҙ шуға асыҡ миҫал.

**➔ Тағы ла ниндәй йәштәр мәғариф форумдарында ҡатнаштың һәм ниндәй проекттарҙы тормошҡа ашырыу өҫтөндә эшләйһең?**

- Быйыл шулай уҡ Ырымбурҙа үткән "Евразия" халыҡ-ара йәштәр мәғариф форумына барып ҡайттым. Унда бөтәһе 69 илдән мең ҡатнашыусы килгәйне, минең командала Һиндостан, Испания, Карелия, Сербия, Лаос, Сирия илдәренең йәштәре эшләне. Ҡыҙыҡлы осрашыуҙар, фәһемле оҫталыҡ дәрестәре, файҙалы танышлыҡтар, яңы дуҫтар һәм фекерҙәштәр генә түгел, донъяға икенсе төрлө ҡараш ташларға форсат бирҙе был форум.

Әле М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының Башҡорт филологияһы факультеты уҡытыусылары һәм студенттары әҙерләгән "Ҡумта" проекты эшендә лә актив ҡатнашам. Был йыл дауамында эшләйәсәк проект, ғариза биргән студенттар үҙҙәре теләгән шәхестәр менән осраша, ҡыҙыҡлы тойолған темаларға сығыштар тыңлай, үҙ проекттарын тейешле кимәлгә еткереп, артабан Рәсәй кимәлендәге һәм халыҡ-ара форумдарға әҙерләнә ала. Бөгөнгө көндә уңышлы кешегә төп талап - ул мәғлүмәтле булыу. "Ҡумта"ла ҡатнашҡан йәштәргә тап шул мәғлүмәт туплау, төрлө өлкәлә белемен камиллаштырыу мөмкинлеге бирәбеҙ.

Әйткәндәй, Башҡортостандың дәүләт суверенитетына арнап, "Белемле башҡорт" тигән проектыбыҙға йомғаҡ яһаныҡ. Башҡортса яҙылған алтаҡталарҙағы хаталарҙы табып, фотоға төшөрөп, беҙҙең төркөмгә ебәреү талап ителгәйне. Хаталы яҙыуҙар төрлө тарафтарҙан йыйылып килде, хатта Ырымбур һәм Силәбе өлкәләренән дә ҡатнашыусыларыбыҙ бар. Улар төрлө номинациялар буйынса билдәләнде. Әле беҙ артабан эште дауам итеп, ошо алтаҡталағы хаталарҙы төҙәтеү йәһәтенән төрлө инстанциялар менән бәйләнешкә сығасаҡбыҙ.

**➔ Йәштәштәреңә әйтер һүҙең?**

- Рәсәйҙә бөтә халыҡтарға ла үҫешер өсөн бер иш мөмкинлектәр тыуҙырылған. Ата-бабаларыбыҙҙың: "Йәш саҡта тырыш булһаң, ҡарт саҡта тыныс булырһың", - тигән һүҙҙәренә ҡолаҡ һалайыҡ. Бөгөн ҡулдан килгәнсә барыһын да эшләһәк, рухлы балалар үҫтерһәк, йәшәйешебеҙҙе яҡшыртһаҡ, киләсәктә бер нәмә өсөн дә борсолорға тура килмәҫ. Әгәр ҙә берәү һинә белем алырға, яңы проектта ҡатнашырға, берәй эш эшләп ҡарарға тәҡдим итә икән, ул һине күп осраҡта ике-өс тапҡыр килеп борсор. Башҡаса һинә эш ҡушып, ҡолағыңдан тартып йөрөтөп тормаҫ. Һинә өмөт бағлап торған кешеләр барҙа, төрлө сәбәптәргә һылтанмай, эшләп һәм йәшәп ҡалырға тырышһын бөтәһе лә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Мөмкинлектәрҙе шәхси мәнфәғәтеңдә, байып китеү, юғары вазифаларға ирешеү өсөн генә түгел, ә тап бына ошо йәштәр кеүек, халҡыңа, тыуған республиканға ниндәйҙер файҙа килтереү өсөн ҡулланыуың һинең милли уҙаның тураһында һөйләй. Башҡорт йәштәренең үҙенең кемлеген, был донъяға нимә өсөн килеүен, ниндәй эштәр атҡарырға тейеш булыуын яйлап төшөнә барыуын күрәбеҙ һәм тәү сиратта улар йәмғиәткә файҙалы эштәр атҡара икәнен тойомлайбыҙ. Тимәк, күптән көткән рухи күтәрелеш, милли уҙаның үҫеше әле әүҙем эшләп йөрөгән йәштәр менән бергә килә.**

**Сәриә ҒАРИПОВА**
**әңгәмәләште.**

***✓ Тәүлегенә 4-7 сәғәт ултырған кешеләрҙең сәләмәтлеге бигерәк тә насар була. Компьютер менән эшләүселәргә лә ваҡыты-ваҡыты менән ултырғыстан тороп, күнегеүҙәр яһап алыу кәрәк.***



ИНТЕРНЕТТАН



# "МОДАЛЫ" СИР...

## депрессия

■ Гарвард университетының бер төркөм ғалимдары кешенең туҡланыуы унын сәләмәтлегенә, шул иҫәптән йөрәк-ҡан тамырҙары системаһына йоғонто яһауын дәлилләгән тикшенереүҙәр үткәрҙе. Дөрөҫ туҡланһаң, ҡандағы насар холестеринды кәметеүсе дарыуҙар ҡабул итеү ҙә кәрәкмәй икән. Оҙағыраҡ йәш ҡалырға һәм үҙен яҡшы тойорға теләүселәргә белгестәр май, шул иҫәптән үҫемлек майы һәм шәкәр аҙ күләмдә булған ризыҡтар һайларға кәңәш итә. Ҡанда насар холестерин күбәйгәндә атеросклероз үҫешә, ул инфаркт йәки инсульт, шулай уҡ йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы сирҙәренә килтерә.

■ Бөйөк Британия ғалимдары билдәләүенсә, телевизорҙы күп ҡарау баланың күреү һәләте торошона ғына түгел, шулай уҡ ижади һәләттәре үҫешенә лә кире йоғонто яһай. Һынауҙа күп бала ҡатнаша, уларға телевизорҙы көнөнә 15 минут ҡарарға рөхсәт ителә. Бынан алда һәм телевизор ҡарағандан һуң баланың сәләмәтлеген һәм аҡыл әүҙемлеген ныҡлап тикшергәндәр. Телевизор алдынан торғас та баланың ижади һәләттәре, хис-тойғолары шул тиклем "баҫылған" була. Күпмелер ваҡыттан һуң бала үҙенең тәбиғи асылына ҡайта, тик шулай ҙа был телевизорҙың насар тәьҫире тураһында онотторға хоҡуҡ бирмәй.

■ Бразилия ғалимдары ултырып эшләүҙең кеше сәләмәтлегенә йоғонтоһон тикшергән. Бөтөн донъяла үлем осраҡтарының 4 проценты ошо төркөмгә ҡараған кешеләргә тура килә. Шул уҡ ваҡытта, планетала йәшәүселәрҙең яҡынса 60 проценты көнөнә өсәр сәғәт ултырып эшләргә мәжбүр. Тәүлегенә 4-7 сәғәт ултырған кешеләрҙең сәләмәтлеге бигерәк тә насар була. Шуға ла уларға әүҙемлекте арттырырға тәҡдим итә белгестәр. Компьютер менән эшләүселәргә лә ваҡыты-ваҡыты менән ултырғыстан тороп, күнегеүҙәр яһап алыу кәрәк. Аҡыл эшен физик эш менән сиратлау ҙа мөһим.

■ Депрессия тигән "модалы" термин йышыраҡ ҡатын-ҡыҙҙарға ҡуйыла икән. Бигерәк тә эшләп йөрөүсе гүзәл заттар был сиргә юлыға. Дания менән Америка ғалимдары берләшеп, бер нисә йылға һуҙылған тикшеренеүҙәр үткәрә. Улар бер нисә эре компания хеҙмәткәрҙәренең сәләмәтлеген һәм фирмаларҙа яйға һалынған эш процесын күҙәтә. Ни тиклем күберәк эшләргә тура килә, гүзәл зат шул тиклем арый, имеш. Эштән һуң ҡалып эшләргә тура килеү психик сәләмәтлеккә зыян итә, гел көсөргәнештә йөрөү йөрәк сирҙәренә лә килтерә.

■ Ҡытайҙа һөттөң антиканцероген сифаттарын асыҡлаған тикшеренеү үткәрелгән. Илань университеты белгестәре һөт аҡһымында булған ферменттарҙы тикшереп, бер пептид ферменттың ашҡаҙан яман шеше күҙәнәктәре үҫеше хәүефен булдырмауын асыҡлаған. Ферменттың эффекты уның концентрацияһына, яман шеш күҙәнәктәренә тәьҫиренең күләменә һәм оҙайлығына бәйле. Тикшеренеүҙең авторы Вэй Чжен Чен әйтеүенсә, был асыш ашҡаҙан яман шешенә ҡаршы препараттар уйлап табыуға булышлыҡ итәсәк. Элегерәк оло кешеләр өсөн һөт зарарлы тигән ҡараш йәшәй ине, әммә белгестәр белдереүенсә, һөттө самаһын белеп ҡулланыу организмды онкологик сирҙәрҙән һаҡлай.

ЭЙ, БАЛА САҠ!

**Беҙгә, алты балаға, иҫ киткес һәйбәт атай-әсәйҙән тыуып, уларҙың йылы ҡараштарын тойоп, ҡанат аҫтында ғына үҫеү бәхете тейҙе. Үҙемде белә-белгәндән атайым - Рәсүл Кәримов колхозда яуаплы вазифалар биләне: бригадир ҙа, ферма мөдире лә булды, күп йылдар мәктәптә эшләне. Эшләне лә, эшләтә лә белде ул.**



# ҺӘЙБӘТ АТАЙ-ӘСӘЙҘЕҢ...

## йылы ҡосағында үҫтек

Өйҙә һәр кемебеҙҙең тәғәйен бурысы була торғайны. Эште ҡушыу ғына түгел, өйрәтеү ҙә, эшләтә белеү ҙә, һәр башҡарылған эшкә йомғаҡ яһау ҙа күҙ уңында тотолдо. Бишенсе синыфта уҡығанда ҡул салғыһы менән бесән сабырға өйрәнгәнем хәтеремдә. Элек бесәнлек ере өсөн талаш булды. Салғыға салғы килгән, тигән хәбәрҙәр ҙә ишетелә ине. Хатта бесән сабырға рөхсәт тә, әллә ни эшләп, кис етһә, сәғәт 9-10 тирәһендә бирелде. Атайым, төнгө сәғәт 11 булһынмы, 12 тулып килһенме, мине эйәртә лә, ат егеп, тауға саба. Һуңынан: "Атай, ни эшләп, бесән сабырға көн бирелһә, гел мине эйәртә торғайның, минән башҡа бит ике ағайым, апайым, һеңлем менән ҡустым да бар ине лә баһа?" - тигән һорау бирҙем. "Балам, һин эргәмдә булһаң, эшем ырай, ергә лә берәү ҙә беҙҙән алда барып төшмәй", - тип яуап биргән булды атайғынам. Шулайҙырмы, юҡтырмы, әммә: "Өйҙә атайым өсөн иң кәрәкле, иң файҙалы бала мин икән дә!" - тип ҡупырайған саҡтар хәтерҙә. Төн уртаһында, ергә билдә һалыу өсөн барған саҡтарҙа, атайым ситкәрәк китһә, ҡарурманда ҡурҡа ла торғайным. Киләсәктә ныҡлы характер туплауҙа, бәлки, ошо үҙе ярҙам иткәндер ҙә әле, тип уйлайым хәҙер.

Беҙ үҫкәндә радио, телевизор тигән нәмә бик үк булманы. Иртәнге сәғәт алтынан киске һигеҙгә тиклем эшләгән атайымдың беҙҙе, балаларын, эргәһенә йыйып, гәзит-журналдар буйынса әңгәмәләр үткәреүенә, шиғырҙар һөйләтеүенә, бик булмаһа, ҡабатлау таблицаһын ятлатыу өсөн ваҡыт бүлә алыуына аптырайым. Нисек арыманы икән дә, йоҡоһо нисек туйҙы икән? Беҙ бит үҙебеҙ балаларҙан тиҙерәк арыныу өсөн: "Ярай, ярай, балам, шулай инде. Ана, телевизорҙа һәйбәт тапшырыу бара", - тибеҙ. Шуға күрәлер ҙә, бәлки, күптәребеҙҙең балаһы бөтә нәмәгә битараф, үҙ-үҙен яратыусы урам балаһы булып үҫәлер. Көнө буйы телевизор ҡарап, компьютерҙа уйнап ултырған быуын вәкилдәрен дә беҙҙең заман кешеләре тыуҙырҙы түгелме? Бөгөн әхлаҡ ҡағиҙәләре юғалды, әҙәмдән әҙәп ҡасты, тибеҙ, ә тәрбиәнең тамыры күбеһенсә ғаиләгә барып тоташҡанын, нисектер, күрмәмешкә һалышабыҙ. Өлкән быуындың тәжрибәһенә ныҒыраҡ таянғанда, киләсәк тә яҡтыраҡ буласағына күп осраҡта күҙ йомоп ҡарайбыҙ.

"Алты балам - алтын ашығым", тип йәшәгән атай-әсәйемдең түҙемлегенә, сабырлығына, тәртиплегенә һоҡланмау мөмкин түгел. Ниндәй генә тәрбиәле күренһәк тә (һәр хәлдә, күршеләр шулай ти ине), атай-әсәй өйҙә юҡта йыш ҡына эш тә боҙа торғайныҡ. Атайым менән әсәйемдең ҡайтыуына ҡаҙ һуйып ҡуйған саҡтар ҙа, һуғыш уйыны уйнап, ағас башынан ботағы-ние менән ҡолап төшөп яра алыу, аяҡ-ҡулдарҙы ап-аҡ булып туңдырғансы тышта уйнауҙар ҙа, оҙағыраҡ уйнаһындар өсөн әсәйемдең бәләкәстәргә тип әҙерләп киткән бутҡаһы менән дуҫтарҙы һыйлап, икенселәрен ас ҡалдырған ваҡыттар ҙа, әсәй ултыртҡан көнбағышты "айыу-бүре" уйынын уйнау өсөн урам тултырып һибеп сыҡҡан, ҡыярҙарҙы граната итеп ташлап бөткән мәлдәр ҙә, йыйылышып, 10-12 йәшлек балаларҙың рөхсәтһеҙ-ниһеҙ күрше ауылдарға концерт ҡуйырға сығып киткән осраҡтары ла булды. Әлбиттә, беҙҙең был шуҡлыҡтар атай-әсәйҙең маңлайына һырҙар, сәстәренә ҡарҙар булып ятҡандыр.

Атайым эштән һуңлабыраҡ ҡайтһа (ул көндө әкиәт һөйләнелмәй), тәғәйен урында түгел, икенсе берәүҙең урынына ятып йоҡлағанға һалышабыҙ. Бер ниндәй һуҡраныуһыҙ: "Инәһе, урын һала һал, ҡыҙым ҡайһылай ҡаты йоҡлап киткән (күҙҙәрҙең леп-леп килгәнен, йәнәһе, күрмәй), үҙ урынына күсерәйек", - тигән булып, һәр ҡайһыбыҙҙы үҙ урынына һала. Шул хәл көн дә тиерлек ҡабатлана.

Бала саҡ хәтирәләренә бирелгәндә, минән өс йәш ярымға ғына өлкәнерәк апайымдың елкәһенә атланып, уныһының ҡырҡҡа бөкләнеп, ергә тиклем эйелеп, мине йөкмәп йөрөгәнен дә хәтерләйем. Атлай ала инем бит. Ни өсөн күтәртеп йөрөнөм икән дә, ни өсөн апайым мине ергә ултыртып ҡына китмәне икән? Әхирәттәре менән иркенләп уйнарға ла мөмкинлек бирмәй торғайныҡ. Арып, ялҡып киткән саҡтары күп булғандыр инде, ҡайһы ваҡыт ситкәрәк ҡасып китергә лә маташа ине. Ә беҙ, мин, үксәһенә баҫып килгән Радис ағайым, Фәнис һәм Фәрбизә иркәләрем, тотам ҡалмай, уның артынан эйәрәбеҙ. Йүгереп ҡасып китергә уйлаһа, барыр еренә үҙенән алдараҡ барып етеп, көтөп торабыҙ.

Атай-әсәй көнө буйы эштә, йорттағы бар эш апайым елкәһендә. Мөҙәрис ағайым да бар-барлығын, тик ул күрше ауылда уҡый, ял көндәре генә ҡайта. Элек хәҙерге шикелле кер йыуыу машинаһы юҡ ине. Бөтә нәмә ҡул көсө менән эшләнә. Ҡышҡы сатнама һыуыҡтарҙың береһендә тышта иҫ киткәнсе уйнап, бармаҡ остарын туңдырып өйгә килеп инеүемә апайым, өлкән кешеләргә оҡшатып, ҡаҙан аҫтына ут яғып, шунда һыу йылытып, кер йыуып маташа ине. Өйгә килеп инеүгә, йылығалыр инде, бармаҡ остары сәңкеп һыҙлай башланы. Иламһырап: "Апай, ҡулым өшөнө, йылыт әле", - тигән булдым. Ә ул, эштән ҡасып йөрөй был, тип, әллә юрамал, әллә аңғармай: "Ана, ҡаҙандағы һыуға тыҡ, бармағыңдың өшөгәне бөтөр", - тине. Мин уны-быны уйламай, тот та туңған бармаҡты ҡайнар һыуға тыҡ. Күҙҙән ут сәсрәне. Ҡысҡырып илап ебәрҙем. "Туңғансы йөрөмәҫкә кәрәк ине", тип торған апайым эргәмә йүгереп килеп етмәһенме. Бештеме лә бештеме, тип йыуатырға, әрнегән ҡулыма ҡаҙ майы һөртөргә тотондо. Был ваҡиға өсөн апайыма оҙаҡ ҡына үпкәләп йөрөгәнем хәтеремдә. Үҙенә етәһе һеңлеһе булғанға күрәлер инде, апайым мине йорт эштәренә шулай яйлап өйрәтә башланы.

Хәҙер инде күптән үҙем өләсәй булһам да, ошо мәлдәрҙе, ошо эскерһеҙ бала сағымды, бала саҡтың бәхетле кистәрен, аяҙ иртәләрен һаман да һағынам.

**Рузидә ҮТӘШЕВА,**
**Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы.**
**Сибай ҡалаһы.**

СӘЛӘМӘТЛЕК ӘЛИФБАҺЫ

# ЙӨРӘКТЕ ЛӘ...

## йәштән һаҡларға кәрәк

**Кешенең иң тиҙ бирешкән ағзаһы - ул йөрәк. Сөнки ул төшкө ашҡа ла туҡтамай, көнө-төнө эшләй. Тәүлегенә 100 мең самаһы тапҡыр тибә. Шуға ҡарамаҫтан, күпселек йөрәген һаҡлау тураһында уйлап та ҡарамай, һуңғы сиккәсә уны ҡыуалай бирә. Ошо хаҡта 5-се ҡала клиник дауаханаһының профилактика бүлеге мөдире Наталья БАРАЖНИКОВА менән әңгәмәләшәбеҙ.**



**➔ Бөгөн яман шештән ҡала йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәренән вафат булыусылар икенсе урында тора. Бының сәбәптәрен нимәлә күрәһегеҙ?**

- Ысынлап та, йөрәк һәм ҡан тамырҙары сирҙәре ысын мәғәнәһендә эпидемик характер алды. Дөйөм сирләләр һанының яртыһынан күберәге йөрәк-ҡан тамырҙары патологияһы менән яфаланыусылар өлөшөнә тура килә. Бигерәк тә гипертония, йөрәктең ревматизм менән зарарланыуы, йөрәктең ишемик ауырыуы кеүек сирҙәр киң таралған. Шуға күрә граждандар тулы медицина күҙәтеүе үтеү тураһында хәстәрлек күрергә тейеш. Һүҙ ҡайһы берәүҙәр файҙаһыҙ, тип һанаған диспансеризация тураһында бара. Бәғзеләр уны ваҡыт үткәреү, тип һанаһа, икенселәр поликлиникаларҙың медперсоналына, үткәрелде, тигән билдә алыу өсөн генә кәрәк, тип уйлай. Ғәмәлдә иһә, был тәү сиратта табиптарға, теге йәки был тайпылыш булғанда ваҡытлы һәм һөҙөмтәле дауалау үткәреү өсөн кәрәк. Үҙ сәләмәтлегебеҙҙең үҙ ҡулдарыбыҙҙа булыуы менән килешмәү мөмкин түгел һәм быны һәр кеше аңларға тейеш. Үҙ сәләмәтлегебеҙгә битараф булма-

***✓ Башта медитация өсөн иртән, иртәнге ашҡа тиклемге ваҡытты һайлағыҙ. Был һеҙгә Йәшәү Көсө менән бәйләнеш булдырырға һәм алдағы көнгә көйләнергә ярҙам итәсәк. Бер ни тиклем ваҡыттан һуң, кисен медитация үткәрә башлағыҙ.***



МӨҒЖИЗӘЛЕ ДОНЪЯ

# ХӨРӘФӘТИ ХИКӘЙӘЛӘР,

## йәки йәнәшәбеҙҙә кемдәр йәшәй?



### Пәрейҙәр күсеүе

Минең пәрейҙәр күсеүе тураһында ишеткәнем бар ине. Ышанмай инем, дөрөҫ икәнлеген үҙем ишетеп ышандым. Ул ваҡытта беҙҙә артель ине. Мәксүт менән Ҡотан араһында Үҙән тигән урында һалабаш һалып ятабыҙ. Йәй көнө, ҡыуыштa йоҡлап йөрөйбөҙ. Бер көн иртәнсәк, таң һыҙылып килгәндә, һыйырҙар, һарыҡтар баҡырыуы, ҡатын-ҡыҙҙарҙың мал ҡыуыу тауышы, балалар илаған, ҡысҡырышҡан тауыштар ишетелә башланы. Беҙ уянып, тыңлап ятабыҙ. Ни тип уйларға ла белмәйбеҙ. Был ваҡытта ауылда әле тормайҙар, мал ҡыумайҙар, уныһын яҡшы беләбеҙ. Ҡыуған хәлдә лә ара ныҡ алыҫ, ишетерлек түгел.

Теге тауыштар яҡынлаша башланы. Ағиҙел арьяғындағы уянан килеп төшөп, Иҙелде сыҡтылар һәм беҙҙең эргәнән генә ҡысҡырышып, һай-һайтлап, Агуй тигән уянан урманға инеп, тауыштары юғалды. Беҙ бисмилла әйтеп, белгәнсә доғаларыбыҙҙы уҡып тороп ҡалдыҡ. Былдай хәлдәрҙә сәләм биреп, юл биреп ҡалырға кәрәк, тип әйтә торғайны атайым. Улар мосолман пәрейҙәре, ихтирам итһәң, уларҙың кешегә зыяны юҡ, имеш.

### Йәнлек сүрәтендәге пәрей

Ағиҙел түбәнендә Һөйөш ауылы бар (хәҙер ул быуа төбөндә ҡалды). Элек ҙур ғына ауыл балаларын бер ир уҡытыусы уҡыта ине. Һуғыштан һуң була был хәл. Ҡыш көнө саңғы менән эттәрен эйәртеп, был уҡытыусы Ырғыҙлы ауылына килә һәм иртәгәһенә ҡайтырға сыға. Ҡоҡрауыҡ йылғаһы буйлап барғанда, алдына бер төлкө сығып ултыра. Мылтығын алып, тоҫҡап атып ебәрә. Төлкө ырғып китә, ләкин үлмәй, ситкәрәк шылып ултыра. Уҡытыусы ҡабат атмай, эргәһенән үтеп китә. Бер аҙ барғас, артына ҡараһа, теге төлкө артынан ҡалмай эйәреп килә. Төлкөгә боролоп, янынан тоҫҡап, эргәһендә тигәндәй ултырған төлкөгә тағы ата. Ләкин төлкөгә бер нәмә лә булмай. Хәҙер төлкө йәнә тегенең алдына сығып ултыра. Уҡытыусы шикләнә төшә: мылтығы һәйбәт, үҙе лә насар атҡан кеше түгел, етмәһә, төлкө лә яҡын, тереп атмалы - нинә һуң ул үлмәй? Мылтығын, яһауҙарын яйлап тикшерә, йәнә ата. Ләкин төлкө үлмәй. Шулай 5-6 тапҡыр ата. Төлкөгә бер нәмә лә булмай, ҡар өҫтөнә бер тамсы ҡаны ла төшмәй. Уҡытыусы бик ныҡ ҡурҡыуға төшә. Тағы эргәһенән үтеп китеп, юлын дауам итә, ә төлкө бының артынан ҡалмай килә. Ауылға килеп ингәндә генә оста ултырып ҡала. Уҡытыусы ҡайта ла тәгәрәй, сәсрәп ауырып китә. Килгән кешеләргә үҙе менән булған хәлде һөйләп бирә. Ауыл халҡы уны өшкөрөргә тип, мулла саҡыртырға уйлай. Уҡытыусы муллаға ышанмай, кире ҡаға. Ауырып, күп тә ятмай, үлеп ҡала. Был төлкө пәрей булған, тик йәнлек сүрәтенә кергән, тигән һығымтаға килә ауыл халҡы.

Уҡытыусы, әлхәм әйтеп, доға уҡыһа, төлкө уның юлынан китер ине, ә ул уҡый белмәгән, Хоҙайға ла ышанмаған. Былдай осраҡта, йәнлек мылтыҡтан атҡанға үлмәһә, уның пәрей булыу мөмкинлегенә ышанғас, көбәккә энә һалып атырға кәрәк, шул саҡта ғына ул үлә, тип һөйләйҙәр.

**Рауил АСИҒОЛОВ.**
**Бөрйән районы.**
**(Дауамы бар).**

---

ғанда ғына беҙ ныҡ олоғайғанда ла физик ныҡлыҡты, эшмәкәрлекте һаҡлай, сәләмәт һәм шат була алабыҙ.

**➔ Һуңғы йылдарҙа барлыҡ сирҙәрҙең йәшәреүе күҙәтелә. Йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәренең динамикаһы нindәй?**

- Был өлкәлә лә шундай уҡ күренеш, тиер инем. Бөгөнгө билдәһеҙлек һәм даими стрестар, ултырып эшләү, психоэмоциональ көсөргәнеш, иртәгәһе көнгә ышаныс булмаған заманда иң бирешеүсән звено булып баш мейеһе ҡан тамырҙары тора, улар йышыраҡ зыянлай. Һөҙөмтәлә мейелә ҡан әйләнеше боҙолоуы, миокард инфаркты күрһәткестәре үҫә. Әлеге ваҡытта миокард инфаркты киң таралһа ла, беренсе урында инсульт тора.

**➔ Йәмәғәт транспортында ла ҡайһы бер ваҡыт инсульттың беренсе билдәләре тураһында мәғлүмәт биреүсе плакаттар күрергә мөмкин. Шулай ҙа уны нисек билдәләргә мөмкин?**

- Ҡатын-ҡыҙҙарҙың һәм ир-аттың инсульты араһында айырма булһа ла, әгәр шик тыуһа, ябай ғына тест үткәрегеҙ. Ул бәләкәй генә өс этаптан тора: кешенең йылмайыуын һорағыҙ - инсульт булғанда йылмайыу ассиметрик килеп сыға. Ҡулын алға табан һуҙып торорға ҡушығыҙ - ҡайһы яҡта инсульт, шул ҡул һәләнеп төшәсәк. Ябай һөйләм әйттерегеҙ - әгәр һүҙҙе ауыр әйтә йәки уны аңлауы ҡыйын икән, был инде кешенең инсульт билдәләрен сағылдыра. Шулай уҡ телен күрһәтергә ҡушһағыҙ ҙа, теле ассиметрик буласаҡ йә һәләнеп торасаҡ.

**➔ Йөрәк сирҙәренә ишаралаған тағы нindәй билдәләр бар?**

- Әгәр һул ҡулығыҙ көсһөҙ йәки бер сәбәпһеҙ ауырта, күкрәк һөйәге ауырта һәм ауырлыҡ тойола, тын ҡыҫыла, тыныс ҡына ултырғанда йөрәк йыш йәки яй тибә икән - былар барыһы ла йөрәк һәм ҡан тамырҙары ауырыуына ишаралай һәм кисекмәҫтән кардиологҡа күренергә кәрәк. Ваҡытында мөрәжәғәт иткәндә, йөрәк ауырыуҙарын иҫкәртеп була.

**➔ Йөрәк ауырыуҙарын булдырмау өсөн нимә эшләргә кәрәк?**

- Бөгөнгө тиҙлек заманында йөрәктең сәләмәтлеген һәм йәшлеген һаҡлау бик мөһим, сөнки тап уның эшмәкәрлегенә төп ағзаларҙың һәм кеше организмы системаһының торошо бәйле. Уның эшмәкәрлегенә нәҫел дә, кешенең енесе һәм йәше лә йоғонто яһай - былар субъектив йәки идара итеп, үҙгәртеп, йоғонто яһап булмай торған факторҙар. Шуның өсөн көслө стрестарҙы урап үтергә, эмоциональ бәхәстәргә еңелерәк ҡарарға кәрәк. Йоҡо мотлаҡ һинеҙ сәғәтлек булырға тейеш.

Йөрәк физик көсөргәнештән яфалана, тигән ҡараш киң таралыуға ҡарамаҫтан, гиподинамия - йөрәк һәм ҡан тамырҙары ауырыуҙарына килтергән сәбәптәрҙең киң таралғаны. Йөрәктең күнекмәгән булыуы - ысынлап та ҙур бәлә. Икенсе яҡтан, замана кешеһенең нервылар көсөргәнеше лә артты. Ә тап нервылар системаһы йөрәк эшмәкәрлеген көйләй ҙа инде.

Йәш саҡта һаулыҡҡа, йөрәк эшмәкәрлеген нисек оҙаҡ йылдарға сәләмәт итеп һаҡлауға әллә ни иғтибар биреп бармайбыҙ. Ә бит был ауыр түгел, бары тик үҙ сәләмәтлегең тураһында хәстәрлек күрергә, дөрөҫ туҡланырға, физкультура һәм спорт менән шөғөлләнергә, организмды алкоголь һәм никотин менән ағыуламаҫҡа ғына кәрәк. Шул ваҡытта йөрәгегеҙ ҙә һеҙгә оҙаҡ йылдар хеҙмәт итер.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әңгәмәләште.**

---

УҢЫШ ҠАҘАН

# ҮҘ-ҮҘЕҢӘ ЫШАНЫУҘЫҢ ТӨП СЕРҘӘРЕ

### Медитацияның маҡсаты

Медитация Көс сығанағыбыҙ менән бәйләнешебеҙҙе тергеҙә. Ул аңды таҙарта, ижади идеяларға, интуицияға һәм илһамға асылырға ярҙам итә. Ҡайҙа хата яһағаныбыҙҙы аңлата һәм хаҡ юлға баҫтыра. Беҙ мөхит менән бер бөтөнгә әүерeләбеҙ, сөнки медитация барышында йыһандың Берҙәм Аңына ҡушылабыҙ. Ул беҙгә үҙ аңыбыҙҙа булып та, йоҡоға ҡарағанда ла тәрәнерәк тулы ял алыу аша асылыбыҙҙы асырға ярҙам итә. Был осорҙа стрестан, көсөргәнештән арынабыҙ һәм тынысланабыҙ. Шулай уҡ, спортсы тәнен сыныҡтырыу өсөн йүгергән кеүек, медитация процесында аңыбыҙҙы үҙ мөмкинлектәре сиктәрендә эшләүгә көйләйбеҙ һәм күнектерәбеҙ. Был медитацияның төп сәбәптәренең береһе - көндәлек тормошта беҙҙең һөҙөмтәлелекте арттырыу.

**Ҡасан медитацияла булырға?** Башта медитация өсөн иртән, иртәнге ашҡа тиклемге ваҡытты һайлағыҙ. Был һеҙгә Йәшәү Көсө менән бәйләнеш булдырырға һәм алдағы көнгә көйләнергә ярҙам итәсәк. Бер ни тиклем ваҡыттан һуң, кисен медитация үткәрә башлағыҙ. Быны йоҡларҙан дүрт сәғәт алда эшләргә кәрәк, шулай итеп көсөгөҙҙө тулыһынса тергеҙәсәкһегеҙ. Киске медитация көн дауамында йыйылған кире уйҙарҙан һәм тойғоларҙан арынырға ярҙам итә. Оптималь һөҙөмтәләргә өлгәшеү өсөн ошо йәки шундай уҡ режимды һаҡларға тейешһегеҙ. Көнөнә бер тапҡыр эшләгән медитацияның ике көнгә бер тапҡыр, әммә көн аралаш йәки өс көнгә бер эшләүгә ҡарағанда, файҙаһы күберәк. Эҙмә-эҙлеклелек - яҡшы һөҙөмтәләргә өлгәшеүҙең мөһим факторы. Кеше асылы буйынса нигеҙҙә бер ваҡытта ла медитациянан туктамай. Был - әҙләкһеҙ процесс. Медитация башлағандан һуң инде элекке була алмайһығыҙ. Иң мөһиме - ул тормошоғоҙҙоң ныҡлы һәм алмаштырғыһыҙ өлөшө булһын.

**Ҡайҙа медитация үтергә?** Күпселек осраҡта һеҙ быны өйҙә эшләйәсәкһегеҙ. Тимәк, тыныс һәм ут тоноҡ ҡына янған бүлмә кәрәк буласаҡ. Тауыш хәтерҙе бөтөрә һәм уйҙы туплап, Юғары Аң менән аралашырға ҡамасаулай. Һәр көн бер үк урында медитацияға инеү файҙалы. Бер ни тиклем ваҡыттан һуң унда көсөргәнештән арынырға ярҙам итеүсе ыңғай тирбәлеш булдыра аласаҡһығыҙ. Уны автоматик рәүештә тыныслыҡ һәм һиллек менән күҙаллай башлаясаҡһығыҙ. Нервылар системаһы иркен эшләй алһын өсөн арҡағыҙҙы тура тотоғоҙ. Был маҡсатта һөйәлгесе булған ултырғыс яҡшы. Унда тура, кәүҙә ауырлығын тәнегеҙгә тигеҙ таратып ултыра аласаҡһығыҙ. Иң уңайлы, тәнегеҙҙе тоймаған ултырғыс тапҡансы, бер нисә урындыҡҡа ултырып ҡарағыҙ. Ятмағыҙ. Ятҡан килеш медитацияны йоҡо менән бутаясаҡһығыҙ. Иртәме-һуңмы йоҡоға китеп, медитация биргән барлыҡ өҫтөнлөктәрҙе күрмәй ҡаласаҡһығыҙ. Тәүҙә иң мөһим фекерҙе аңларға кәрәк: уйҙарығыҙға ҡаршы килмәгеҙ. Күптәр: "Мин медитацияға инә алмайым, сөнки уйлауҙан туктай алмайым", - ти. Уларҙың проблемаһы - уйҙарына ҡаршы тороуҙа. Ни тиклем оҙағыраҡ ҡаршылашһағыҙ, улар һеҙгә шул тиклем әүҙемерәк ҡамасаулай башлаясаҡ. Ҡаршылашыуҙы туктатыу менән улар аңығыҙға инергә тырышыуҙан туктаясаҡ.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**



## 24 ОКТЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости.
12.15 "Практика". Сериал (12+).
13.20, 14.15, 15.15, 03.25 "Время покажет" (16+).
14.00 Новости.
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Паук". 1-я и 2-я серии. Детективный сериал (16+).
23.30 "Вечерний Ургант" (16+).
24.00 "Познер" (16+).
01.00 Ночные новости.
01.15, 03.05 "Агент национальной безопасности". Сериал (16+).
03.00 Новости.

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41, 09.15 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Вести".
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Сваты". Комедийный сериал (12+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". "Переходящее пиво". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.25 "Вести-Башкортостан".
17.45 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
18.50 "60 минут". Ток-шоу (12+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Московская борзая". 11-13 серии. Мелодраматический сериал (12+).
23.50 "Специальный корреспондент" (12+).
00.50 "Сваты". Сериал (12+).
02.55 "Гражданин начальник". Сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Робинзон Крузо". Сериал (16+).**
**11.00 Новости недели.**
**11.45 "Специальный репортаж".**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00, 01.30 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Автограф" (12+).**
**14.30, 18.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45, 19.00, 21.00 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Следопыт" (12+).**
**15.30 "Книга сказок".**
**15.45 "Байтус" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Перекличка" (6+).**
**16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**17.15 "Полезные новости" (12+).**
**17.45 "Красная кнопка" (16+).**
**19.15 "Бай" (12+).**
**19.45 "Сәнгелдәк".**
**20.00 "Телецентр".**
**20.45 "Малый бизнес" (12+).**
**22.00 "Спортбар" (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.) (12+).**
**23.15 "Африканец". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.) (12+).**
**02.30 Р.Байбулатов. "Прекрасная возлюбленная" (12+).**

## 25 ОКТЯБРЯ ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости.
12.15 "Практика". Сериал (12+).
13.20, 14.15, 15.15, 03.45 "Время покажет" (16+).
14.00 Новости.
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Паук". 3-я и 4-я серии (16+).
23.40 "Вечерний Ургант" (16+).
00.15 Ночные новости.
00.30 "Николай Бурляев. На качелях судьбы" (12+).
01.35, 03.05 "Агент национальной безопасности". Сериал (16+).
03.00 Новости.

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Сваты". Комедийный сериал (12+).
14.00 "Вести".
14.55 "Тайны следствия". "Последние часы". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.25 "Вести-Башкортостан".
17.45 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
18.50 "60 минут". Ток-шоу (12+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Московская борзая". 14-я и 15-я серии. Мелодраматический сериал (12+).
23.00 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
01.00 "Сваты". Комедийный сериал (16+).
03.05 "Гражданин начальник". Сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Робинзон Крузо". Сериал (16+).**
**11.00 "Мистический Башкортостан" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Малый бизнес" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Күнелем моңдары" (12+).**
**14.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45, 21.00 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Дорога к храму" (12+).**
**15.30 "Йырлы кәрәҙ".**
**15.45 "Бауырһаҡ".**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Семәр".**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.45 "Дознание" (16+).**
**18.15 "Полезные новости" (12+).**
**18.25 Хоккей. МХЛ. "Толпар" (Уфа) - "Сарматы" (Оренбург).**
**22.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Свидание вслепую". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.15 "Бәхетнамә" (6+).**
**02.15 Р.Хамид. "Под знаком Марса" (12+).**

## 26 ОКТЯБРЯ СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости.
12.15 "Практика". Сериал (12+).
13.20, 14.15, 15.15 "Время покажет" (16+).
14.00 Новости.
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00, 03.20 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Паук". 5-я и 6-я серии (16+).
23.40 "Вечерний Ургант" (16+).
00.15 Ночные новости.
00.30 "На ночь глядя" (16+).
01.25, 03.05 "Агент национальной безопасности". Сериал (16+).
03.00 Новости.
04.15 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41, 09.15 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Вести".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
11.55, 00.50 "Сваты". Комедийный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". "Сила звука". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.25 "Вести-Башкортостан".
17.45 "Прямой эфир" (16+).
18.50 "60 минут" (12+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Московская борзая". Мелодраматический сериал (12+).
23.50 "Команда" с Рамзаном Кадыровым" (12+).
03.00 "Гражданин начальник". Сериал (16+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Робинзон Крузо". Сериал (16+).**
**11.00, 15.00 "Наука 102" (6+).**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Тәмле" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45 "Интервью" (12+).**
**15.30 "Городок АЮЯ".**
**15.45 "Ал да гөл" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Физра" (6+).**
**17.15 "Полезные новости" (12+).**
**17.45 "Моя планета Башкортостан" (12+).**
**18.15 "Деловой Башкортостан" (12+).**
**18.45 Хоккей. КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Авангард" (Омск).**
**22.00 "Власть отвечает".**
**23.00 "Охота на зверя". Худ. фильм (18+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.15 "Бәхетнамә" (6+).**
**02.15 Т.Гарипова. "Песнь во сне" (12+).**

## 27 ОКТЯБРЯ ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости.
12.15 "Практика". Сериал (12+).
13.20, 14.15, 15.15, 03.40 "Время покажет" (16+).
14.00 Новости.
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Паук". 7-я и 8-я, заключительная, серии (16+).
23.40 "Вечерний Ургант" (16+).
00.15 Ночные новости.
00.30 "Будьте как дети". К юбилею Романа Виктюка.
01.35, 03.05 "Агент национальной безопасности". Сериал (16+).
03.00 Новости.
04.30 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Ток-шоу.
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Сваты". Комедийный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". "Маэстро". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.25 "Вести-Башкортостан".
17.45 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
18.50 "60 минут". Ток-шоу (12+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Московская борзая". 19-я и 20-я, заключительная, серии. Мелодраматический сериал (16+).
23.00 "Поединок". Программа Владимира Соловьева (12+).
01.00 "Сваты". Сериал (16+).
03.00 "Гражданин начальник". Криминальный сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Робинзон Крузо". Сериал (12+).**
**11.00 "Автограф" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Современник" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Бай" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45, 19.00, 21.00 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Малый бизнес" (12+).**
**15.15 "ДОСААФ: испытано на себе" (12+).**
**15.30 "Борсаҡ".**
**15.45 "Фанташ" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Йырлы кәрәҙ".**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.45 "Клио" (6+).**
**19.15 "Башкорттар" (6+).**
**19.45 "Сәнгелдәк".**
**20.00 "Телецентр".**
**20.45 "Полезные новости" (12+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "В компании мужчин". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.15 "Бәхетнамә".**
**02.15 Т.Миннуллин. "Вот так случилось" (12+).**

## 28 ОКТЯБРЯ ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости.
12.15 "Практика". Сериал (12+).
13.20, 14.15, 15.15, 04.45 "Время покажет" (16+).
14.00 Новости.
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Жди меня".
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым (16+).
19.50 "Поле чудес". Капитал-шоу.
21.00 "Время".
21.30 "Голос". Новый сезон". Музыкальный конкурс (12+).
23.30 "Вечерний Ургант" (16+).
00.15 "Роджер Уотерс: Стена" (16+).
02.50 "Скажи что-нибудь". Мелодрама (12+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Ток-шоу
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
11.55, 01.10 "Сваты". Сериал (12+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". "Треугольная история". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.25 "Вести-ПФО".
17.45 "Прямой эфир" (16+).
18.50, 03.15 "60 минут". Ток-шоу (12+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Юморина" (12+).
23.15 "Весомое чувство" Мелодрама (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 "Робинзон Крузо" (12+).**
**11.00 "Моя планета Башкортостан" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**12.00 "Здоровое решение" (6+).**
**12.30 "Учитель и его мечты" (12+).**
**13.00 "Күнелем моңдары" (12+).**
**14.00 "Хазина" (6+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45 "Вопрос+Ответ=Портрет" (6+).**
**15.30 "Сулпылар".**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Зеркальце".**
**16.45 "Загадки истории. Марко Поло". Док. фильм (12+).**
**17.15 "Полезные новости" (12+).**
**17.45 "Замандаш" (6+).**
**18.00 "Йома".**
**18.45 Хоккей. КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Металлург" (Новокузнецк).**
**22.00 "Наука 102" (6+).**
**23.00 "Башкорт йыры" (12+).**
**23.30 "Морской волк". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.30 А.Хусаинов. "Бәндәбикә менән Ерәнсә Сәсән" (12+).**

## 29 ОКТЯБРЯ СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.30, 06.10 "Наедине со всеми" (16+).
06.00 Новости.
06.30 "Самолеты". Худ. фильм.
08.00 "Играй, гармонь любимая!"
08.40 "Смешарики. Новые приключения".
09.00 "Умницы и умники" (12+).
09.45 "Слово пастыря".
10.00 Новости.
10.15 "Валентина Малявина. Роль без права переписки" (12+).
11.25 "Смак" (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Идеальный ремонт".
13.20 "На 10 лет моложе" (16+).
14.10 "Голос". Специальный выпуск (12+).
16.50 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым" (12+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 "Ледниковый период".
21.00 "Время".
21.20 "Сегодня вечером" (16+).
22.40 "МаксимМаксим" (16+).
23.50 "Подмосковные вечера" (16+).
00.45 "Три балбеса". Комедия (16+).
02.30 "Крутая компания". Худ. фильм (12+).
04.35 "Мужское/Женское".
05.30 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

04.50 "Птица счастья". Худ. фильм (12+).
06.45 "Диалоги о животных".
07.40 "Вести-Башкортостан".
08.00 "Говорит и показывает Уфа" (12+).
09.15 "Сто к одному". Телеигра.
10.05 "Семейный альбом. Марк Захаров" (12+).
11.00 "Вести".
11.20 "Вести-Башкортостан".
11.30 "Евгений Петросян. Большой бенефис! "50 лет на эстраде" (16+).
14.00 "Вести".
14.20 "Вести-Башкортостан".
14.30 "Фродя". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
18.00 "Субботний вечер".
20.00 "Вести в субботу".
21.00 "Наваждение". 4 серии. Детективный сериал (12+).
01.25 "Ночная фиалка". Мелодрама (12+).
03.20 "Марш Турецкого-3". Сериал (12+).

### БСТ

**07.00, 12.30, 18.30 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Как приручить медведя".**
**09.30 "Здоровое решение" (12+).**
**10.00 Дневник фестиваля "Факел" (6+).**
**10.30 "Большой чемодан" (6+).**
**11.15 "Клио" (6+).**
**12.00 "Мистический Башкортостан" (12+).**
**13.00 "Бай бакса" (12+).**
**13.30 "Үткән гүмер" (12+).**
**14.00 "Дарю песню".**
**16.00 "Байык-2016" (12+).**
**17.00 "Факел" (12+).**
**19.00 "Бала-сага" (6+).**
**19.45 "Сәнгелдәк" (0+).**
**20.00 "Колесо времени" (6+).**
**21.00 "Полезные новости" (12+).**
**21.15 "Быстрее! Выше Сильнее!" (6+).**
**21.30 Новости.**
**22.00 "Следопыт" (12+).**
**22.30, 02.00 Новости недели (на башк. яз.).**
**23.00 "Башкорт йыры-2016" (12+)**
**23.45 "Киберспорт" (16+).**
**01.45 "Следующий уровень" (12+).**
**02.30 Т.Давлетбердина. "Моя семья" (12+).**

## 30 ОКТЯБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости.
06.10 "Одиночное плавание". Худ. фильм.
08.10 "Смешарики. ПИН-код".
08.20 "Часовой" (12+).
08.55 "Здоровье" (16+).
10.00 Новости.
10.15 "Непутевые заметки".
10.35 "Пока все дома".
11.25 "Фазенда".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Открытие Китая".
12.45 "Теория заговора" (16+).
13.40 "Эээх, Разгуляй". Концерт.
16.10 "Белые росы". Комедия (12+).
17.50 "Точь-в-точь". Новый сезон (16+).
21.00 "Воскресное "Время".
22.30 "Что? Где? Когда?"
23.50 "Исход: Цари и боги". Драма (16+).
02.35 "Филомена". Драма (16+).
04.25 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.10 "Мачеха". Худ. фильм.
07.00 "Мульт утро. "Маша и Медведь".
07.30, 03.35 "Сам себе режиссер".
08.20, 04.25 "Смехопанорама" Евгения Петросяна.
08.50 "Утренняя почта".
09.30 "Сто к одному". Телеигра.
10.20 "Вести-Башкортостан. События недели".
11.00 "Вести".
11.20 "Смеяться разрешается".
14.00 "Вести".
14.20 "Мирт обыкновенный". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
18.00 "Удивительные люди".
20.00 "Вести недели".
22.00 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
00.30 "Я твердо все решил. Евгений Примаков". Док. фильм (12+).
01.30 "Без следа". Детективный сериал (12+).

### БСТ

**07.00 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Лев Макс".**
**08.30 "Йома" (0+).**
**09.00 "Бай бакса" (12+).**
**09.30 "Мечты" (6+).**
**10.00 "Физра" (6+).**
**10.15 "Перекличка" (6+).**
**10.30 "Гора новостей" (6+).**
**10.45 "Ал да гөл" (6+).**
**11.00 "Сулпылар" (0+).**
**11.30 "Байтус" (6+).**
**11.45 "Алтын тирмә" (0+).**
**12.30 Новости недели (на башк. яз.) (12+).**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Башкорттар" (6+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**15.00 "Автограф" (12+).**
**15.30 "Весело живем" (12+).**
**15.45 "Дорога к храму".**
**16.15 Хоккей. КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Сибирь" (Новосибирск).**
**19.00 "Историческая среда" (12+).**
**19.30 "Бизнес-обзор" (12+).**
**20.00 "Байык-2016" (12+).**
**21.00 "Дознание" (16+).**
**21.30 Новости недели.**
**22.15 "Специальный репортаж" (12+).**
**22.30 "Красная кнопка" (16+).**
**23.15 "Вечер.com" (12+).**
**24.00 "Свидание с джазом" (12+).**
**01.00 "Золотой теленок". Худ. фильм (12+).**
**02.45 А.Островский. "Наливные яблоки" (12+).**

✔ "Урал" халыҡ сәнғәте галереяһының "Урал батыр" эпосы персонаждарының кейеҙ костюмдары коллекцияһы дефилеһы буласаҡ. Программала сәсәнлек сәнғәте, өҙләү буйынса оҫталыҡ дәрестәре ойошторола.



СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

# СӘСӘНДӘР ӨФӨГӘ ЙЫЙЫЛА

**23-24 октябрҙә Өфө ҡалаһында Бөтөн Рәсәй сәсәндәр фестивале үтә. Уны БР Мәҙәниәт министрлығы һәм Рәсәй Федерацияһының ЮНЕСКО эштәре буйынса комиссияһы ярҙамында Республика халыҡ ижады үҙәге, Башҡортостан Республикаһы Сәсәндәр үҙәге үткәрә. Сара республика Башлығы Грантына ойошторола.**

Проект халыҡ ижадын популярлаштырыу, Рәсәйҙәге һәм сит ил сәсәндәре менән ижади бәйләнештәр булдырыу, Башҡортостан, Рәсәй, сит ил халыҡтарының мәҙәниәте, йолалары менән таныштырыуға йүнәлтелгән. Асыҡ конкурсҡа Башҡортостан, Алтай, Дағстан, Ҡазағстан, Ҡалмыҡстан, Карелия, Ҡырғыҙстан, Тыва, Саха (Якутия), Хакасия сәсәндәре ҡатнаша. Конкурс З. Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт институтының Шаляпин залында башлана.

Фестиваль сиктәрендә сәсәндәр бәйгеһе, "Урал батыр сағыҙыуы буйынса" темаһына түңәрәк өҫтәл, "Башҡорт халыҡ эпостары" темаһына һүрәттәр күргәҙмәһе, "Урал" халыҡ сәнғәте галереяһының "Урал батыр" эпосы персонаждарының кейеҙ костюмдары коллекцияһы дефилеһы буласаҡ. Программала сәсәнлек сәнғәте, өҙләү буйынса оҫталыҡ дәрестәре, журналистар өсөн теле-радио брифингтар ойошторола. "Асыҡ тирмә"лә Уралды өйрәнеүсе ғалимдар һәм фольклористар ҡатнашлығында әйтеш әйтеү буйынса майҙансыҡ ҡоролаҫаҡ.

Ойоштороу комитетының адресы: БР, Өфө ҡалаһы, З. Биишева урамы, 17/2, Республика халыҡ ижады үҙәге. Тел./факс: 8 (347) 289-62-00, e-mail: gukrcnt@mail.ru. Республика халыҡ ижады үҙәге эргәһендәге Сәсәндәр үҙәге - тел./факс: 8 (347) 289-65-50, e-mail: gukrcnt@mail.ru

# "АҠБУҘАТ" БАЙРАМ КИЛТЕРӘ

**26-28 октябрҙә Өфөлә III халыҡ-ара "Көмөш Аҡбуҙат" милли һәм этник кинофестивале уҙғарыла.**



Конкурс программаһына 24 фильм һайлап алынған, шуларҙың туғыҙы - документаль, һигеҙе - тулы метражлы һәм етеүһе ҡыҫҡа метражлы нәфис фильм. Тәҡдим ителгән эштәрҙең географияһы киң: Монголия, Иран, Ҡазағстан, Афғанстан, Бангладеш, Ҡырғыҙстан, Мысыр һәм Сирия, Украина һәм Әрмәнстан, шулай уҡ Башҡортостан, Татарстан, Ҡабарҙа-Балҡар һәм илдең башҡа төбәктәре.

Программаға Башҡортостан режиссерҙарының өс эше индерелгән. Ҡыҫҡа метражлы уйын фильмдары араһында Татьяна Перцеваның "Бубен Верхнего мира" һәм Айнур Асҡаровтың "Пилорама" фильмдары бар. "Документаль фильм" номинацияһында Радик Килмәмәтовтың "Күңел йыры" фильмы тәҡдим ителгән.

Конкурстан тыш программа сиктәрендә Башҡорт киноһы көнө үтә. Был көндә Башҡортостанда төшөрөлгән иң яҡшы анимация, документаль һәм уйын фильмдары күрһәтелә. Икенсе конкурстан тыш программала - "Рәсәй төбәктәре фильмдары", унда милли һәм этник йүнәлештәге фильмдар күрһәтеү ҡаралған.

Фестивалдә "Икенсе башҡорт дебютанттар питчингы" үткәрелә. Уны Рәсәй Кинематографистар союзының Йәштәр үҙәге ойоштора.

Халыҡ-ара фестивалдең баһалама комиссияһын етәкләү өсөн Венгриянан кино белгесе Иван Форгач саҡырылған. Комиссия составына шулай уҡ Юсуп Разыков (Үзбәкстан), кино белгесе Сергей Анашкин (Рәсәй), шағир, йәмәғәт эшмәкәре Раuил Бикбаев (Рәсәй, Башҡортостан) индерелгән.

# ЙӘШТӘР КҮҢЕЛЕН КҮРЕП...

**БР Театр эшмәкәрҙәре союзының Йәштәр советы тәүге тапҡыр Йәштәр театраль премияһы лауреаттарын билдәләне. Сара барышында Башҡортостан театрҙарында быйыл хеҙмәт юлын башлап ҡына торған 23 йәш кеше тантаналы рәүештә актерҙар сафына алынды.**



БР Театр эшмәкәрҙәре союзының Йәштәр советы быйыл ғына ойошторолдо һәм әүҙем эш башлап ебәрҙе. Ойошма рәйесе Хөрмәтулла Үтәшев әйтеүенсә, Йәштәр театраль премияһы республика театрҙарында ижад иткән йәштәрҙе туплау, яңы үрҙәр яуларға дәртләндереү ниәтендә булдырылған. Был премияға дәғүә итеүсе кандидаттарҙы Йәштәр советы ағзалары театр миҙгеле дауамында сәхнәләштерелгән яңы спектаклдәрҙе күҙәтеп барғандан һуң билдәләгән.

Быйыл Йәштәр театраль премияһы төп биш номинация буйынса тапшырылды. "Иң яҡшы ир-егет роле" һәм "Иң яҡшы ҡатын-ҡыҙ роле" номинациялары буйынса премияны М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрының "Джут" спектаклендә Әхмәт менән Сауле ролдәрен башҡарыусы актерҙар Фәнис Рәхмәтов һәм Рима Ҡаһарманова алды. "Иң яҡшы икенсе пландағы ир-егет роле" номинацияһы ошо уҡ театр актеры Урал Әминевҡа "Хыялға ҡаршы" спектаклендәге Фәрит ролен башҡарғаны өсөн бирелде. "Иң яҡшы икенсе пландағы ҡатын-ҡыҙ роле" номинацияһы М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры артисы Ләйсән Лоҡмановаға, "Дебют" номинацияһы Рус дәүләт академия драма театрынан Ольга Лукьяноваға тапшырылды.

Шулай уҡ республиканың дәүләт һәм шәхси театрҙарында ижад иткән йәштәргә "Иң яҡшы эпизод", "Иң яҡшы режиссер эше", "Иң яҡшы сценография", "Иң яҡшы музыкаль биҙәлеш", "Тамашасы һөйөүе", "Театр сәнғәтенә тоғролоҡ һаҡлаған өсөн", "Ҡыйыулыҡ һәм новаторлыҡ өсөн", " Хыялға ышанған өсөн" һәм "Сикһеҙ театраль киңлек өсөн" тип аталған "Life-teatre" махсус номинациялары тапшырылды. Дәүләт Думаһы депутаты Зөһрә Рәхмәтуллинаға "Йәш театр эшмәкәрҙәренә ярҙам күрһәткәне өсөн" һәм З.Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт институты профессоры Фәрдүнә Ҡасимоваға "Үрнәк булырлыҡ шәхес" дипломдары һәм иҫтәлекле бүләктәр бирелде.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1438 һижри йыл.*

| Октябрь (Мөхәррәм) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 24 (23) дүшәмбе | 6:35 | 8:05 | 13:30 | 16:24 | 17:54 | 19:24 |
| 25 (24) шишәмбе | 6:37 | 8:07 | 13:30 | 16:22 | 17:52 | 19:22 |
| 26 (25) шаршамбы | 6:39 | 8:09 | 13:30 | 16:20 | 17:50 | 19:20 |
| 27 (26) кесе йома | 6:41 | 8:11 | 13:30 | 16:17 | 17:47 | 19:17 |
| 28 (27) йома | 6:43 | 8:13 | 13:30 | 16:15 | 17:45 | 19:15 |
| 29 (28) шәмбе | 6:45 | 8:15 | 13:30 | 16:13 | 17:43 | 19:13 |
| 30 (29) йәкшәмбе | 6:47 | 8:17 | 13:30 | 16:11 | 17:41 | 19:11 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**22 октябрь "Хыялый"** (С. Әбүҙәр), лирик комедия
**23 октябрь "Коҙаса"** (Б. Бикбай, З. Исмәғилев), музыкаль комедия
**25 октябрь "Әлифбанан бер себеш"** (А. Кивиряхк), монодрама
**25 октябрь "Бер мәл санаторийҙа..."** (Н. Гәйетбаев), комедия
**26 октябрь "Мулла"** (Т. Миңнуллин), драматик хикәйә
**27 октябрь "Антигона"** (Ж. Ануй), драма
**28 октябрь "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**23 октябрь "Чиполлино"** (Д. Родари), мажара. Башлана 12.00
**25 октябрь "Карт кейәүҙәр, йәки Шомбай ҡоҙа"** (Ф. Бүләков), фольклор комедия
**26 октябрь "Дингеҙ ярын иңләй ала эт..."** (С. Айытматов), драма
**27 октябрь "Аладдин"** (И. Казакова), әкиәт. Башлана 10.00, 12.00
**28 октябрь "Ханума"** (А. Цигарели), музыкаль комедия

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**26 октябрь "К вершинам вдохновения..."** Владимир Турченконың ижад кисәһе
**28 октябрь "Хыялдар тормошҡа ашыр ер"** (В. Акерман), комедия

ХОККЕЙ

# "АМУР"ҘЫ ЛА ЕҢДЕК БЕҘ...

## Шанхайҙы ла күрҙек беҙ

**Юлаевсыларҙың Өфөләге "Барыс" менән ҡыҙыу, сағыу, көсөргәнешле уйыны көйәрмәндәрҙең хәтерендә оҙаҡ һаҡланасаҡ. Матч башында хужалар штрафсылар эскәмйәһендә йыш "ҡунаҡлаһа" ла, осор аҙағына үҙҙәрен ҡулға алды. Беренсе осор тигеҙ иҫәп менән тамамланды. Ә икенсе һәм өсөнсө осор тулыһынса "Салауат Юлаев" ҡулында булды. Уйын иҫәбе 5:2.**

Ситтәге тәүге уйынды ла юлаевсылар үҙ файҙаһына тамамлай алды. "Амур" менән осрашыуҙа беренсе шайба Никлас Сведберг ҡапҡаһына инеп "ятты". Тик юлаевсылар иҫәпте бик тиҙ тигеҙләне. Шулай бер-береһенең үксәһенә баҫа-баҫа командалар төп уйын ваҡытын тигеҙ иҫәп менән тамамланы. Еңеүсене иһә буллит асыкланы - был матча ҡунаҡтар көслөрәк булып сыҡты. Юлаевсыларҙың тағы ла бер еңеүе - 4:5.

КХЛ составындағы яңы команда - "Кунлунь Ред Стар" менән "Салауат Юлаев" Шанхайҙа осрашты. Юлаевсылар уйын алдынан ваҡыт табып, ҡала буйлап сәйәхәт ҡылды. Һәм әлләә яңы тәьҫораттар шаҡымынан, әллә әлегәсә булған еңеүҙәре тәьҫиренән айыҡ алмай Өфө ҡунаҡтары тәүге осорҙа уҡ үҙ ҡапҡаһына ике шайба индертте. Уйын барышында юлаевсылар хужаларҙы ҡыуып етте, шулай ҙа, матч Пекин командаһы файҙаһына тамамланды - 3:2.

"Адмирал" Игорь Захаркин командаһы егеттәренең ҡысымына ҡаршы тора алманы. Төп уйын ваҡыты ла, өҫтәмә минуттар ҙа Владивоток ҡалаһында уҙған матчтың еңеүсеһен асыҡламаны. Буллитта юлаевсылар оҫталыҡ күрһәтеп, осрашыуҙы 2:3 менән тамамлауға өлгәште.

Гөлназ МАНАПОВА.

*ИҒТИБАР: АКЦИЯ!*

# ҺӘР КЕМ УҠЫРҒА ТЕЙЕШЛЕ...

## йөҙ башҡорт китабы




**"Киске Өфө" гәзитенең "Бәйләнештә" социаль селтәрендәге "Башстатус" төркөмө менән берлектә иғлан иткән "Башҡорт китабы топ-100+" акцияһына ҡушылған уҡыусыларыбыҙҙың тәҡдимдәрен һәр һанда күрһәтә киләбеҙ. Бөтәһе лә уҡырға тейешле китаптар исемлеге йәйләп үҫә бара. Әлегә ул бына нindәй:**

1. **"Урал батыр" башҡорт халыҡ эпосы**
2. **М. Аҡмулланың шиғырҙар йыйынтығы**
3. **Ҡол Ғәли "Йософ ҡиссаһы"**
4. **Ризаитдин Фәхретдин "Нәсихәттәр"**
5. **Ғайса Хөсәйенов "Тормош" һәм "Донъя" парсалар китаптары**
6. **Шәйехзада Бабич "Ғазазил" поэмаһы, шиғырҙар**
7. **Зәйнәб Биишева "Яҡтыға" трилогияһы**
8. **Һәҙиә Дәүләтшина "Айбикә" повесы**
9. **Әхмәтзәки Вәлиди "Хәтирәләр"**
10. **Һәҙиә Дәүләтшина "Ырғыҙ" романы**
11. **Мостай Кәрим "Оҙон-оҙаҡ бала саҡ" повесы һәм поэзияһы**
12. **М. Ғафури "Фәҡирлектә үткән тереклек" хикәйәһе**
13. **М. Ғафури "Шағирҙың алтын приискыһында" повесы**
14. **Ғ. Хәйри "Боролош" романы**
15. **Әхиәр Хәкимов "Өйөрмә" романы**
16. **Ноғман Мусин "Мәңгелек урман"**
17. **Ғәлимов Сәләм "Бала" поэмаһы**

**"Башҡортостан" гәзите хәбәрсеһе Таңсулпан Рәсүл "Башҡорт китабы топ-100+" акцияһы исемлегенә Яныбай Хамматовтың "Төньяҡ амурҙары" романын индерергә тәҡдим итә.**

"...Башҡорт - ирек һөйөүсән халыҡ. Ул үҙен мыҫҡылларға, кемдән булһа ла үҙен кәмһетеүгә, хурлауға күнекмәгән һәм күнекмәйәсәк тә! Башҡорт фәҡир, ярлы, ләкин ғорур! Бәхетһеҙлегебеҙ ҙә, фажиғәле яҙмышыбыҙ ҙа, һан яғынан бик күп кәмеүебеҙ ҙә үҙен кәмһеттерергә теләмәүҙән һәм баш эймәүенән ғибрәттер, бәлки, - тине Буранбай". Кем "Төньяҡ амурҙары" романын уҡыған, был һүҙҙәр уға таныш. Эйе, Яныбай Хамматов үҙенең был мәңгелек әҫәрендә фәҡәт башҡорттоң Салауат яуынан һуңғы тормошона асыҡтан-асыҡ мөрәжәғәт иткән. Беҙҙең милләттең батырлығы ла, бахырлығы ла ярылып ята унда... Юҡ, үҙ милләтемде бахыр тип әйтергә һис кенә лә йөрьәт итмәҫ инем мин, ләкин күпте күргән, ғәҙелһеҙ замандар, Икенсе донъя һуғышын үткән олуғ аҡһаҡалыбыҙҙың әҫәренә таянғанда, унда беҙ үҙ халҡыбыҙҙың нисек мыҫҡылланыуҙарын, шул уҡ осраҡта, нисек итеп Парижды алып данланғандарын күрәбеҙ. "Көс еткенеҙ һалым интектерә... Ой ҡыйыны тәңгәленә мөрйә сығарҙынмы - һалым, стенаны уйҙырып тәҙрә ҡуйҙырттынмы - һалым", - тип яҙа Янычбай Хамматов. Үткән заманға, тарихҡа бөгөнгөнән сығып баһа, ҡылыҡһырлама биреү дөрөҫ түгел, әлбиттә, шуға күрә, ул ваҡыттарҙа ата-бабаларыбыҙ ни өсөн шундай көнгә төшкән, тип әйтергә хаҡыбыҙ юҡ... Бары тик ошондай тарихи романдарыбыҙ аша асығын, ата-бабаларыбыҙ тик батыр, яугир халыҡ булғанын ғына түгел, улар ниндәй бөлгөнлөктә йәшәгән һәм ниндәй хәлдә генә булһалар ҙа рухтары нисек һынмай ҡалған - беҙ быларҙы белергә тейешбеҙ. Бөгөнгөбөҙҙөң ҡәҙерен белеү өсөн дә... Шуға күрә лә, "Һәр кем уҡырға тейешле 100 башҡорт китабы"ның алғы рәттәрендә Янычбай Хамматовтың "Төньяҡ амурҙары" романының I һәм II китабы мотлаҡ булырға тейеш, тип иҫәпләйем".

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.

# ЙӘШЛЕК - ИҪӘРЛЕК,

## ҡартлыҡ - хөртлөк

Ишленең мең ғәйебе юйылыр, янғыҙҙың бер ғәйебе мең булыр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Никахтағы ир менән ҡатын бер-береһенең уйҙары менән ҡыҙыҡһына икән, тимәк, уларҙың мөхәббәте һаҡлана әле.

**(Ричард Бах).**

Бер генә бүлкәтендә тутыҡ булһа ла, сынйырҙың ныҡлығына шик тыуа. Бер генә ҡоло булһа ла, ул илде ирекле тип атап булмай.

**(Элла Уилкс).**

Йәштәрҙең башында ниндәй кәйеф өҫтөнлөк иткәнен әйт - мин һиңә киләсәктең ниндәй буласағын әйтәм.

**(Эдмунд Берк).**

Хәҡиҡәт ҡайһы саҡта бөгөлә ул, әммә һынмай һәм һәр ваҡыт алдаҡтан өҫкә ҡалҡып сыға.

**(М. Сервантес).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер саүҙәгәр үҙенең улын иң ҙур аҡыл эйәһенә Бәхет серен өйрәнергә ебәргән. Үҫмер ҡырҡ көн буйы сүллек аша үтеп, аҡыл эйәһе йәшәгән матур һарайға барып юлыҡҡан. Ләкин аҡыл эйәһе эргәһендә шул тиклем кеше күп, ти, үҫмер ике сәғәт көтөп ултырғандан һуң ғына уның эргәһенә килә алған. Карт үҫмерҙең һүҙҙәрен иғтибар менән тыңлаған һәм уға: "Бәхет серен асырға әлегә ваҡытым юҡ, һин тағы ла ике сәғәт һарай тирәләй йөрөп тор, шунан килерһең", тигән һәм үҫмергә бәләкәй генә бер ҡалаҡ тотторған, уға ике тамсы май тамыҙған һәм: "Йөрөгән саҡта ошо ҡалаҡты һәр ваҡыт ҡулыңда тот, тик майын түгә күрмә", - тигән. Үҫмер һарай тирәһендәге баҫҡыстарҙан бер төшөп, бер менеп, ваҡыт уҙғарған, ә күҙҙәре гел ҡалаҡта булған. Ике сәғәттән әйләнеп килгәс, аҡыл эйәһе унан: "Шунан, минең ашханамдағы келәмдәрҙе күрҙеңме? Баҡсамда ниҙәр үҫә икәнен шәйләнеңме? Минең китапханамдағы матур китаптар күҙеңә салындымы?" - тип һораған. Үҫмер ҡалаҡтағы майҙы түкмәҫ өсөн башҡа бер нигә лә ҡарамауын, бер ни ҙә күрмәүен танырға мәжбүр булған. Аҡыл эйәһе: "Улай булғас, бар, минең донъямдағы мөғжизәләр менән яңынан танышып кил", - тип, үҫмерҙе сығарып ебәргән. Был юлы үҫмер ҡулына ҡалағын тотҡан көйө һарай менән танышырға сығып киткән һәм бындағы бар матурлыкты, байлыкты күреп һоҡланған. Аҡыл эйәһе янына килгәс, ул күргәндәрен ентекләп һөйләп биргән. "Ә ҡалағыңдағы ике тамсы майың ҡайҙа һуң?" - тип һораған унан аҡыл эйәһе. Үҫмер ҡалағына ҡараһа, ундағы май ағып бөткәнен күргән. "Һиңә бирә торған берҙән-бер Бәхет сере шул, - тигән аҡыл эйәһе, - донъяның мөғжизәләрен байҡағанда ҡалағыңдағы ике тамсы май тураһында онотма..."**

*ВИКТОРИНА*

# ӘҘӘБИӘТ ҺӘМ ӘҘИПТӘР

**Был юлы беҙ Әмир Әминевтың "Һуңлаған бүләк" повесы буйынса һорауҙар бирәбеҙ.**

1. **Повесть нимә тураһында?**
   а) рәссам тормошо һәм бер уның картинаһы тарихы хаҡында;
   б) рәссамға ауылдаштары тапшырып өлгөрмәгән бүләк тарихы тураһында;
   в) дөйөм һынлы сәнғәт хаҡында.
2. **Үҙенең "Ер рухы" триптихы өсөн рәссам ниндәй юғары наградаға лайыҡ була?**
   а) Башҡортостан Республикаһының Салауат Юлаев премияһы лауреаты;
   б) Башҡортостан Республикаһының халыҡ рәссамы;
   в) Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре.
3. **Төп геройҙың тыуған төйәген атағыҙ.**
   а) Өфө ҡалаһы;
   б) Әбйәлил районы Асҡар ауылы;
   в) Ғафури районы Яңы Ҡауарҙы ауылы;

**Ҡәҙерле дуҫтар! Кем дә кем 24 октябрь көндө беҙгә 246-03-24 номеры буйынса шылтыратып, ошо һорауҙарға дөрөҫ яуап әйтә, шул уҡыусыбыҙға Әмир Әминев үҙенең автографы ҡуйылған "Бер кәмәлә" исемле өр-яңы йыйынтығын бүләк итә! Йәгеҙ, кем алыҡ?**

**Викторинаны Иҙел РӘХИМОВ алып бара.**

*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*

# БЕҘҘЕҢ ҠЫҘҘАР - ЯПОНИЯЛА



**Башҡорт ҡыҙы Элина Фәсхетдинова Японияла Йәштәр симфоник оркестрында уйнай. Виолончелдә уйнаусы, халыҡ-ара конкурстар лауреаты милләттәшебеҙ Мәскәү дәүләт консерваторияһын тамамлағандан һуң Японияның Осаки ҡалаһына юллана һәм унда яңы йәш коллективта тыңлауҙар үтә.**

Музыкант әйтеүенсә, оркестрҙың яртыһы япондарҙан тора, ҡалғандары - төрлө милләт вәкилдәре. Коллектив йәш сығыш яһай, Япония ҡалалары буйлап гастролдәргә сыға. Элина Фәсхетдинова - республикала билдәле мәҙәни династияны дауам итеүсе. Уның олатаһы - танылған баянсы, республиканың халыҡ артисы Редик Фәсхетдинов, әсәһе - виолончелдә уйнаусы, уҡытыусы, Уфа махсус музыка колледжы ансамбле етәксеһе Лариса Фәсхетдинова. Элина Өфөлә Урта махсус музыка колледжында атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Марк Афанасьев класында уҡый башлай. 2009 йылда П.И.Чайковский исемендәге Мәскәү консерваторияһы янындағы Үҙәк музыка мәктәбен тамамлай. П.И.Чайковский исемендәге Мәскәү консерваторияһы ассистенты-стажеры һәм Е.Светланов исемендәге дәүләт академия симфоник оркестры артисы була. Халыҡ-ара конкурстар лауреаты.

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: **Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**

«ПечатниК» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте типографияһында баҫылды (450059, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Комсомол урамы, 27/1).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 21 октябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4417
Заказ - 1958/10